*"Бер саҡ атайым миңә шулай тине: "Улым, һин донъяға күҙ йәштәре менән тыуҙың, ә әйләнә-тирәңдәгеләрҙең барыһы ла быға шатланды. Донъя ҡуйғанда үҙең шатланырлыҡ, ә тирә-яғыңдағылар һинең үлемеңә ҡайғырып иларлыҡ итеп йәшә..." Ләкин бындай йәшәү нисек була - хәҙер кешеләр быны белмәй. Бәйләнеш өсөн шундай ҡеүәтле технологияларға эйәбеҙ, ләкин кешеләр бөгөнгө кеүек тарҡау йәшәгән башҡа заман булдымы икән?! Беҙ күпте беләбеҙ кеүек. Әммә кеше өсөн ысын бөйөклөк нимә - быныһын иһә бөтөнләй белмәйбеҙ".*

***Робин ШАРМА.***

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

19 - 25 ДЕКАБРЬ (АҠЪЮЛАЙ) 2009 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru

№51 (365)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Эскән кешеләрҙе...**

туйҙарға саҡырмағыҙ



5

**Тарихҡа ингән яҙыу,**

йәки Зәки Вәлидиҙең Ленинға хат яҙғаны



7

**Бер аҙым алға баҫам да...**

йәки "Урал" үҙгенең халҡыбыҙҙы алға әйҙәгәне тураһында



8-9

**Яңы йыл килә...**

Юлбарыҫ һынында



12

**ТВ программа**

14

### ӘЙТ, ТИҢӘГЕҘ...

## Тәмәке тартыу араҡы эсеү кеүек үк гонаһлы ғәмәлме?

***Сәйфулла ӘМИРОВ, Мәләүез районының "Көнгәк" гәзите мөхәррире:***

- Араҡы эсеүҙең төрлө боҙоҡлоҡтарға, әхлаҡһыҙлыҡҡа, хатта енәйәткә юл асыуын белмәгән кеше юҡтыр. Хәмер эсеү Ислам динендә генә түгел, христиан тәғлимәтендә лә тыйылған ғәмәлдәр рәтенә инә. Тик сиркәү был турала артыҡ һүҙ ҡуйыртмай, ҡыҙыл шарапты Христос ҡанына тиңләп, үҙе үк ошо харам эсемлекте ҡанунлаштыра. Христан руханиҙары үҙҙәре изге тип иҫәпләгән дин йортонда кешегә шарап ҡойоп эсергәс, ябай кеше эсеп иҫереп йөрөүҙе гонаһ ҡылыу, тип иҫәпләмәй.

Тәмәке тартыу менән эш башҡасараҡ тора. Тәмәке төтөнөнөң зарары шундуҡ беленмәй, ул анды ла томаламаған кеүек тойола. Ғәҙәттә, тәмәке тартыуҙы кеше ниндәй ҙә булһа боҙоҡ эштәр менән дә бәйләп ҡабул итмәй. Рәсәйҙә халыҡ элек-электән тәмәке тартмаған, әммә был насар ғәҙәт Петр I заманында көсләп тигәндәй индерелә. Ҡасандыр ил башлыҡтары, юғары ҡатлам әһелдәре тарафынан индерелгән нәмә тора-бара күнегелгән ғәҙәт-ритуалға әйләнеп, модаға инеп китә. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, был алама ғәҙәт беҙҙең халҡыбыҙҙа ла киң таралып китте. Унын зыянын белә-күрә тороп та, бик күптәр үҙ организмын ағыулауҙы дауам итә. Ә Аллаһы Тәғәлә кеше тәнен бик саф, таҙа итеп яралтҡан бит, һәм уны әшәкеләүҙе бер нисек тә яҡшы ғәмәлдәр рәтенә индереп булмай. Бәғзе берәүҙәр Ҡөрьәндә тәмәке тартыу хаҡында бер ни ҙә әйтелмәүенә һылтана. Был яман ғәҙәтте аҡлау өсөн дәлил була алмай, сөнки Ҡөрьән-Кәрим төшөрөлгән заманда тәмәке тартыу бөтөнләйгә булмаған.

Тимәк, беҙ тәмәкене мосолман өсөн харам нәмәгә тиңләп, аңлы рәүештә ошондай гонаһлы ғәмәлдән ваз кисергә тейешбеҙ.

***Миңнулла ӘЛИМҒОЛОВ, һуғыш һәм хеҙмәт ветераны, Күгәрсен районы:***

- Тәмәкенең ни өсөн харам булыуын бәләкәй сағымда миңә Шәмиғол хәлфә аңлатты. "Улым, әүәл ерҙә тәмәке үҫмәгән. Ергә иблес төшкәс, ул кесе ярау иткән урында тәмәке үҫеп сыҡҡан. Тәмәке - шайтан аҙығы, ә кешеләр шуны белә тороп, иблес ярауынан яралған нәмәне кинәнешеп тарта. Тәмәке төтөнөн һурған һайын, ул һине тамуҡ утына яҡынайта бара. Тәмәке тартһаң, мосолмандар һиңә ерәнеп ҡарар", - тигәйне олатай. Унын нисек итеп тиҫтерҙәремдә тәмәкегә ерәнеү уята алыуын әле лә онотмайым. Ауылыбыҙға бер килгәнендә ул минән сәсен, һаҡал-мыйығын ҡырҙыртҡас, 25 һум аҡса тотторҙо ла: "Мә, ҡаршылашма, ал, кискеһен урамға сыҡһаң, иптәштәреңә тәмәке алып тарттырырһың", - тип йылмайып ҡуйҙы. "Тәмәке тартһаң, гонаһ була, ярамай", - тим. "Улар бер тапҡыр ғына һурып ҡарар ҙа, ул тәмәкене төкөрөр, башҡа тартмаҫ. Һин ошо эште башҡар, йәме", - тине хәлфә. Мин ул ҡушҡанса эшләнем. Ысынлап та, ошо көндө тәмәке тартып ҡараған тиҫтерҙәрем аҙаҡ был насар ғәҙәтте үҙ итмәне. Күрәһең, Шәмиғол олатайҙың бер ғиләһе булғандыр бында.

Тәмәке харам ғына түгел, ерәнгес нәмә. Уны аҙыҡҡа тиңләү - гонаһ. Үҙҙәрен зыялы, тип иҫәпләп тә, тәмәкенән айырыла алмағандарҙың ошоно аңламауы үкенесле.

**Вәли ИҘРИСОВ яҙып алды.**

### АФАРИН!

# САЛАУАТ БАТЫР...

## исеменә лайыҡлы



**Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында милли көрәш менән шөғөлләнеүселәр байтаҡ ҡына. Яңыраҡ уларҙың береһе, 11 синыф уҡыусыһы Салауат Йосопов Ҡаҙан ҡалаһында милли көрәш буйынса үҫмерҙәр араһында үткән Рәсәй беренселегендә еңеү яулап, Рәсәй чемпионы исеменә лайыҡ булды.**

Салауат Йосопов Учалы ҡалаһында тыуып үҫкән, унын атаһы Йәлил Динмөхәмәт улын, ағалары Рәзим, Марсель, Русланды ла ошо спорт төрө буйынса Рәсәй чемпиондары булараҡ беләбеҙ. Уларға эйәреп балаҫка баҫҡан Салауат өсөн быйылғы йыл бик уңышлы булды: ул икенсе тапҡыр Рәсәй чемпионы исемен яуланы.

Ҡаҙанда үҫмерҙәр араһында үткән Рәсәй беренселегендә былтыр 27 команда сығыш яһаһа, быйыл илдең төрлө төбәктәренән һәм Беларусь, Литва, Эстония, Таджикстандан 37 команда ҡатнаша. Шулай ҙа иң көслө көрәшселәр, Салауат әйтеүенсә, Башҡортостан һәм Татарстанда. Дөйөм команда иҫәбе буйынса ла был республикаларҙың спортсылары гел алға сыға. Шуныһы ҡыуаныслы, уларға сиктәш төбәктәрҙә, мәҫәлән, Ырымбур, Силәбе өлкәләрендә лә милли көрәшкә иғтибар йылдан-йыл арта. Әйткәндәй, был бәйгелә Силәбе өсөн гимназия-интернаттың элекке уҡыусыһы, Рәсәй чемпионы Айҙар Баҡыев көрәшкән.

Көрәшеү ситтән ҡарағанда еңел генә тойолһа ла, ҙур оҫталыҡ, таһыллыҡ, көс талап иткән спорт төрө. Көрәшкән саҡта бөтә мускулдар хәрәкәткә килә, мейе яҡшыраҡ эшләй, тиҙ генә ҡарар ҡабул итергә лә өйрәнәһең. Йәрәхәт алыу ҡурҡынысы был төрҙә ҙурыраҡ булһа ла, даими күнекмәләр яһау бындай күңелһеҙлектәрҙе булдырмаҫҡа ярҙам итә. Салауат Йосоповтың фекеренсә, көрәшкән саҡта иң тәүҙә ҡурҡыуыңды еңергә кәрәк, сөнки ҡурҡаһың икән, яртылаш еңелдең, тигән һүҙ, был саҡта дөрөҫ булмаған, еңелеүгә килтергән хәрәкәт яһауыңды көт тә тор. Еңеүҙең 60 проценты ҡаршы көрәшеүсе спортсыны билбау менән нисек эләктереп алыуҙан тора.

**(Дауамы 4-се биттә).**

ИҒТИБАР

# ХӨРМӘТЛЕ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

● 2010 йылдың беренсе ярты йыллығына гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы тамамланып килә. Башҡорт телендә сыҡҡан баҫмалар араһында иң арзан хаҡ - "Киске Өфө"нөкө: 50665 индекслыһы - 306 һум 84 тин, 50673 индекслыһы (льготалыһы) - 294 һум 78 тин.

● Бүләк алыу барыбер ҙә күңелле икәнен уйлап, гәзиткә яҙылыу тураһындағы квитанцияларын редакцияға ебәреүселәргә бүләктәр отошо ла тәҡдим итәбеҙ. Ул бүләктәр араһында төҫлө телевизор ҙа, микротулҡынлы мейес тә, үтексәйнүктәр ҙә, кеҫә телефоны ла булыр. Шулай уҡ квитанцияларын тәүгеләрҙән булып ебәргән 200 уҡыусыбыҙ 2010 йылға Дини календарь алып та шатланыр.

● "Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә. Ауылдарҙа йәшәүсе ата-әсәйҙәребеҙгә, туғандарыбыҙға, яҡындарыбыҙға, дуҫтарыбыҙға, туған мәктәбебеҙгә, мәсеттәргә "Киске Өфө" гәзитен бүләк итәйек.

● Кем тыуған көнө уңайы менән "Киске Өфө" гәзите биттәрендә ҡотланырға теләй? Шулар гәзиткә яҙылып, квитанцияһын редакцияға ебәрә, тыуған көнө датаһын хәбәр итә һәм ваҡыты еткәс, гәзит биттәрендә беҙҙең ҡотлауҙы уҡып, бәләкәй генә булһа ла шатлыҡ кисерә.

**Өфөлә йәшәүселәр иһә "Киске Өфө"гә яҙылыуҙың бер нисә ысулын һайлай ала:**

● Үҙегеҙ йәшәгән йорт эргәһендә матбуғат киоскыһында яҙылыу һеҙгә бик арзанға төшәсәк, унда бер йылға ла яҙылып була.

● Аҙнаһына бер тапҡыр редакциянан килеп алып йөрөй алһағыҙ, гәзитебеҙгә редакцияның үҙендә яҙылыу ҙа уңайлы һәм арзаныраҡ: ярты йылға - 225 һум.

● Редакцияла яҙылыуҙың тағы бер төрө - коллектив менән яҙылһағыҙ, редакция машинаһы уны һеҙҙең коллективҡа үҙе килтереп бирәсәк. Тик һәр коллектив кәмендә 15-20 дана гәзит алдырырға тейеш, ул саҡта баҫмабыҙ бер йылға 373 һум 20 тингә генә төшәсәк.

**Өфөләләргә әйтер тағы бер һүҙ...**

**"Гәзиткә яҙылырға аҡсам юҡ", "Почта бүлексәһенә инергә ваҡыт юҡ", "Подъезыбыҙҙа почта йәшниге юҡ" тигән ваҡ һылтаныуҙарҙы ситкә ташлайыҡсы әле. Баҫмабыҙ тиражы аша үҙебеҙҙең баш ҡалала барлығыбыҙҙы, ҡеүәтебеҙҙе, берҙәмлекте, татыулыҡты күрһәтәйек, "Беҙ булғанбыҙ, барбыҙ, буласаҡбыҙ!" тигән күмәк тауышыбыҙҙы ишеттерәйек, гәзиз милләттәштәр!**



ПАРАДОКС



# АҒИҘЕЛДЕҢ АРЪЯҒЫНДА ҺАНДУҒАСТАР...

## аяҡтарын һәлендереп ултыра

**Пушкин даһилыҡты "парадокстың дуҫы", тип атаған, тинек. Парадоксаль һорауҙар парадоксаль яуаптар тыуҙырғанын да беләбеҙ. Хәйер, һорауы нindәй булһа - яуабы ла шундай, тиҙәр бит. Һүҙем ҡоро булмаһын өсөн бер нисә миҫал килтерәм.**

Институтта уҡығанда мәктәп практикаһы үттек. Мин Кушнаренко районының Шәрип ауылы мәктәбенә эләктем. Шунда уҡыусыларға дәрестә студенттар араһында киң таралған түбәндәге мәғәнәһеҙ һорауҙы бирҙем: "Тәмәке тартмаған әбейгә һыуытҡыс ни өсөн кәрәк түгел?" Донъяла мәктәп уҡыусыларынан да байыраҡ фантазиялы кешеләрҙе осратҡаным юҡ әлегә тиклем. Уҡыусыларым бер-бер артлы ҡул күтәрҙе һәм ҡуйылған һорауға үҙ фараз-яуаптарын яуҙырырға тотонмаһынмы. Шуларҙың хәтергә уйылып ҡалған иң ҡыҙыҡтарын һеҙҙең иғтибарға килтереп үтәм:

-"Тәмәке һатып алырлыҡ та аҡсаһы булмаған әбей һыуытҡыс һатып ала алмай инде ул...";

-"Ололар запаслы була, ә запас әйбер, ризыҡ һыуытҡыста һаҡлана. Шуға күрә әбей тәмәке тартмағас, тәмәкеләре боҙолмаҫ өсөн һаҡларға һыуытҡыс кәрәкмәй...";

-"Һыуытҡыста тиҙ боҙола торған ашамлыҡтар һаҡлана. Әбей, тәмәке тартмағас, үҙе лә тиҙ ҡартайып үлә торған кеше түгел. Шуға күрә лә ырым-юрауҙарға ышанған кеше булараҡ, әбей өйөндә тиҙ боҙолоп, эшлектән сыға торған ашамлыҡтарҙы һаҡламай һәм уларҙы ҡулланмай. Һыуытҡысы ла шуның өсөн юҡ...";

-"Мосолман әбейҙәре, ғүмүмән, тәмәке тартмай. Борон һыуытҡыстар булмаған, шулай ҙа кешеләр ашамлыҡтарҙы һыуытҡысһыҙ һаҡларға өйрәнгән", һ.б.

Ҡыҫҡаһы, бер ниндәй ҙә логикаға ҡоролмаған парадоксаль һорауға һорауҙың үҙенән дә көтөлмәгәнерәк яуаптар алыуға өлгәштем шул саҡта. Кешенең мейеһе мәғәнәһеҙ төшөнсәләргә лә шул тиклем эшләй икәнен белмәй инем әле. Шуныһы ҡыҙыҡ: мәғәнәһеҙ һорауға яуап биргәндә, уҡыусыларҙың барыһы ла яуаптарын логикаға бәйләргә тырышты, йәғни һорауҙың, мәсьәләнең янылыш, мәғәнәһеҙ бәйләнештә ҡуйылыуына иғтибар ҙа итмәне кеүек.

Ә бит төптән уйлап ҡараһаң, тормошобоҙҙа ошоға оҡшаш хәлдәр бик күп. Миҫал өсөн суд приставтарының алименттан ҡасыусы ирҙәрҙе йә ҡатындарҙы автомобиль йөрөтөүгә хоҡуҡ танытмаһын тартып алыу менән ҡурҡытыуын, янауын ғына алып ҡарайыҡ. Алименттан ҡасып йөрөүселәрҙе сит илгә сығарыуҙы сикләүҙе мин, мәҫәлән, аңлайым. Сит илгә ярлы кеше сыҡмай һәм ул алиментҡа тигән аҡсаһын сит ил ҡаҙнаһына ҡалдырып, илебеҙҙе өлөшһөҙ ҡалдыра. Ә бына хоҡуҡ танытмаһын тартып алыу мәсьәләһенә килгәндә инде... Бында инде баяғы уҡыусылар кеүек, парадоксаль хәл-ситуациялар уйлап сығарырға ғына ҡала. Мәҫәлән, шундайыраҡ:

- мин фатиремда газға ваҡытында түләй алмағаным өсөн хеҙмәт урынымдағы етәксем миңә "прогул яһаған өсөн", тип, "кисәтеү" йә "шелтә" сәпәй;

- мин эшемдәге хеҙмәттәшем менән арам боҙолған өсөн улымды әрләнем;

- кизе-мамыҡ эшкәртеү фабрикаһы директоры Фәлән Төгәнов эшселәре брак яһағаны өсөн Төмәндәге нефть участкаһы механигына үҙ дәғүәһен белдерҙе;

- студент саҡта бер Учалы һылыуы һөйләргә яраҡлан ошондай шиғыр:

Ағиҙелдең арьяғында һандуғастар
Аяҡтарын һәлендереп ултыра.
Мин дә шулай ултырыр инем,-
Әгәр булһам комбайн...

**ҠЫҪҠАҺЫ...**

**Ошондай һәм ошоға оҡшаш парадокс хәл-ваҡиғалар күп инде ул. Уларҙы күрә һәм әләктерә, аҡ ҡағыҙға һала белергә генә кәрәк. Һеҙ ҙә шундай парадокс булырлыҡ хәл-ваҡиғалар тураһында яҙып ебәрегеҙ, хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ!**

Әхмәр ҮТӘБАЙ.

# БЕР ҠОРҺАҠҠА...

## күпме фатир һыйған икән?

**Күптән түгел гәзиттәрҙән, Рәсәйҙең данлыҡлы байы Абрамович йәш ҡатыны менән АҠШ ресторанында 1 миллион ярым долларлыҡ хаҡҡа ашап, эсеп сыҡҡан, хатта ки хеҙмәтләндереүсе официанттарға 3 мең доллар сәйлек тә биргән, имеш, тип уҡыным. Әллә дөрөҫ уҡымайыммы икән, тип, күҙлегемде сисеп тә, кейеп тә, ултырып та, тороп та уҡыным. Юҡ, шулай тип яҙылған.**

Нисек инде, көндө-төнгә ялғап йәнтәслим хеҙмәт иткән типһә тимер өҙәрҙәй ир-егеттәр ил тултырып йөрөгәндә, күптәр эшһеҙ ҙә, ашһыҙ ҙа, йортһоҙ ҙа интеккәндә, бер ултырыуҙа ғына ике булмәле фатир хаҡын ашап сығып була икән? Тәмле ашарға яратыусылар, Абрамович ниндәй тәмлекәс ашаны икән, тип уйлағандыр, ә мин был ҡорһаҡҡа күпме фатир һыйҙы икән, тип иҫәпләү өсөн ҡулға ҡәләм алдым.

Көнөнә өс тапҡыр ашаймы икән Абрамович та? Ярар, өстән алғанда ла, 1 миллион ярым долларҙы өскә ҡабатлайыҡ, 4 миллион ярым доллар була. Бер айҙа, бер йылда былар күпме йыйыла? Юҡ, баш етерлек түгел! Һәр хәлдә, ил һаҡлап елкәләре сейләнгән хәрбиҙәргә фатирлы итеп булыр ине был аҡсаға, тигән һығымта яһаным. Ә бөтә Рәсәй байҙарының төшкө ашҡа киткән аҡсаларын бергә ҡушһаң... Теге М. Горбачев ағайым "2000 йылда бөтәгеҙ ҙә фатирлы булаһығыҙ" тигән нәмә буш хыял булмаған икән, олигархтар ҡорһағына киткән икән ул фатир аҡсалары...

Ярар, нишләйһең, Әхирәттә барыбер мәңгелек тамуҡ кисәүе буласаҡ бит ул Абрамовичтар, ә беҙҙәргә Хоҙай сәләмәтлек, именлек бирһен.

Фәүзиә ЙӘНТИЛИНА.

# Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев 2010 йылдың 23-24 ғинуарында Өфөнөң "Строитель" стадионында боҙҙа мотоуҙыш буйынса Европа чемпионаты үткәреү тураһындағы бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы. Ул Ғабдрахман Ҡадыров исемендәге спорт клубы ойоштороулоуҙың 10 йыллығына арналасаҡ. Чемпионатты Башҡортостандың баш ҡалаһында ойоштору тураһындағы тәҡдим менән Европа мотосоюзы сыҡҡан булған.

✔2010 йыл Рәсәйҙә Уҡытыусы йылы тип иғлан ителә. Башҡорт дәүләт педагогия университетында ошо тематик йылды тантаналы асыу булды. Ошо йыл уңайынан республикала уҡытыусыларҙың профессиональ оҫталыҡ конкурстары, шулай уҡ БР Уҡытыусылар съезы, "Йылы мәктәп" тип исемләнгән республика акцияһы үткәреү планлаштырыла, тип билдәләнде.

✔Рәсәйҙәр хәҙер төрлө хеҙмәттәрҙе Интернет аша ала башлаясаҡ. Дәүләт хеҙмәттәре күрһәтеү буйынса берҙәм портал (www.qosusluqi.ru) аша әлегә ҡайҙа ниндәй хеҙмәттәр күрһәтелә һәм уны алыу өсөн ниндәй документтар кәрәк икәнлеге тураһында ғына мәғлүмәт алып була. Аҙаҡ бында хеҙмәт төрҙәре буйынса бланкылар алып, уларҙы порталда уҡ тултырып буласаҡ. Яңы йылдан был портал рәсәйлеләргә 300-ләп федераль хеҙмәт күрһәтәсәк. Мәҫәлән, унда паспорт, социаль ярҙам, төрлө путевкалар, пенсия алыу өсөн бланкылар һәм мәғлүмәттәр, шулай уҡ һалым тураһында мәғлүмәттәр ҙә алып буласаҡ.

✔Баймаҡ ҡалаһының "Батыр" физкультура-һауыҡтырыу комплексында 1994-1995 йылғы спортсылар араһында бокс буйынса Көньяҡ Урал Кубогы булып үтте. Унда Башҡортостандан, Татарстандан, Ырымбур һәм Силәбе өлкәләренән 16 командала йөҙләп боксер ҡатнашты. Турнирҙа еңеүселәрҙең барыһы ла - Башҡортостандан.

✔"ТӨРКСОЙ" халыҡ-ара төрки мәҙәниәт ойошмаһының Генераль секретариаты һәм Истанбул университетының Евразия институты 21 декабрҙә Төркиәнең баш ҡалаһында Әхмәтзәки Вәлидиҙең хәтер көнөн уҙғара. Унда ғалимдың ҡыҙы, профессор Иҫәнбикә туғандың, уның уҡыусыһы Гюльчин Чандарлыоглуҙың сығыштары көтөлә. Сара сиктәрендә 2002 йылда "Башҡортостан" телерадиокомпанияһының "Хазина" иждат берекмәһе төшөргән "Тарих яҙыр инем ташына" фильмы күрһәтеләсәк.

АҘНА ШАҢДАУЫ

# ЭЙ, ЙОМАРТЪЫҢ ДА ҺИН, ДӘҮЛӘТЕМ!

## Алыҫ Көнсығыш, абхаздар өсөн 50 миллион доллар йәл түгел

**Мөфтөй генә тиһәм, хәтере ҡалып ҡуйыр, юғары мөфтөй Тәлғәт ағай Тажетдин беҙгә, йәғни башҡорттарға һәм ҡан-ҡәрҙәштәребеҙ татарҙарға яңы Ватан тапҡан. Алыҫ Көнсығышҡа оҙатырға самалай ул беҙҙе. Ҡытай яуына ҡаршы ҡалҡан булып торорға тейешбеҙ, тимәк.**

Ҡытай беҙҙең менән ҡорал тотоп һуғышырға йыйынмай әлегә. Әммә Рәсәйҙең Алыҫ Көнсығышын баҫып алып бара, имеш. Урыҫ тайгаһында Конфуций һәм Мао Цзе Дундың нәселдәре тулып йөрөй, йәнәһе. Улар Рәсәйҙең Уралғаса өлөшөн бүлеп алыу тураһында һүҙ алып бармай барыуын. Шулай ҙа Рәсәйҙең милли именлегенә билдәле бер ҡурҡыныс булып тора. Йәғни, урыҫ ҡыҙҙарына өйләнә, фатир һатып ала, балалар үрсетә. Беҙҙә бит, Ҡытайҙан айырмалы рәүештә, бала тапҡандарға дәүләт аҡса түләй. Унда иһә, бер баланан артығыраҡ тапҡандарға дәүләт ҡаты штраф һала. Ер юҡ Ҡытайҙа. Ҡыҫынҡы. Тар. Ә Себер һәм Алыҫ Көнсығышта иркен. Кеше юҡ, тиерлек. Шуға ла улар бында ынтыла. Ер эшкәртергә әҙер. Кейәүгә сыға алмай яңғыҙ ултырған урыҫ ҡатын-ҡыҙҙарына өйләнергә ҡулдары ҡысып тора. Хатта Рәсәй гражданлығын алырға ҡаршы түгелдәр икән. Насармы ни? Дәүләтебеҙҙең тарихын ғына алып ҡарайыҡ. Мәскәү тирәһендәге ерҙәрҙән генә торған Рустың бөйөк Рәсәйгә әүерелеүе татарҙарҙы көсләп яулап алыуҙан һәм башҡорттарҙың үҙ теләге менән ҡушылған мәлдән башланған түгелме? Эйе лә баһа! Рәсәй күптән инде башҡа халыҡтарҙы үҙенә ҡушыу (көсләпме, түгелме - уныһы икенсе мәсьәлә) иҫәбенә арта ла баһа. Илебеҙ нисәмә йөҙ йыл урыҫ дәүләте генә түгел. Абазин һәм алеуттарҙан алып, юкагир һәм яҡуттарға тиклем йөҙләгән милләттәр араһына ҡытайҙар ҙа килеп инһә, насармы ни? Эйе, Рәсәй халҡының милли йөҙө (йәғни, һыҙаттары) бер ни тиклем үҙгәрәсәк. Күҙҙәре нығыраҡ ҡыҫыласаҡ, биттәр тағы ла нығыраҡ йомроланасаҡ. Ҡурҡынысы юҡ һымаҡ. Тик ҡайһы бер сәйәсмәндәр ҡытайҙарҙың Алыҫ Көнсығышҡа күсеп килеүе Рәсәйҙең именлегенә һәм киләсәгенә янай, тип фаразлай. Тимәк, меңәрләгән гектар ер эшкәртелмәй ятһа, ҡыҙҙар кейәүгә сыға алмай, бала таба алмай ҡартайһа, был илебеҙ өсөн афәт түгел.

Тәлғәт Тажетдиндың планы ниндәйерәк һуң, тип һорарһығыҙ. Яп-ябай - ул берәр миллион татар һәм башҡорт ир-егетен Алыҫ Көнсығышҡа оҙатып, уларҙы ҡытай ҡыҙҙарына өйләндермәксе. Был аҙым, уның фекеренсә, илебеҙҙең көнсығыш сиктәрен һаҡлап алып ҡалырға булышлыҡ итер ине. Әйтегеҙ әле, был ихтирамлы һәм, һис шикһеҙ, оло абруйлы кешенең фекерҙәре икенсе бер "авторитет"тың элегерәк әйткән һүҙҙәре менән ауаздаш түгелме шул? Әллә яңылышаммы? Тик Жириновский әфәнде беҙҙе (һәм, әлбиттә, әлеге лә баяғы татарҙарҙы) Монголияға оҙатырға ниәтләгәйне, Тажетдин ағабыҙ ваҡланып торманы, тотош Алыҫ Көнсығышты тәкдим итте лә ҡуйҙы. Улар әллә икәүләшеп бер һаҙҙың һыуында тәһәрәт алалар инде?

Был эштең тағы ла бер бәләкәс кенә әтнәкәһе бар, йәмәғәт. Хөрмәтле Тажетдинды, ҡайһы саҡ уйламайыраҡ һөйләп ебәреүен иҫәпкә алғанда, ғәфү итергә лә мөмкин булыр ине. Алла бәндәһе бит. Ә бына уның ошо фекерҙәрен бер түгел, ҡабат-ҡабат, (түгеһе Ҡорбан байрам унайы менән, икенсе иһә - үткән аҙнала ғына) тап ошо һүҙҙәрен өҫкә сығарып, эре шрифт менән баҫтырып сығарған гәзиттең был эшен нисек аңларға мөмкин? Күрмәгәндәр - күрһен, белмәгәндәр - белһен, тип эшләндеме был? Тажетдиндан көләләрме улар, әллә Рәсәйҙең урыҫтарҙан ҡала иң эре ике милләтенәме?

Беҙ уға ғына күнеккән, беҙҙең ата-бабаларыбыҙ танау япраҡтарын, телдәрен йолҡоп алыуға түҙгәндә, беҙ быға ғына түҙербеҙ әле. Парижға барып еттек, француздарҙы күрҙек, Берлинға барып еттек, фашистарҙы ендек, Ҡытайҙы ла кәрәк булһа, һы... енербеҙ әле. Шулай бит, йәмәғәт?

Енеү тигәндән, илебеҙҙең халыҡ-ара кимәлдәге сираттағы еңеүе хаҡында ишеттегеҙме әле? Юҡмы ни? Белмәһәгеҙ - белегеҙ, Абхазияның һәм Көньяҡ Осетияның бойондороҡһоҙлоғон Рәсәйҙән, Никарагуанан һәм Венесуэланан тыш, тағы ла бер дәүләт таныны. Науру республикаһы тип атала икән ул. Бер ҙә ишеткәнегеҙ юҡ, тиһегеҙме? Быға тиклем мин дә ишеткән юҡ ине. Ҡайҙа урынлашҡан ул, тип баш ватаһығыҙмы? Әлегә хәтлем мин дә белмәй инем. Ул Ер шарындағы иң бәләкәй дәүләт, имеш. Майҙаны 21 квадрат километр. Халҡы ҡайһы бер мәғлүмәттәр буйынса 11.300, икенсе сығанаҡтарға ярашлы ни бары 18 мең самаһы. Экватор һыҙатынан көньяҡҡа, Соломон утрауҙарынан төньяҡҡа табан урынлашҡан бәләкәй генә бер ер киҫәге булып сыҡты Науру. Утрауҙың яр буйының оҙонлоғо - 30 саҡрым. Тирәяҡта - океан. Хөрриәт! Тик дәүләттең ҡаҙнаһы ғына бушыраҡ. Был шарттарҙа Науру республикаһы етәкселегенә Абхазия менән Көньяҡ Осетияның үҙаллылыҡ иғлан итеүҙәре күктән төшкән бүләк кеүек булғандыр инде.

Хәтерегеҙгә төшөрәйем - иң тәүҙә был ике Кавказ республикаһының бойондороҡһоҙлоғон Рәсәй Федерацияһы таныны. Аңлашыла - халыҡ-ара кимәлдә бәйләнештәр урынлаштырыу, ә иң мөһиме, Рәсәйҙең донъялағы абруйын арттырыу өсөн был ғына етмәй. Беҙҙең илебеҙ бит башлаған эшен аҙағынаса еткереп өйрәнгән. Шуға ла Рәсәй менән хеҙмәттәшлек итергә ынтылып торған дәүләттәрҙе барлау башланды. Тәүҙә эргә-тирәләге илдәр менән һөйләшеүҙәр алып барылды. Шуныһы гәжәп: был ике яңы дәүләтте хатта Рәсәйҙең ут күршеһе, беҙҙең менән газ торбалары аша айырылғыһыҙ итеп тоташҡан Беларусь та танырға ашыҡманы. Башҡа элекке совет республикалары хаҡында әйтеп тораһы ла түгел. Ә бына Көньяҡ Американың ике дәүләте - Никарагуа һәм Венесуэла башлыҡтары Абхазия менән Көньяҡ Осетияның бойондороҡһоҙлоғо өсөн Рәсәй вәғәҙә иткән матди ярҙамдан баш тартманы. Бәлки, Беларусь президенты Александр Лукашенко ла беҙҙән күберәкте өмөт итәлер?

Ғөмүмән, илебеҙ теге йәки был сәйәси акцияға миллионлап йәки миллиардлап аҡса түгә башлаһа, уны етәкселәребеҙ ҡайҙан ала икән, тигән һорау ҡалҡып сыға. Билдәле булыуынса, бер ерҙә кәмеһә, икенсе ерҙә арта бит. Тимәк, Никарагуа, Венесуэла һәм Науру дәүләттәренең ҡаҙнаһында бер нисә тиҫтә миллион доллар артһа, улар беҙҙең илебеҙҙең ҡаҙнаһынан юҡҡа сыға булып сығамы?

Ошо унай менән түрәләребеҙгә Абхазия һәм Төньяҡ Осетия менән бәйле мәсьәләне хәл итеү буйынса бер тәҡдимем бар. Минеңсә, бик унайлы һәм бөтә яҡтар өсөн дә файҙалы ул. Беренсе этапта Рәсәй үҙенең составындағы милли республикаларҙы үҙаллы дәүләттәр тип иғлан итергә һәм уларҙың үҙаллылығын танырға тейеш. Артабан иһә улар, милли республикалар, тимәксемен, Рәсәйҙән аҡсаһына кемде кәрәк, шуларҙы таныясаҡ. Дәүләтебеҙҙең ҡаҙнаһындағы аҡса бит барыбер беҙҙән, йәғни ябай кешеләрҙең кеҫәһенән сыҡҡан һалымдар иҫәбенә тупланған. Науруға мөмкин булғаны беҙгә мөмкин түгелме әллә?

**Аңлап тораһығыҙҙыр өҫтә әйтеп үтелгән юғары урын биләгән мөфтөй кеүегерәк фекер йөрөтә башлағанымды. Эйе, йәмәғәт, минең дә фантазиям ҡайһы саҡ самаһынан сығып шашып китә шул. Ғәфү итһәгеҙсе мине, йәмәғәт.**

**Таһир ИШКИНИН.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# КӨЙӨН БОҘА-БОҘА... кем йыр һуҙа?

**Элек филармонияла "Художество советы" тип аталған ойошма эшләне, бар сығыштар сәхнәгә сығарыр, халыҡҡа еткерер алдынан уның иләге аша үтә ине.**

Әле сәхнәлә барған сығыштарға Мәҙәниәт министрлығы ла ҡыҫылмайҙыр, ниндәйҙер тикшереү ойошмаһы ла юҡ һымаҡ тойола миңә. Бына бер йырсы "Бейеш" йырын ҡыҫҡартып, таҡмаҡҡа оҡшатыбыраҡ башҡарҙы, ә икенсеһе "Кәкүккәй" йырын бөтөнләй икенсе көйгә һалып йырланы. Иң аяныслыһы шул: боҙоп йырланған йырҙар, бәйләнсек дошман кеүек, башты, күңелде өйкәп, хәтергә һеңеп ҡалыусан. Төкөрөнөп, һүкранып, ул боҙоҡтарҙан ҡотола алмай, шаңҡып йөрөлә. Шағирәбеҙ Тамара Ғәниева яҙғанса:

Донъя болартам тип сыҡҡан елдәр,
Көйөн боҙа-боҙа моң һуҙа...

Ата-бабаларҙан ҡалған хазиналарыбыҙҙы - йыр-моңдарыбыҙҙы боҙмай, саф үҙенсәлеге менән еткерһәк ине лә бит киләһе быуындарға. Музыкаль белеме булмаған оло быуын кешеһе булһам да, ҡан хәтере һыҡтай был төҫкә лә матур, тауышы ла һәйбәт йырсыларҙың ғәмһеҙлеген күреп. Ә сәхнәгә кейеп сыҡҡан ялтыр-йолтор, аҫылынып торған сыбар кейемдәрҙе кем тегә?

Минеңсә, филармония - ул махсус белемле йырсы, бейеүселәр ойошмаһы, иң ҙур һөнәткә эйә булған артистарҙың классик ойошмаһы булырға тейеш. Һәүәҫкәрлектән бер баҫҡысҡа юғарыраҡ урын биләнергә тейеш бында. Йырҙарыбыҙҙы кем нисек теләй, шулай үҙгәртеүгә юл ҡуйылмаҫҡа тейеш...

Бер рәссамдан: "Һеҙ юғары кимәлдәге оҫта, бындай оҫталыҡҡа нисек өлгәшһәгеҙ, ниндәй маҡсат ҡуйып ижад итәһегеҙ?" - тип һорайҙар. Ә ул: "Һәр эшемде музей комарткыһы булырлыҡ кимәлдә башҡарыу - минең хыялым", - тип яуап бирә. Һәр йырсы башҡарған йырын комарткылар фондында ҡалырлыҡ итеп башҡарһа, шәп булыр ине.

**Айгөл АХУНОВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Үтеп барған йылда республикала 27,3 мең әсәлек капиталы сертификаты бирелгән. Был былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 1,3 тапҡырға күберәк. 4604 ғаилә әсәлек капиталы аҡсаһын торлаҡ кредиттары өсөн түләүгә тотонорға ҡарар иткән. Был 1,2 млрд һум, тигән һүҙ. Бынан тыш, әсәлек капиталынан 12 мең һум түләү алыуға 57 мең ғариза бирелгән. 51176 ғаилә был аҡсаны алған да инде.

✓Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу башланыуға 300 көн ваҡыт ҡала. Ул 14-нән 25 октябргә тиклем "Рәсәйҙә һәр кем мөһим" тигән девиз аҫтында үткәреләсәк. Киләһе йыл халыҡ иҫәбен алыу донъяның етмеш илендә үтәсәк.

✓Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры 14-24 декабрҙә Санкт-Петербургта үтәсәк "Раштыуа парады" халыҡ-ара театрҙар фестивалендә "Близость" спектакле менән ҡатнаша.

✓БР буйынса Эске эштәр министрлығы мәғлүмәттәре хәбәр итеүенсә, быйыл ун бер айҙа республикала барлығы 70 мең енәйәт ҡылынған, был былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 3,1 процентҡа кәмерәк. Енәйәттәрҙе асыу һөҙөмтәләлеге 65,4 процентҡа күтәрелгән, дөйөм Рәсәй буйынса был күрһәткес 56,5 процент тәшкил итә.

✓Яңы йыл алды көндәрендә Куйбышев тимер юлының Башҡортостан бүлексәһе ҙур һорау менән файҙаланған маршруттар - Өфөнән Шишмә, Иглин, Благовар, Өршәк, Оло-Тәләк станцияларына тиклем һигеҙ өҫтәмә ҡала яны электропоездарын әйләнешкә индерә.

✓Словенияла биатлон буйынса III Донъя кубогы старт алды. Унда егерме км-ға ирҙәр индивидуаль ярышы үтә һәм унда беҙҙең Максим Чудов та ҡатнаша.

✓Ғинуарҙағы ун көнлөк каникулдар ваҡытында Рәсәй почтаһы пенсияларҙы һәм башҡа социаль түләүҙәрҙе ваҡытында килтерәсәк. Пенсия фонды менән килешеү нигеҙендә почтальондар 1-4 ғинуарҙа түләнергә тейешле пенсияларҙы һәм пособиеларҙы декабрҙә үк таратасаҡ. 5-10 ғинуарҙа түләү ҡаралған пенсиялар һәм пособиелар билдәләнгән графикҡа ярашлы таратыласаҡ. 7-9 ғинуарҙа таратылырға тейешле пенсиялар ваҡытынан алдараҡ биреләсәк.

ҮӘТ ӘЙ!

# ТАҒЫ БЕР БӘЛӘ... балалар башын бутай

**Тәмәке итеп тартыу, кальян булараҡ ҡулланыу өсөн тәғәйенләнгән ҡатышмаларҙы легаль наркотик, тип әйтергә була. Уларҙың психотроп тәьҫире һәм составы буйынса наркотикҡа яҡын тороуы хаҡында хәҙер барыһы ла белә. Өфө ҡала округы хакимиәтендә был көндәрҙә булған матбуғат конференцияһында ла ошо ҡатышмалар тураһында һүҙ барҙы.**

Ысынлап та, Рәсәйҙә үҫмерҙәрҙең тартыу ҡатышмаһын ҡулланып, күпләп ағыуланыуы күҙәтелә. Бигерәк тә был проблема Урал һәм Волга буйы төбәктәрендә киҫкен тора. Күрше Татарстанда һәм Түбәнге Новгород ҡалалары дауаханаларында ҡатышма менән ағыуланған 50 ауырыу дауалана.

Беҙҙең республикала ла был проблема юҡ түгел. Һуңғы ике йылда ҡулланыу баҙарында урын алған "хуш еҫле" ҡатышмалар тиҙ арала үҫмер һәм йәштәр араһында киң таралыу тапты. Уларҙы ҡулланыусыларҙа эйфория, галлюцинация, психикаға һәм организмға насар тәьҫир итеүсе агрессив ҡылыҡтар күҙәтелә. Наркобойондороҡлолоҡ барлыҡҡа килә. Ҡатышмалар киптерелгән һәм ваҡланған үҫемлек булараҡ таратыла. Сит ил тикшеренеүҙәре бөтә тартыу ҡатышмалары нигеҙендә синтетик каннобоид ятыуын иҫбатлаған. Синтетик каннобоид баш мейеһе рецепторҙарына насар тәьҫир итә һәм үҙенең тәьҫире буйынса үҫемлек нигеҙендәге психотроп каннобоидтарҙан да көслөрәк.

Һуңғы йылдарҙа донъяның күп илдәре был матдәләрҙең әйләнешенә ҡаршы закондарҙы көсәйтте. Апрелдә Рәсәйҙең баш дәүләт санитар табибы Г.Онищенко "Тарта торған ҡатышмалар һатыуҙы күҙәтеүҙе көсәйтеү тураһында" ҡарар ҡабул итте. Ҡарар нигеҙендә составында зәңгәр лотос, Гавай раузаһы һәм күрәҙәсе шалфейы булған "Спайс", "Эксцесс" ҡатышмаларын һатыу тыйылды. Уларҙың составында психотроп һәм наркотик матдәләр булыуы асыҡланған. "Роспотребнадзор"ҙың Башҡортостан идараһы 15 сауҙа үҙәгендә тикшереүҙәр үткәргән. Тикшерелгән объекттарҙың унында тыйылған ҡатышма табылған. Уларҙың күбеһе "Спайс" маркалы ҡатышманың төрҙәре.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Наркотиктар әйләнешен контролдә тотоу буйынса федераль хеҙмәт рәйесе Виктор Иванов "Спайс" һәм шуға оҡшаш башҡа психотроп препараттар Рәсәйҙә тулыһынса тыйыласағы тураһында белдерҙе. Улар иң ҡурҡыныс наркотиктарға тиңләштереләсәк. Тартыу өсөн тәғәйенләнгән ҡатышмаларҙы тыйыу буйынса закон пакеты әҙерләнгән дә инде, ул ошо көндәрҙә Рәсәй Хөкүмәтенә тапшырыласаҡ. Закон ҡабул ителгәс, наркополиция һәм Эске эштәр министрлығы хеҙмәткәрҙәре был ҡатышмаларҙы һатыусыларҙы, таратыусыларҙы героин менән менән шөғөл итеүселәр кеүек үк фашлап, иркенән мәхрүм итә аласаҡ.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЙӘШТӘРГӘ ЮЛ АСЫҠ

**Ҡала мәҙәниәт һарайында Башҡортостанда йәштәр инициативаларын хуплау һәм үҫтереү йылына тантаналы рәүештә йомғаҡ яһалды.**



Йылды барлаған саҡта, баш ҡала йәштәре тормошонда ғорурланып һөйләрлек байтаҡ әһәмиәтле ваҡиғалар булып үтеүе билдәләнде. Әйтәйек, апрель айында Өфө ҡала Советы эргәһендә Йәштәр йәмәғәт палатаһы барлыҡҡа килгән. Баш ҡаланың предприятие һәм ойошмаларында эшләп йөрөүсе йәштәр араһында "Яҡшыларҙан иң яҡшыһы" конкурсы ойошторолған. Ә бына Өфө ҡалаһының 141-се һанлы урта мәктәбе уҡытыусыһы Гөлназ Мөхәмәтйәнова өсөн быйылғы йыл бөтә төр еңеүҙәргә лә бай булған. Күптән түгел ул Мәскәү ҡалаһында үткән Бөтә Рәсәй туған тел уҡытыусылары конкурсында ҡатнашып, иң яҡшы туған тел уҡытыусыһы исеменә лайыҡ булды. Өфөлә хоккей уйындары өсөн боҙ майҙансыҡтары төҙөлә. Дөйөм алғанда, быйыл ҡыш Өфөлә 69 хоккей ҡумтаһы һәм 30 йорт алды боҙ майҙансыҡтары эшләргә тейеш. Әлеге көндә 51 хоккей ҡумтаһы әҙер һәм тағы ла 17-һе эшләнеү өҫтөндә.

Ҡала башлығы Павел Качкаев сарала ҡатнашыусыларҙы сәләмләп, йылға былай тип йомғаҡ яһаны: "Йыл ни тиклем генә ҡатмарлы булмаһын, беҙ ҡуйған маҡсаттарға өлгәштек. Иң мөһиме, беҙ социаль программаларҙы тормошҡа ашырыуҙы һәм киләсәк йәш быуынды хәстәрләүҙе онотманыҡ".

# ТАМЫРҘАРҘЫ БАРЛАУ

**Республика кимәлендәге иң яҡшы шәжәрә төҙөү конкурсы еңеүселәрен ҡотлау тантанаһы Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры сәхнәһендә үтте.**



Конкурс Башҡортостан Республикаһының Мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министрлығы һәм Республика халыҡ ижады үҙәге тарафынан ойошторолғайны. Конкурс һөҙөмтәләре биш номинацияла билдәләнде. "Шәжәрәне ентекле һәм тулы өйрәнгән өсөн" номинацияһында беренсе урын Баймаҡ районынан Бикмөтовтар ғаиләһенә бирелде. "Иң тәрән тамырлы шәжәрә" номинацияһында беренсе урынға Ауырғазы районы Моразым ауылы кешеләренең мең-меркет ырыуының аҫаба башҡорттары шәжәрәһе тураһындағы коллектив эше сыкты. "Шәжәрә төҙөгән һәм өйрәнгән ваҡытта фәнни асыш өсөн" номинацияһында Ауырғазы районынан Мәғсүм Йәғәфәров һәм Мөҙәрис Сафин еңеп сыкты. "Шәжәрә биҙәгәндә оригиналлек һәм ижади ҡараш" номинацияһында беренсе урынды Дыуан районынан Алексей Осипов яуланы. "Шәжәрә төҙөгәндә ғаилә ҡомартҡыларын ҡулланған өсөн" номинацияһында иң яҡшылары тип Әбйәлил районынан Азия Ниязова менән Илмира Мирхәйҙәрова табылды. Шулай уҡ ойоштороусылар тарафынан үҙҙәренең номинацияһында беренсе һәм икенсе урын яулаусылар, шулай уҡ 14 дипломант билдәләнде. Республикабыҙҙа йәшәүселәр араһында үҙенең шәжәрәһен өйрәнеүселәр һаны йылдан-йыл арта бара. Шәжәрә байрамдары Башҡортостандың күп ҡалаларында һәм ауылдарында ойоштоpола һәм хәҙер инде ул быуындар мираҫын һаҡлауға, йолалар берлегендә ғаилә ептәрен нығытыуға, үҙенең ырыуының, халҡының һәм тыуған еренең тарихын өйрәнеүгә йүнәлтелгән изге йолаға әйләнде.

АФАРИН!

# САЛАУАТ БАТЫР... исеменә лайыҡлы

**(Аҙағы. Башы 1-се биттә).**

Гимназия-интернат уҡыусыларын быларҙың барыһына ла милли көрәш буйынса бер нисә тапҡыр республика һәм Рәсәй чемпионы Йәлил Йосопов өйрәтә. Әлеге мәлдә милли көрәш секцияһында 25-30-ға яҡын уҡыусы шөғөлләнә. Күнекмәләр ваҡытында көрәшеү оҫталығы нығына ла, тәжрибә тупланып, шулай уҡ "беренселәр" республикала үткәрелгән бар ярыштарҙа ла ҡатнашырға тырыша. Тап гимназия көрәшселәре өсөнсө йыл рәттән мәктәп уҡыусылары араһында беренсе урынды бер кемгә лә бирмәй. Быйыл үҙҙәрендә республика гимназиялары һәм лицейҙары араһында беренселек тә үткәргәндәр. Унда иң көслө команда исемен Йәлил Динмөхәмәт улының тәрбиәләнеүселәре яулаған, гимназия уҡыусылары араһынан 8 ауырлыҡ категорияһында 6 чемпион, 2 призер булған.

Салауат киләсәктә юридик белем алып, эшенә лә, көрәш менән шөғөлләнеүгә лә ваҡыт табырға ниәтләй. "Спортта тәрбиәләгән һәм нығынған ыңғай сифаттар: түҙемлелек, сыҙамлыҡ, хис-тойғоларыңды тота белеү эшләүҙә ярҙамында прокурор булып эшләй алыр инем. Етмәһә, һәр спортсы яҡшы психолог та", - ти ул. Батыр егет атаһының юлын дауам итеп, балаларҙы көрәшергә өйрәтергә лә хыяллана.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ниндәй ҙә булһа спорт төрө менән шөғөлләнеү йәштәребеҙҙе урам ҡыҙырып, бушты-бушҡа ауҙарып йөрөүҙән генә түгел, ә насар ғәҙәттәрҙән аралаусы ысулдарҙың береһенә әүерелә барған саҡта, Салауат һымаҡ егеттәребеҙҙең уңыштары бик күптәрҙе яңы үрҙәр, яңы бейеклектәр яуларға дәртләндермәй ҡалмағандыр, моғайын.**

**Әйткәндәй, РФ Президенты Дмитрий Медведев ҡарары менән "Мәғариф" өҫтөнлөклө милли проект сиктәрендә күрһәтелгән һәләтле йәштәргә дәүләт ярҙамы программаһы йыл һайын Рәсәйҙең төрлө төбәктәрендә йәшәүсе 5350 йәш талантты билдәләй. Быйыл улар араһында Салауат Йосопов та дипломға һәм аҡсалата бүләккә лайыҡ булды.**

Ләйсән НАФИҠОВА.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө ҡала округы хакимиәтендә "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы БР Законын ғәмәлгә ашырыу буйынса комиссияның сираттағы ултырышы булып үтте. Хакимиәт башлығы Павел Качкаев алып барған ултырышта Киров һәм Октябрь райондары хакимиәттәре башлыҡтары Ю. Ильясов, В. Дмитрюкһын, шулай һаулыҡ һаҡлау идаралығы начальнигы В. Викторовтың Закон үтәлеше буйынса мәғлүмәттәре тыңланды. Билдәләнеүенсә, баш ҡала ойошмалары, предприятиелары һәм учреждениелары атамаларында, алтаҡталарында ғына түгел, уларҙың мисәттәрендә, рәсми бланкыларында ла башҡортса һәм русса яҙыуҙарҙа хаталар осрап тора.

✓Өфө прокуратураһы кешеләр күпләп ял итә торған 59 объектты тикшерҙе. Ҡала прокуроры Рәмил Хәлимов хәбәр итеүенсә, тикшереүҙәр һөҙөмтәһендә 58 объектта янғын хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләрен һәм нормаларын боҙоу осраҡтары асыҡланған, ошоға бәйле 91 административ эш ҡуҙғатылған. 29-ының, шулар иҫәбенән "Дуҫлыҡ" ресторанының, "Амакс" төнгө клубының, Ленин урамындағы "Макдоналдс"тың, "Наутилус" клубының, "Правда" төнгө клубының эшмәкәрлеген туктатыу тураһында процедура башланған.

✓Совет районының 17-се китапханаһында "Милли матбуғат аҙналығы" сиктәрендә республика һәм баш ҡала матбуғат баҫмаларының мәктәп уҡытыусылары һәм уҡыусылары менән осрашыуы булып үтте.

✓24 декабрҙә Мотор эшләүселәр мәҙәниәт һарайы майҙанында Калинин районында йәшәүселәр өсөн Яңы йыл шыршыһы асылды. Был майҙанда мәҙәни-күңел асыу һәм спорт саралары 15 ғинуарға тиклем дауам итәсәк. Был көндә шулай уҡ Инорс һәм Шакша биҫтәләрендә лә Яңы йыл шыршылары асыла.

✓Ленин район хакимиәте үҙ биләмәһендәге ун дүрт йәше тулған граждандар өсөн байрам ойошторҙо. Хакимиәт башлығы Николай Солодовников менән Федераль миграция хеҙмәте идаралығының Ленин районы буйынса бүлек начальнигы Зөлфиә Ғайсина уларға тантаналы шарттарҙа паспорт тапшырҙы.

*НИКАХТАР КҮКТӘ ЯРАЛА*

**Һуңғы йылдарҙа халҡыбыҙҙың матур туй йолалары ситтәрҙеке менән буталып бөтөп бара. Мәҫәлән, һыу юлы күрһәтеү йолаһын ғына алайыҡ. Элек ауылдарҙа йәш киленгә һыу юлы күрһәтеү үҙе бер күркәм тамаша ине. Килендең йәш бикәсе матур итеп биҙәлгән һыу күнәктәрен көйәнтәләп алып, алдан төшә, уға кейәү менән килен, йырлай-йырлай туйҙа ҡатнашыусылар, килендең әхирәттәре эйәрә. Улар артынан еңгәләренән бүләк алырға теләгән бала-саға йүгерә. Һыуға барып еткәс, йылғаға тәңкә ташлайҙар һәм теләк теләйҙәр. Һыу алыр алдынан йәш килен битен-ҡулын йыуа, теләк теләй. Йәш килендең яурынына тулы күнәкле көйәнтәләрҙе еңгәһе йә бикәсе һала. Килен һыуҙы сайпылдырмай, тигеҙ генә баҫып атлап ҡайтырға тейеш. Шуның менән уның уңғанлыҡ кимәле һынала.**

# ЭСКӘН КЕШЕЛӘРҘЕ...

## туйҙарға саҡырмағыҙ



Бөгөн ошо йоланы боҙоп, ниҙәр генә ҡыландырып бөтмәйҙәр. Һыу юлына барған саҡта ирҙәр - ҡатын, ҡатындар - ир булып кейенеүе бөтөнләй килешмәгән хәл. Туйҙы күңелле үткәрәбеҙ тип, ниндәй матур йоланың йәмен ебәрәләр. Етмәһә, шунан мәҙәк табалар, йола үтәйбеҙ, тип тә раҫлайҙар.

Һуңғы йылдарҙа йәштәребеҙ яйлап үҙ асылына ҡайта. Иң мөһиме - мулла саҡыртып, никах уҡытып өйләнешәләр. Туйҙарҙы ла эскеһеҙ уҙғарырға тырышыусылар күбәйҙе. Күптән түгел Бөрйән ерендә шундай матур туйҙа ҡатнашырға тура килде. Күмертау ҡалаһы һылыуы Зилә Вәлитова менән Бөрйән районы Яңы Монасип ауылы бөркөтө Данир Йәғәфәров беренсе ғаилә байрамдарын - туйҙарын "шайтан һыуы"нан башҡа үткәрҙе. Бөтә нәмә күңелгә ятышлы булды туйҙа: уҙғарылған уйындар, төрлө йырҙар, таҡмаҡтар өсөн башты эйеп, ҡайҙа ҡарарға белмәй оялып ултырырға тура килмәне. Эскән кеше булмағас, ығы-зығы, шау-шыу ҙа юҡ. "Туйҙың күрке - уйын-көлкө" тигәнде раҫлап, ике яҡтың да ҡоҙалары ярышып йырланы, бейене, уйнаны, көлдө. Барыһы ла ҡәнәғәт ҡалды туйҙан. Йәш ғаилә башлығы Данир: "Бөрйәндә беҙ тәүгеләрҙән булып иҫерткес эсемлекһеҙ туй уҙғарҙыҡ, шуға күрә бер аҙ ҡаршылыҡтар ҙа булды. Иншалла, эскеһеҙ туй уҙғарырға теләүсе беҙҙән һуңғы йәштәргә был йәһәттән еңелерәк булыр. Иң мөһиме - үҙ һүҙеңдә ныҡлы тора белеү, туйҙа ҡатнашыусыларҙы алдан киҫәтеп, дөрөҫ аңлата белеү", - тип фекере менән уртаҡлашты.

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

**Альбина СӨЛӘЙМӘНОВА, 21 йәш:** Йәштәрҙең айыҡ тормош яҡлы булыуы ҡыуандыра. Тик эскеһеҙ туй уҙғарыуҙы йә уларҙың ата-әсәһе, йә туғандары аңлап етмәй.

Беҙ ҙә туйыбыҙҙы артыҡ ҙур байрамға әйләндермәй, ике яҡтың туғандарын саҡырып ҡына уҙғарҙыҡ. Туй уйын-көлкө менән бик күңелле үтте. Хатта араҡыһыҙ туйҙы күҙ алдына ла килтерә алмаған, үҙе "байрам" итергә бик яратҡан бер таныш ағай, туй үтеп киткәс: "Эсмәгәс, нимә генә эшләп ултырырмын инде был туйҙа, тип ҡурҡып ҡына килгәйнем, хатта килмәҫкә лә уйлағайным, ҡалай күңелле булды. Эс бошоп ултырырға ваҡыт та булманы", - тине. Ысынлап та, туйҙы матур итеп ойоштороп уҙғара белһәң, эскелектең кәрәге юҡ.

**Илнур, 28 йәш:** Туй булғас, күңелле итеп бер байрам итеүҙән гонаһ булмайҙыр, тип уйлайым. Шулай ҙа самаһын белеү бер ҡасан да ҡамасауламай. Мин дә туйҙа самаһынан артыҡ эсеп, артыҡ ҡыланып йөрөүселәрҙе яратмайым. Ә инде эсеп, аҙаҡ туйҙың нисек үтеп киткәнен дә белмәй ултырыусыларҙы бөтөнләй енем һөймәй. Иң яҡшыһы -ундайҙарҙы туйға саҡырмаҫҡа. Ни өсөн улар туйҙың бөтә күркәмлеген боҙоп ултырырға тейеш? Үҙем дә туйымда эскелек булдырмаҫҡа тырышыр инем.

**Данил ҠОТЛОБАЕВ, 30 йәш:** Беҙҙең туйҙар, һис шикһеҙ, иҫерткес эсемлектәрһеҙ уҙырға тейеш. Иҫерткес эсемлектәрҙе Аллаһы Тәғәлә харам ҡылған, шулай булғас, мөмкин тиклем харамдан йыраҡ тороу хәйерле. Әгәр туйҙа алкоголле эсемлектәр бар икән - барма, ә инде үпкәләрҙәр, тип ҡурҡһаң - барып ҡотлап китергә генә мөмкин. Бөгөнгө көндә йәмғиәтебеҙҙә бөтә проблеманың башында эскелек тора. Әгәр халыҡ шуны аңлаһа, ул бөтә байрамдарҙы ла эскеһеҙ уҙғара башлар. Туй - ул йәш йөрәктәрҙең тәүге ғаилә байрамы. Алда уларҙы ҙур тормош көтә. Шулай булғас, уларға изге теләктәр теләп, доғалар әйтеү фарыз. Киләсәк беҙҙең ҡулыбыҙҙа, шулай булғас, үҙебеҙҙең балаларыбыҙ, ейән-ейәнсәрҙәребеҙҙең киләсәге хаҡында уйланып, үҙебеҙҙең нәҫелебеҙ һау-сәләмәт булһын тигән ниәттә, бөгөндән спиртлы эсемлекте өҫтәлдәребеҙҙән генә түгел, ауылыбыҙҙан юҡ итергә тейешбеҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Йәштәргә шундай кәңәш: әгәр иҫерткес эсемлек булған туйҙа ҡатнашҡығыҙ килмәй икән, дөрөҫ аңлатып, мәжлескә барыуҙан баш тартығыҙ. Ә үҙегеҙҙең тәүге ғаилә байрамығыҙҙы матур үткәргегеҙ килһә, эсмәгән, үҙ самаһын белгән, мәҙәниәтле кешеләрҙе саҡырығыҙ. Минеңсә, бында бер ниндәй ҙә хилафлыҡ булмаясаҡ...**

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА.**

*ҺОРАУ - ЯУАП*

## СИТ ИЛДӘ БУЛҺА

**Көтмәгәндә ирем вафат булды. Икебеҙ исеменә хосусилаштырылған шәхси йортобоҙ (ер участкаһы менән) бар. Ҡаҙағстан гражданы булһа ла, улым Германияла йәшәй. Мин йортобоҙҙо уға яҙҙырырға теләйем, ләкин әлегә ул килеп, ғариза яҙып китә алмай...**

- Бындай документ әҙерләү өсөн улығыҙҙың ҡайтып китеүе мотлаҡ түгел. Улығыҙ Германиялағы Ҡаҙағстан илселегенә барып, йортоғоҙҙоң атаһы исемендәге 1/2 өлөшөн мираҫҡа алырға ризалығы хаҡында һеҙ йәшәгән урындағы нотариус исеменә ғариза яҙһын. Уның ҡултамғаһы илселек хеҙмәткәре тарафынан раҫлана һәм улығыҙ түләүле заказ-хат менән документты һеҙҙең нотариусҡа ебәрә. Шулай итеп, ул закон тарафынан тәғәйенләнгән ваҡыт - 6 ай эсендә мираҫсы хоҡуғын алырға өлгөрә. Ҡалған документтар башҡарыуҙы икенсе ваҡытҡа кисектереп торорға мөмкин.

## ЙӘШӘГӘН УРЫНДА

**Йортто хосусилаштырыуҙы үҙем йәшәгән районда түгел, ә күрше районда теркәтә аламмы?**

- Юҡ. Күсемһеҙ милекте фәҡәт йәшәгән урынығыҙ буйынса теркәтеү ғәмәлдә иҫәпләнә. Бының өсөн Теркәү хеҙмәтенең район үҙәгендәге филиалына мөрәжәғәт итегеҙ.

## КИЛЕШЕҮ ТӨҘӨП ӨЛГӨР

**Түләүһеҙ хосусилаштырыу ваҡыты, алдан хәбәр ителеүенсә, үҙ көсөндә ҡаламы?**

- Эйе, милекте бушлай хосусилаштырыу ваҡыты 2010 йылдың 1 мартына тиклем барасаҡ. Ләкин, әгәр һеҙ ошо ваҡытҡа тиклем торлағығыҙҙы милеккә күсереү тураһында килешеү төҙөп өлгөрһәгеҙ, үҙ хоҡуғығыҙҙы дәүләт теркәүен әлеге килешеү нигеҙендә 2010 йылдың 1 мартынан һуң да башҡара алаһығыҙ. Торлаҡты милеккә күсереү буйынса килешеү Теркәү хеҙмәтендә түгел, ә "Күсемһеҙ милек үҙәге" махсуслаштырылған муниципаль учреждениеһында (Өфө ҡалаһы, Ст. Халтурин урамы, 59) башҡарыла.

## БУРЫС ҠАЙТАРЫУ

**Бер танышыбыҙ Санкт-Петербургҡа күсеп китте. Унан алда был ҡатын беҙҙән бурысҡа 12 мең аҡса алып торғайны, шуны кире ҡайтарманы. Кемгә мөрәжәғәт итергә?**

- Граждանлыҡ закондары талаптарына ярашлы, граждандар һәм юридик шәхестәр үҙ ҡарамаҡтарында үҙҙәренә ҡағылышлы граждандар хоҡуҡтарын ғәмәлгә ашыра ала (РФ Граждандар кодексы, 9-сы статья). Һеҙҙән бурысҡа алынып, ҡайтарып бирелмәгән 12 мең һум күләмендәге сумманы юллау маҡсатында мировой судҡа мөрәжәғәт итә алаһығыҙ (РФ Граждандар-процессуаль кодексы, 23-сө статья). Был осраҡта юллауҙы яуап биреүсенең йәшәгән урыны буйынса башҡарыу мотлаҡ.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

## ҮЛӘН СӘЙҘӘРЕ

**Гел бер төрлө генә сәй ялҡытып та китә. Ҡара сәйҙе иртән эсеү яҡшы, ул тонусты күтәрә. Бешергәндә балғалаҡтың осона элеп кенә шәкәр ҙә өҫтәп ебәрһәң, бигерәк файҙалы була. Йәшел сәйҙе ҡасан эсһәң дә ярай. Төрлө файҙалы үләндәрҙән эшләнгән сәйҙәрҙе лә онотмағыҙ.**

**❖ Аҡ сәскә сәйе**

1/4 балғалаҡ киптерелгән аҡ сәскәгә 2 балғалаҡ йәшел сәй, 5 стакан ҡайнар һыу алына.

**❖ Ҡайын еләге япрағынан сәй**

1 стакан ҡайнар һыуға 2 балғалаҡ ҡайын еләге япрағы, яртышар балғалаҡ һары мәтрүшкә, бөтнөк (мята) үләне алына. 7-10 минут төнәткәс, эсергә.

**❖ Мәтрүшкә сәйе**

Ярты балғалаҡ киптерелгән мәтрүшкә, 2 балғалаҡ йәшел сәй, 5 стакан ҡайнар һыу алына.

**❖ Сейә япрағынан сәй**

Яртышар балғалаҡ ирәүән менән бөтнөк үләне, киптереп ваҡланған 1-әр балғалаҡ ҡарағат япрағы, һары мәтрүшкә, кейәү үләне, ҡурай еләге япрағы, 1 ҡалаҡ сейә япрағын фарфор сәйгүндә 7-10 минут төнәткәс, эсергә.

**❖ Ҡара көртмәле сәйе**

2-шәр грамм киптерелгән көртмәле емеше, аҡ сәскә, бөтнөк, кесерткән япрағы, 200 грамм ҡайнар һыу алына. Ҡайнар һыу менән бешекләнгән фарфор сәйгүндә 15-20 минут төнәткәс, эсергә.

**❖ Клевер, һары мәтрүшкә, ҡурай еләге япрағынан сәй**

Берәр балғалаҡ клевер сәскәһе, һары мәтрүшкә, бер ҡалаҡ ҡурай еләге япрағына 5 стакан ҡайнар һыу ҡойоп төнәтегеҙ.

**❖ Кейәү үләненән (чабрец) сәй**

20 грамм кейәү үләне һәм һары мәтрүшкәгә 4 грамм ҡыҙыл көртмәле (брусника) япраҡтары ҡушып, 1 стакан ҡайнар һыуҙа төнәтергә.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**




## ИР БАЛАЛАР ӨСӨН НӘСИХӘТ

### Ауыҙ өсөн ҡағиҙәләр

● Мөмкин булғанда кеше алдында кикермәгеҙ. Ҡулығыҙ йәки ҡулъяулығығыҙ менән ҡапламайынса иҫнәмәгеҙ. Ауыҙығыҙҙы асып, тештәрегеҙҙе соҡомағыҙ. Иҫнәгән һәм йүтәлләгән ваҡытта һөйләмәгеҙ. Былдай саҡта йөҙөгөҙҙө бер яҡҡа бороғоҙ.

● Әгәр иҫнәү һәм йүтәлләү ҡат-ҡат булһа, башҡаларға ҡамасауламаҫ өсөн, мәжлестән сығып тороғоҙ.

● Һөйләгән ваҡытта ауыҙығыҙҙан төкөрөк сәсмәгеҙ. Ҡулығыҙҙы болғамағыҙ, берәүҙең һүҙе тамам булмайынса, һөйләшмәгеҙ.

● Ергә һәм кешеләргә төкөрөү һәм ҡаҡырыуҙан һаҡланығыҙ. Бының өсөн янығыҙҙа ҡулъяулыҡ йөрөтөгөҙ.

● Һуған, һарымһаҡ йәки башҡа нәмәләр ашап, ауыҙығыҙҙы еҫләндермәгеҙ.

● Һәр көн иртә, бигерәк тә тәһәрәт алған ваҡытта һәм ашағандан һуң, ауыҙығыҙҙы яҡшылап сайҡағыҙ. Теш араһында әйбер ҡалдырмағыҙ, мисүәк менән матур итеп таҙартығыҙ.

● Ҡулығыҙ менән танауығыҙҙы тотоп ултырмағыҙ, бармағығыҙ менән соҡомағыҙ, буш ҡулығыҙ менән һемгергәндән һуң ҡулығыҙҙы башҡа әйберҙәргә һөртмәгеҙ, кейемегеҙгә һемгермәгеҙ, танау һемгереү өсөн янығыҙҙа таҙа ҡулъяулыҡ йөрөтөгөҙ.

● Ашаған ваҡытта танауығыҙҙы һемгерергә кәрәк булһа, бер яҡҡа боролоп, тауышығыҙ ғына ҡулъяулыҡҡа һемгерегеҙ, һөйләшкәндә, сәләм биргәндә һәм сәләм ҡайтарғанда, сабыр итеп, тыйылып тороу кәрәк.

● Сәскергән ваҡытта йөҙөгөҙҙө бер яҡҡа бороғоҙ һәм ҡулъяулыҡ менән ҡаплағыҙ.

● Танауығыҙҙы һәм ауыҙығыҙҙы тәһәрәт алған ваҡытта һыу менән йыуығыҙ. Башҡа ваҡыттарҙа ла ҡулъяулыҡ менән һөртөнөп, таҙа йөрөгөҙ.

### Ҡолаҡ өсөн ҡағиҙәләр

● Аллаһы Тәғәлә ҡолаҡтарҙы файҙалы нәмәләр ишетер өсөн яратҡан. Шуның өсөн улар менән Ҡөрьән-Кәрим, мөбәрәк хәҙистәр, ғибрәтле һүҙҙәр тыңлап ғәмәл итегеҙ. Ата-әсә һәм остаздарығыҙҙың нәсихәттәрен тыңлағыҙ.

● Боҙоҡ әйберҙәрҙе ишетеү аҡылға боҙоҡлоҡ килтерә. Шуның өсөн яман һүҙҙәр ишетмәгеҙ, әйшерен һөйләнгән һүҙҙәрҙе тыңлап йөрөмәгеҙ. Һис кемдең дә күңеле быға риза булмаҫ.

● Һүҙ йөрөтөүселәр һәм ғәйбәт һөйләүселәрҙе тыңламағыҙ. Әгәр былдай кешеләр йәше һәм дәрәжә йәһәтенән һеҙҙән оло булһа, күҙегеҙҙе түбән эйеп тик тороғоҙ. Һеҙҙең менән тиң булһалар, былдай эштәр ярамай, тип әҙәпле итеп әйтегеҙ. Һеҙҙән кесе булһа, мәрхәмәт менән туҡтатығыҙ.

● Ә ишеткән һүҙҙәрҙең фетнәгә сәбәп булаҫаҡтарын һис кемгә һөйләмәгеҙ.

● Әҙәпһеҙ урындарға барып, гонаһҡа төшәсәк рәүештә тауыштар тыңламағыҙ.

● Ҡолағығыҙҙы һәр ваҡыт, бигерәк тә йоҡонан торғас, таҙартығыҙ, мөмкин булһа, уны таҙартыр өсөн фил һөйәгенән һалынған ҡолаҡ таҙартҡысын янығыҙҙа йөрөтөгөҙ.

● Йөҙөгөҙҙө йыуғанда ҡолағығыҙҙың эсен һәм тышын йыуығыҙ һәм таҫтамал менән коротоғоҙ.

● Көслө тауыштар ҡолаҡҡа зарарлы булған өсөн, уларҙан һаҡланығыҙ.

# АҘҒЫНЛЫҠ ТА...
## шул уҡ быуат бәләһе бит




**Тормошобоҙҙағы бөгөнгө фажиғәләребеҙҙе беҙ, ғәҙәттә, эскелек, тәмәке тартыу, наркоманлыҡҡа ғына ҡайтарып ҡалдырабыҙ. Тағы берәүһе, бигерәк тә ҡот осҡосорағы, тураһында бик үк телгә ала һалып бармайбыҙ. Аҙғынлыҡ тураһында әйтеүем. Ә бит ҡайҙа эскелек - унда аҙғынлыҡ. Йә, киреһенсә, ҡайҙа аҙғынлыҡ - унда эскелек...**

Революцияға тиклемге, йәғни дин ҡанундары менән йәшәгән мосолман донъяһының йәшәү рәүешенә күҙ һалайыҡ әле: ҡыҙ намыҫы, ир-егеттәрҙең тоғролоғо беренсе урынға ҡуйылған ул замандарҙа. Йәштәрҙең кемгә өйләнеүе ғаиләнең генә түгел, бөтөн ырыу-заттың күҙ унында булған. Аҙғынлыҡ - төп енәйәттәрҙең береһе иҫәпләнгән. Дәртең ташып тора икән, рәхим ит, ике-өс ҡатынға өйлән, тик береһен дә рәнйетмә. Ғәҙел ярат, матди яҡтан тәьмин ит. Ағай үлһә, ҡәйнеше еңгәһенә өйләнгән. Был да бик ғәҙел ҡанун булған: етем ҡалған балалар ситтәр тәрбиәһенә китмәгән, үҙ туғандары менән ҡалған, донъя, йорт-ҡура ла бүленмәгән.

Хәҙерге заманға күсәйек. Бер генә миҫал: мин уҡытҡан синыфтарҙың береһендә - 15 бала. Шуларҙың 10-һы - атайһыҙ (улар иҫән, әммә "кәкүк" атайға әйләнгәндәр), ҡалған 5 баланың 1-һенең генә атаһы эшләй, меҫкен әсәләр донъя йөгөн үҙҙәренсә һөйрәй. Уларҙың да ҡайһылары "ыҫна", эскелеккә һалыша. Бала ни эшләргә тейеш был осраҡта? Кем үҫәсәк ул баланан? Атайҙың туғандары менән күптәре аралашмай, нәҫел ептәре өҙөлгән. Әсәләре әллә ҡайҙан килгән килен булһа, ҡайтыр ере, йәшәр урыны юҡ. Хоҙайым, ҡайһы берҙәренең зарҙарын тыңлап, йөрәгем урынынан ҡуҙғала ине, ә ҡайһы әсәләрҙең шундай көслә булыуына һоҡлана инем. Ғаилә тарҡалыуҙың төп сәбәбе - эскелек, ә ҡайҙа эскелек - шунда аҙғынлыҡ, талаш-һуғыш.

Был мәҡәләмде яҙыуымдың төп маҡсаты - аҙғынлыҡтың фажиғәһе тураһында телгә алып, ата-бабаларыбыҙ ни өсөн тән сафлығын беренсе урынға ҡуйып һаҡлағанлығын аңлатып китеү ине.

...Яҡынса 150 йыл элек бер йылҡы заводында аттарҙың сыҙамлылығын арттырыу маҡсатында бейәләрҙе зебра менән аталандыралар, йәғни тоҡомда булмаған кәрәкле сифаттарҙы икенсе тоҡомдан күсереп алыу маҡсатында тәжрибә үткәрәләр. Көткән һөҙөмтә килеп сыҡмай. Шунан был тәжрибә тураһында оноталар. Йылдар үткәс, зебра менән тәжрибәлә ҡатнашҡан бейәләрҙе саф тоҡом айғырҙарына ҡушалар. Күп тә үтмәй, фән һәм ғалимдар аңлата алмаҫлыҡ шаҡ ҡатырлыҡ ғибрәтле күренешкә юлығалар: нәҫел айғырҙарынан зебраға оҡшаш арҡыры һыҙатлы ҡолондар тыуа башлай. Ғилми донъя был хикмәткә яуап бирә алмай һәм был хәлде телегония (теле - йыраҡ, гония - тыуыу) тип атайҙар. Былдай хәлдәр кешеләр араһында ла осрап тора.

Мәскәүҙә уҡыған бер студент ҡыҙ ҡара тәнле Африка егете менән дуҫлашып йөрөгән була. Йылдар үтә, барыһы ла онотола, ҡыҙ үҙ милләтенә кейәүгә сыға, аҡ тәнле балалар үҫтерә. Бына уларҙың үҙе кеүек аҡ тәнле егеткә кейәүгә сыҡҡан бер ҡыҙы... ҡап-ҡара тәнле бала таба. Бер кем дә, хатта генетика ғалимдары ла бер нәмә лә аңлата алмай, аптырашта ҡалалар. Ниһайәт, швед ғалимдары уникаль асыш яһай һәм барыһы ла асыҡлана.

Ир менән ҡатындың енси бәйләнеше ваҡытында тәнсәләр (хромосомалар) алмашыныу процесы үтә, йәғни, нәҫел билдәләре өсөн яуаплы булған ДНК сылбырындағы гиалурон кислотаһы матдәләр алмашыныу ваҡытында бик әүҙемләшә, төрлө ферменттарҙы үҙенә һеңдерә бара. Ул хатта ҡатын-ҡыҙҙарҙың енси ағзаларына аталыҡ орлоғо менән эләгеп, бер минут эсендә ҡан тамырҙары буйлап бөтә ағзаларға таралыу һәләтлегенә лә эйә. Артабан ят ферменттарҙы, гендарҙы үҙенә һеңдергән гиалурон кислотаһы енел генә күҙәнәк тиресәһенән үтеп, ДНК-ла ят гендар структураһын яҙып ҡалдыра, һаҡлай. Был процесс ҡатын-ҡыҙҙарға ғына түгел, ә ир-егеттәргә лә ҡағыла. Енси мөнәсәбәт ваҡытында был кислота алмашыныу сәбәпле, ир-егеттәргә ҡатын-ҡыҙҙың нәҫел билдәләре күсә, ә ҡатын-ҡыҙ ир-егеттекен үҙенә ҡабул итә. Шулай итеп, ҡатын-ҡыҙ енси партнерынан ауырға ҡалмаһа ла, бөтә партнерҙарының да ДНК-һындағы ят гендарҙы, ә ир-егет енси бәйләнештә булған барлыҡ ҡатын-ҡыҙҙарҙың нәҫел билдәләрен ғүмер буйы үҙе менән йөрөтә. Ата-бабаларыбыҙҙың "зина ҡылма, нәҫел-ырыуыңды һәләкәткә илтерһең, ҡоротоғһоң", тигән тәрән мәғәнәле лә, мөһим дә һүҙҙәре ошондай осраҡта урынлы ла инде.

Бында уйланырға урын бар. Әлегә ҡараш шундайыраҡ: венерик ауырыуҙарға, СПИД-ҡа юлыҡмаһаң - булды. Ә осраҡлы ғына енси бәйләнешкә инган ҡатын йәки ир йөрөткән гендарҙың киләсәк быуын-нәҫеләңә ниндәй ҡаза килтеререн уйлау юҡ - сөнки был хаҡта беҙ белмәйбеҙ.

Эскелек, наркоманлыҡ - милләтте бөтөрөүгә йүнәлдерелгән идеологик ҡорал, ә инде был фажиғәләргә бирешмәгәндәрҙе аҙғынлыҡ менән бөтөрөп була. Унығына иһә әхлағы йомшаҡ һәр кем бирешә. Мин Чечен халҡының патриотлығы, төп милли һыҙаттарын юғалтмай һаҡлауы, үҙ халҡына һәр саҡ тоғро булып ҡалыуы ят гендарҙы үҙ итмәүендә, аҙғынлыҡҡа юл ҡуймауында, тип уйлайым.

Ә аҙғынлыҡҡа нисек ҡаршы торорға? Иманға ҡайтып, әлбиттә. Иман - Аллаһы Тәғәләне таныуҙан башлана. Бына улар, өс афәткә ҡаршы тороу саралары: ололарға ла, балаларға ла Ҡөрьән-Кәримде өйрәнеү, рух, иман ныҡлығын тергеҙеү. Әлеге ваҡытта бөтә донъя ғалимдары, Ҡөрьән кешелек донъяһы барлыҡҡа килгәнсе үк Аллаһы Тәғәлә тарафынан төшөрөлгән, ә аяттар - уның һүҙҙәре, уның телмәре, тигән һығымтаға килгән. Ә һеҙ һаман икеләнәһегеҙме быға?

**Фәүзиә ЙӘНТИЛИНА.**

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# НИСЕК ЯРАТЫЛҺА,
## шулай ҡабул ит ҡыҙ-ҡатынды



**Ислам иргә ҡатынына яҡшы мөғәмәлә күрһәтергә ҡуша, башҡа бер диндә лә ҡатынға былдай юғары урын бирелмәй. Бәйғәмбәр ирҙәргә мөрәжәғәт итеп: "Ҡатын-ҡыҙҙарға һәр ваҡыт яҡшы мөғәмәләлә булығыҙ, сөнки улар ысынлап та ҡабырғанан яһалған, ә ҡабырғаның өҫкө өлөшө ҡыйыш була, һәм әгәр һин уны төҙәйтергә маташһаң, һынып ҡуйыуы ихтимал, ә әгәр тыныслыҡта ҡалдырһаң, ул шулай ҡыйыш көйөнсә ҡаласаҡ, шуға күрә һәр ваҡыт яҡшы мөғәмәлә итегеҙ", - тигән.**

Икенсе бер хәҙистә былай тиелгән: "Ысынында, ҡатын-ҡыҙ ҡабырғанан яһалған, һәм ул бер ваҡытта ла бер нисек тә һинең өсөн төҙәлмәйәсәк. Әгәр уның менән ләззәтләнәһең килә икән, ҡыйышлығына ҡарамай, ләззәтлән, ә инде төҙәйтергә маташаһың икән, һындыраҫаҡһың, һындырыу - уның менән айырылышыу, тигән һүҙ".

Был миҫалда ҡатын-ҡыҙҙың асылына һәм уның тәбиғәтенә асыҡ аңлатма бирелә. Йәғни, ул ире теләгәнсә тураяалмай, һәм өйләнгән мосолман был үҙенсәлектең тыуымыштан булыуын белергә һәм уны үҙе теләгәнсә камиллаштырырға маташмаҫҡа тейеш. Ҡатын-ҡыҙ холҡо үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып, Аллаһы Тәғәлә уны ниндәй итеп яратһа, шулай итеп ҡабул итергә кәрәк.

Ысын мосолман - ул идеаль ир. Ҡатыны, оҙаҡ йылдар бергә йәшәһәләр ҙә, уның менән аралашыуҙан, уның йомшаҡлығынан һәм баҫалҡылығынан кинәнеп бөтә алмай. Өйгә ҡайтып ингәс тә ул ҡатынын, балаларын, Аллаһы Тәғәлә ҡушҡанса, ихлас күңелдән йылмайып сәләмләй. Бының менән ул ғаиләһенә кәйеф күтәренкелеге, шатлыҡ, бәхет нуры алып инә. Ҡатынының ярҙамға мохтажлығын күрһә, ярҙам ҡулы һуҙа, нимәгәләр зарланһа, йомшаҡ ҡына йыуата. Иренең ышанып арҡа терәрлек, көслө, изге күңелле, миһырбанлы булыуын тойоп йәшәү ҡатынды сикһеҙ бәхетле итә.

Динле һәм аҡыллы мосолман, башҡа назан ирҙәр кеүек, ашты үҙе теләгәнсә бешермәгән йәки ваҡытында әҙерләмәгән өсөн дә, башҡа ошондай сәбәптәр арҡаһында ла туҙынып бармай. Ул үҙ ҡатынын ихтирам итеүҙән тыш, уның әхирәттәренә лә хөрмәт күрһәтә.

✔ *Һеҙ великорус иптәштәрегеҙ менән берлектә ябай бер милләтте теленән һәм яҙмаһынан яҙҙырыуҙан башлап, уларҙы тамам руслаштырғанға тиклем яғаларынан ысҡындырмаясаҡһығыҙ.*



ХӘТЕР ЯҢЫРТЫП





**Башҡортостан тарихында декабрь айына ҡараған билдәле ваҡиғалар байтаҡ. Халҡыбыҙ хәтеренән 1890 йылдың 10 декабрендә тыуған арҙаҡлы заттың - Башҡортостан республикаһына нигеҙ һалыусы билдәле башҡорт сәйәсмәне, донъя кимәлендә танылыу тапҡан тарихсы-ориенталист Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың исемен нисек кенә юйырға тырышмаһындар, ул барыбер үҙ иленә мәңгелеккә кире ҡайтты. Ниһайәт, Өфө урамдарының береһенә уның исеме бирелде, баш ҡалабыҙҙа уны һынландырған һәйкәл күрергә лә насип булыр, тип уйлайбыҙ. Ә.-З. Вәлидиҙең 1923 йылдың февралендә эмиграцияға китер алдынан Ленинға яҙған хатындағы фекер-һығымталары хәҙерге заман өсөн дә үтә фәһемле булып, уйлы кешенең иғтибарын йәлеп итмәй ҡалмаҫ. Нисек кенә булмаһын, тарих башҡорт халҡына аяуһыҙ ҡырыҫлығын (ул һәр саҡта ла Рәсәйҙең хакимлыҡ ҡылыусы даирәләре менән бәйле) ҡаттан-ҡат күрһәтеп килде. 1917 йыл хөрриәте тыуҙырған ысын мөхтәриәт нисек юҡ ителһә, 90-сы йылдарҙа "йөтторолған" суверенитетты шул уҡ рәүешле "кире ҡоҫтороу"ға хәҙер үҙебеҙ шаһит. Арҙаҡлы инсаныбыҙ ҡулы менән яҙылған ошо тарихи документты һеҙҙең иғтибарығыҙға тәҡдим итеү уның буйһонмаҫ рухы алдында баш эйеүебеҙгә тиң булһын, тибеҙ.**

# ТАРИХҠА ИНГӘН ЯҘЫУ,

## йәки Зәки Вәлидиҙең Ленинға хат яҙғаны

"Мөхтәрәм Владимир Ильич, ауырыуығыҙ сәбәпле, был хат һеҙгә уҡытылмаҫ та, ишеттерелмәҫ тә, ләкин мин уның нөсхәләрен башҡа бәғзе арҡадаштарыма ла ебәрәм, ул артабан тарихҡа инәсәк бер яҙыу булыр. Иптәш Сталин, Рудзутак иптәш булышлығында, мине партияға кире ҡайтарырға маташа. Ул 1920 йылда Үҙәк Комитетҡа Баҡынан яҙған хат аша Мәскәүгә ҡаршы йүнәлтелгән эшмәкәрлегемде асыҡ белгертеүем, баҫмаса хәрәкәтенә ҡушылыуым хаҡында белмәмешкә һалыша. Ләкин 1919 йылдың 20 мартында һеҙҙең, Сталиндың һәм арҡадаштарыбыҙҙың имзалары менән нәшер ителгән Килешеү ун дүрт айҙан һуң 1920 йылдың 19 майында бер һеҙҙең һәм Сталиндың имзалары ҡуйылған фарман менән юҡҡа сығарылғас, кем һеҙгә инанып кире килер? Был бер яҡлы фарманығыҙға мин үҙегеҙҙе күреп протест белдергәс, һеҙ 1919 йылдың 20 мартында ҡабул ителгән Килешеүҙе бер "ҡағыҙ киҫәге" (клочок бумаги), тип баһаланығыҙ. Хәлбуки, был Килешеүҙә Башҡортостандың айырым ғәскәре буласағы, уның Үҙәк Совет командалығына туранан-тура буйһонасағы иғлан ителгәйне. Хәҙер 1920 йылдың 19 майҙағы фарманығыҙ менән Башҡорт ғәскәрен был хоҡуҡтан мәхрүм итеп, Заволжье округына буйһондороп, уны айырым частарға бүлгеләүҙе лә уның ҡарамағына ҡалдырҙығыҙ. Ғәмәлдә бөгөн Башҡорт ғәскәре юҡ. Шундай уҡ бер фарманда "Өфө вилайәте Башҡортостанға ҡушыла" тигән алдаҡлыс мәғәнәле һүҙҙәрегеҙ иһә асылда "Башҡортостанды Өфө вилайәтенә ҡушыу" тигәнде аңлата ине. Был хәлдә Совет хөкүмәте 1917 йылдың 20 ноябрендә "Рәсәй мосолмандарына" исемле декретта иғлан иткән "Россиянан айырылыу хоҡуғы" ла (до отделения от России) 1920 йылдың 19 май фарманығыҙ менән тамырынан юҡ ителде. Бынан аҙаҡ көньяҡ-көнсығыш Рәсәйҙә башҡорт, ҡаҙаҡ һәм төркөстандарҙың еңелеүенән һуң һәм минең иртәгәге көн Совет Рәсәйенән сығып китеүемдән башлап, көньяҡ-көнсығыш мосолмандары тарихында яңы бер дәүер асыласаҡ: мосолмандарҙың ирек һәм хоҡуҡтарының Рәсәйҙәге эске көрәш нигеҙендә хәл ителмәү тәжрибәһе үкенесле. Шунлыҡтан был мәсьәләләрҙе хәл итеү халыҡ-ара көрәш кимәленә күтәрелә. Минең маҡсатым һәм төп эшем азатлыҡҡа дәғүәбеҙҙең тарихын һәм асылын донъяға белдереүҙән ғибәрәт буласаҡ. Артабан был хатта беҙҙең иҙелеүгә бәйле айырым мәсьәләләр тикшереләсәк.

Великорус милләте хәҙер үҙ ҡулы аҫтында ҡалған ҡәүем һәм милләттәргә ҡаршы йүнәлтелгән сәйәсәтен ижтимағи һәм иҡтисади өлкәлә генә түгел, мәҙәниәт өлкәһендә лә киҫкен рәүештә тормошҡа ашыра башланы. Үткән йыл ойошторолған "Шәреҡ университеты" ошо сәйәсәтте башҡарыусы бер үҙәк сифатын алды. Үҙәк Комитет янында великорустарҙан торған шәреҡ эштәре белгестәренең төркөмө күренә башланы. Үҙәк Комитет Совет ҡулы аҫтындағы шәреҡ милләттәренең бәғзе вәкилдәрен килтереп, уларға үҙ янындағы "шәреҡ белгестәренә" кәрәкле материалдарҙы әҙерләп бирергә ҡушҡан. Айырым китап һәм брошюралар ҙа нәшер иттеләр. Ләкин улар исеменән яҙылған фекерҙәр великорустар тарафынан көсләп тағылған. Рус булмаған был зыялыларҙың үҙ өлкәләре өсөн яҙған "конституция"ларының бәғзе пункттары тикшерелмәҫтән алып ташланған. Шәреҡ университеты һәм Үҙәк Комитеттың шәреҡ эштәре белгестәре бөгөн шөғөлләнгән зур эш - айырым ҡәүемдәрҙең мәхәллә диалекттарына ярашлы рәүештә фонетик нигеҙҙә уларҙың алфавитын һәм әҙәби телдәрен барлыҡҡа килтереү. Был эштең принциптарын билдәләүҙә лә рус булмаған коммунистар тик кәнәшсе ролен уйнаған. Шәреҡ университеты кешеләре тарафынан сығарылған "Кызыл шәреҡ" журналының (рус хәрефтәре менән "Гызыл Шарг") һуңғы һанында дағстанлы Ғүмәр Алиев исемле берәү, Төньяҡ Кавказда төрөк телдәре өсөн рус (кириллица) алфавиты ҡабул ителһә, бының һөҙөмтәһе христианлыҡҡа күсеү буласаҡ, шуға күрә улар өсөн дә Әзербайжанда ҡулланыласаҡ латин алфавитын ҡабул итергә кәрәк, алфавит һәм әҙәби тел мәсьәләләре рустар етәкселегендә түгел, фәҡәт ошо ваҡытта милли-сәйәси хөрриәт нигеҙендә төҙөлгән үҙаллы өлкәләрҙең хөкүмәттәре булышлығы менән урындағы белгестәр ярҙамында эшләнергә тейеш, тип яҙған. Бындай мәҡәләләр, шулай уҡ ҡайһы бер әзербайжан белгестәренең "Кызыл Шәреҡ" журналы аша төрөкмосолман (төрки-мосолман. - **Ред. иҫк.**) ҡәүемдәрен бер әҙәби тел тирәһендә туплауға ынтылыуы великорус белгестәрендә ризаһыҙлыҡ тыуҙыра. Үзбәк һәм ҡаҙаҡ зыялылары ла ҡатнашҡан бер кәңәшмәлә латин алфавиты нигеҙендә дөйөм алфавит булдырыу фекерен яҡлаған әзербайжан Шахтахтинский менән Жәлил Гулиевҡа профессор Поливанов һәм башҡа рустар, латин алфавиты ҡабул ителһә, аҙаҡтан уның урынына кириллица индереләсәге, иҫәбе ҡырҡҡа яҡын төрки һөйләштәрҙең һәр береһе өсөн айырым алфавит эшләнәсәге хаҡында һөйләгән. Шахтахтинский иһә төрки халыҡтарҙың һәр береһе әҙәби тел йәшәтә алмаясағын аңлатҡан. Артабанғыһы билдәле, һеҙ великорус иптәштәрегеҙ менән берлектә ябай бер милләтте теленән һәм яҙмаһынан яҙҙырыуҙан башлап, уларҙы тамам руслаштырғанға тиклем яғаларынан ысҡындырмаясаҡһығыҙ. "Ағымға ҡаршы" һәм башҡа әҫәрҙәрегеҙҙә милләттәрҙең хоҡуҡтарын тулы бер формала үҙ ҡулдарына тапшырыу тураһындағы һүҙҙәрегеҙ менән сәйәсәтегеҙ араһындағы айырма ҡабул итерлек түгел. 1919 йылдың яҙында беҙ ғәскәребеҙҙең ойоштороу эштәре менән Саранскиҙа булған саҡта һеҙҙең тарафтан вәкил итеп ебәрелгән Зарецкий иптәш халҡыбыҙға: "Иҙелгән милләттәребеҙҙең үҙаллылығын, уларҙың милли хөкүмәт, милли ғәскәр төҙөү мәсьәләһен тарихта беренсе булып бары тик Совет хөкүмәте генә ахырынаса хәл итәсәк", - тип бер ай буйына күп йыйылыштарҙа һөйләп йөрөнө. Мин дә "Правда"ла ышандырыуҙарға ярашлы бер мәҡәлә нәшер иттем. Ул хәлдәрҙән һуң дүрт йыл да үтмәне, сәйәсәтегеҙ тамам кире яҡҡа боролоп тормошҡа ашты. Бәлки, РКП(б) бынан һуң да милләттәрҙе азат итеүе хаҡындағы һүҙҙәрҙе Рәсәйҙән алыҫтағы Азия һәм Африкала һөйләүен дауам итер. Әммә дәрәсләк шунда: Григорий Сафаров кеүек кешелекле инсандарҙың Төркөстанға килеп, бында батшаның элекке колониаль сәйәсәтен хәҙер ҙә дауам итеүегеҙҙе тәнҡитләп мәҡәләләр баҫтырғаны өсөн уға асыу тотҡан великорустарығыҙ, кескәй милләттәрҙе китҡа ем булған ваҡ балыҡтар менән сағыштырып, урындағы халыҡтар араһынан сыҡҡан коммунистарға "аңлатыу" эше алып бара һәм ошо фекерҙе тәғлимәт рәүешендә һөйләп хушлана. Иптәш Артем беҙҙә саҡта урындағы халыҡтан сыҡҡан коммунистарыбыҙҙың бәғзеләренә, үҙаллы өлкәләрҙә йәшәйәсәгебеҙҙе ышандырып һөйләү менән бергә, Ҡытай һәм Һиндостандан башҡа бөтә Көнсығыш Азияла совет (рус) мәҙәниәтенең рәкипһеҙ (бер үҙе) хаким итәсәге хаҡында асыҡтан-асыҡ әйтә торғайны. Йәнәһе, быға бер ниндәй мәхәлләләр теле, мәҙәниәте ҡаршы тора алмаясаҡ, был телдәр тик коммунизм идеялары тарала тыуу өсөн файҙаланыласаҡ. Бындай һәм шуға оҡшаш һүҙҙәр башҡа ерҙәрҙә лә ҡат-ҡат әйтелә. Ләкин ул һүҙҙәр Рәсәй сигендә генә ҡалмаҫ. Һис шөбһә юҡ, улар артабан да таралаcаҡ, һәм һөҙөмтәлә үҙ ихтыярына йәшәргә теләгән, ләкин һеҙҙең ҡул аҫтында ҡалған һәр милләттең беренсе дошманы Совет Рәсәйе буласаҡ.

Был хакта һеҙгә "Колониальный и национальный вопрос" темаһына бағышланған тезистарығыҙ буйынса фекер алышҡан заманда бер аҙ әйткәйнем инде. Аҙаҡ ул тезистарҙы "Коммунистический Интернационал" журналында (№11) тағы бер тапҡыр уҡыным. Һеҙ пролетариат диктатураһы донъя күләмендә еңгәндән һуң "артта ҡалған" милләттәр йәшәгән өлкәләрҙә социализм режимы урынлаштырыу алдынғы (передовой) милләттәрҙең (улар араһына хаким итеүсе милләттәр ҙә керә) әүҙем ярҙамында тормошҡа ашырыласағы шарт булыуы хаҡындағы фекерегеҙҙе алға һөрҙөгөҙ. Был Һиндостанда инглиз, Төркөстанда рус, Африкала француз һәм Бельгия эшселәренең ойошмалары колониаль сәйәсәтте дауам иттерәсәк, тигән һүҙ. 1915 йылда Өфөлә һеҙҙең иптәштәрегеҙ менән һөйләшкән саҡта, һеҙ урынлаштырасаҡ социалистик тәртиптәрҙең кеше хоҡуғын юҡ итеүгә нигеҙләнгән террор режимы барлыҡҡа килтереүе хаҡында һүҙ бармай торғайны. Хәҙер ни булды һуң? Революцияларҙың маҡсаты шул инеме ни? Профсоюз дискуссияһында ошо һорауҙы ҡуйған Пятаков хаҡлы ине. Ул һеҙгә, инҡилабтарҙы тир һәм ҡан түгеп тәьмин иткән эшсе ойошмаларының ихтыярын тартып алмағыҙ, тигәйне. Роза Люксембург та, социализм идеялары империалистик традицияларҙан арынмаған бөйөк милләттәрҙең теләктәренә хеҙмәт итеү юлына баҫһа, бынан яҡшылыҡ булмаясағын әйткәйне.

Әгәр Рәсәйҙә социализм идеяһы иҫке империализм традицияларына әсир төшкән булмаһа, был мазлум милләттәр өсөн һөйләшеү диалекттары нигеҙендә яңы алфавит һәм әҙәби телдәр уйлап сығарыу менән социализм араһында ниндәй алыш-биреш булыуы мөмкин?

Һаҡ булығыҙ, бәлки, яңылған хаталарҙың тамыры һеҙҙең үҙегеҙҙәлер.

Һеҙгә тик бер үтенесем бар: йәкләү булыу сәбәпле, минең менән бергә Иран юлына сыға алмаған ҡатыным Нәфисәгә минең менән ҡайтанан ҡауышыу өсөн Германияға сығырға рөхсәтегеҙҙе һорар инем.

Әхмәт Зәки Вәлидов".

**Рудзутак һәм Ленин исеменә яҙылған хаттарҙы шәхси кешеләр аша ебәрҙем. Беҙ Иранда саҡта Мәшһәдкә килгән Сәғдулла Хужа Турсунхужаев был хаттар хаҡында мәғлүмәт алып килде. Ленинға яҙылған хатты элекке адъютантым, ВЦИК ағзаһы Ғәбдерәшит Бикбау үҙ ҡулы менән тапшырған.**

**Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың "Хәтирәләр" китабынан.**

*✓ "Урал" үҙәге ошо ваҡытта халҡыбыҙҙың авангардына әүерелде. Власть органдары сәйәсәттә беҙҙең позициябыҙҙы иҫәпкә алды. Беҙ ғилми йәмәғәтселекте йәлеп итә алдыҡ.*



# БЕР АҘЫМ АЛҒА

## йәки "Урал" үҙәгенең халҡыбыҙҙы

**"Урал" башҡорт халыҡ үҙәген бөгөн Башҡортостанда ғына түгел, башҡорттар йәшәгән һәр төбәктә, хатта Федераль үҙәктә лә һәйбәт беләләр. Хәҙерге йәштәр ошо йәмәғәт ойошмаһының ниндәй тарихи шарттарҙа барлыҡҡа килеүен белеп тә етмәй. Республикабыҙ тарихында үҙ урыны булған ошо милли йәмәғәт ойошмаһы барлыҡҡа килеүгә 20 йыл тулыу уңайы менән унын беренсе рәйесе, филология фәндәре докторы, профессор Рәшит ШӘКҮР һәм "Урал" башҡорт халыҡ үҙәгенең бөгөнгө етәксеһе Риф ИҪӘНОВ менән ҡорған әңгәмәбеҙҙә йәмәғәтселек эшмәкәрлегенең тарихи роле хаҡында һүҙ барҙы.**

**▸ "Күп ҡабатлауҙан доға иҫкермәй", тиҙәр. Әйҙәгеҙ, бынан 20 йыл элегерәк булған ваҡиғаларҙы тағы ла бер тапҡыр иҫебеҙгә төшөрәйек.**

**Р. ШӘКҮР:** "Урал" башҡорт халыҡ үҙәге бөтә башҡорт йәмәғәтселеген, тарихи Башҡортостан ерҙәрендә йәшәгән башҡорттарҙы берләштереүсе ойошма булараҡ барлыҡҡа килде. Унын урындағы ойошмалары республикабыҙ ауыл-ҡалаларында ғына түгел, халҡыбыҙ ойошоп көн иткән бар төбәктәрҙә бар ине. Йәмәғәт эшмәкәрлегенең бына шундай ойошҡан төҫ алыуының тарихи сәбәптәре булды. "Үҙгәртеп ҡороу" лозунгылары аҫтында барған сәйәси ваҡиғалар һөҙөмтәһендә баш ҡалабыҙҙың башҡорт зыялылары әүҙемләшеп, "Аҡ тирмә" милли-мәҙәни клубы эшмәкәрлеген башлап ебәрҙе. Әммә тәүҙә беҙҙең эш итеү формаһы мәҙәни клуб сиктәренән сыға алманы, сөнки партия органдары хатта мәҙәни эшмәкәрлекте лә контроль аҫтында тотто. Был шарттарҙа айырым йәмәғәт ойошмаһын булдырыу мөмкин дә түгел ине. Әммә 80-се йылдар аҙағындағы ижтимағи үҙгәрештәр башҡорт йәмәғәтселеген дә һиҫкәндереп, тетрәтеп, уятып ебәрҙе. Килеп тыуған сәйәси шарттарҙа башҡорт зыялылары ла "Ни эшләргә?" тигән һорауға яуап табырға тейеш ине. Яңы сәйәси шарттарҙа халыҡ яҙмышы, Башҡортостандың киләсәге тураһында уйланыу, ошоноң өсөн яуаплылыҡты үҙ өҫтөнә алырға ынтылыу бер төркөм зыялыларыбыҙ алдында халҡыбыҙҙы берләштерә алыусы йәмәғәт ойошмаһын булдырыу маҡсатын ҡуйҙы.

1989 йылдың башынан уҡ буласаҡ йәмәғәт ойошмаһын төҙөү буйынса әҙерлек эштәре башланды, ойоштороу комитеты унын положениеһы, уставы өҫтөндә эшләне. Май айында Өфө ҡалаһында ҙур башҡорт йыйыны уҙғарылды, һәм тап ошо йыйында ойошманың тәүге документтары ҡабул ителде, унын эшен етәкләүсе органдар һайланды.

**▸ Ул ваҡыттағы рәсми власть органдары яңы башҡорт ойошмаһы барлыҡҡа килеүен нисек ҡабул итте?**

**Р. ШӘКҮР:** Власть органдарынан ниндәйҙер күрһәтмәләр, тыйыуҙар булмаһа ла, партия өлкә комитеты беҙҙең йәмәғәт ойошмаһын ҡолас йәйеп ҡаршы алманы. Киреһенсә, унын эшен билдәле бер сиктәрҙән сығармау, киңәйтмәҫкә тырышыу, ҡыҫып, баҫырып тотоу алға һөрөлдө. Мәҫәлән, яңы ойошма тураһында 1989-1990 йылдар матбуғатынан бер ниндәй мәғлүмәт тә табып булмаясаҡ. Ҡайһы бер гәзит мөхәррирҙәре журналистарҙы "Урал" үҙәге ойошторған сараларға барыуҙан ҡәтғи тыйҙы. Беҙгә ойошмабыҙҙы иғтибарға алмаҫҡа, күрмәҫкә тырышыу дәүерен үтеп сығырға тура килде.

**▸ Бәлки, ул саҡтағы власть әһелдәре башҡорт йәмәғәтселегенең ниәттәрен аңламағандыр, уларҙың эшмәкәрлегенә шик-шөбһә менән ҡарағандыр?**

**Р. ШӘКҮР:** Милли мәсьәлә элек-электән бик хәүефле өлкә сифатында ҡаралып килде, партия әһелдәре лә милләт хаҡында һүҙ ҡуҙғатыусы һәр кемде милләтселектә ғәйепләргә әҙер торҙо. Ғөмүмән, партия һәм власть органдары күп йылдар буйына милли йәмәғәтселек эшмәкәрлеген объектив баһалай алманы.

Әле беҙ иҫкә алған ваҡыттағы етәкселек башҡорт йәмәғәтселегенең көсөнә ышанманы, унын йәмғиәт һәм дәүләт торошона яһаған йоғонтоһона дөрөҫ баһа бирә алманы. Шулай ҙа беҙ тап ошо осорҙа дәүләт органдары менән бәйләнешкә инеп, һөйләшеүҙәр алып барҙыҡ. Әлбиттә, ул саҡта власть менән бәхәстәргә инергә, хатта тарткылашырға, ҡаршылыҡ күрһәтергә лә тура килде. 1989 йылдың май айында уҙғарылған Беренсе башҡорт халыҡ йыйынында делегаттарҙың



***Әлбиттә, ул саҡта власть менән бәхәстәргә инергә, хатта тартҡылашырға, ҡаршылыҡ күрһәтергә лә тура килде. 1989 йылдың май айында уҙғарылған Беренсе башҡорт халыҡ йыйынында делегаттарҙың бойондороҡһоҙ фекере, ҡурҡмай әйтелгән һүҙе трибунанан бик ҡыйыу яңғыраны, ул саҡтағы партия әһелдәре хатта бер аҙ шаңҡып, аптырабыраҡ та ҡалғандай булды.***

бойондороҡһоҙ фекере, ҡурҡмай әйтелгән һүҙе трибунанан бик ҡыйыу яңғыраны, ул саҡтағы партия әһелдәре хатта бер аҙ шаңҡып, аптырабыраҡ та ҡалғандай булды.

Йыйыныбыҙ легитим булһын өсөн, төбәктәрҙә йыйылыштар уҙғарылды, демократик юл менән һайланған делегаттарға халыҡ талабын власть органдарына еткереү бурысы йөкмәтелде. Һөҙөмтәлә властар беҙгә иғтибарлыраҡ була барып, беҙҙең ойошма менән килешеп эшләү юлын һайланы. Күңелдәргә ныҡ һеңдерелгән ҡурҡыу барьеры аша үтеү мөмкинлегенә беҙ тап ошо йыйын барышында бик асыҡ төшөнһәк, власть менән йәмәғәтселек араһындағы ышанмаусанлыҡ пәрҙәһе лә ошо ваҡытта асыла башланы.

1989 йылдың майынан декабрҙә уҙғарылған икенсе йыйынға тиклемге осорҙа бик күп эштәр башҡарылды, был ваҡыт арауығын "Урал" үҙәгенең ойошоу, формалашыу дәүере, тип атарға була. Эш бик интенсив барҙы, үҙенең киләсәк өсөн әһәмиәте яғынан был ваҡыттың бер көнө айҙарға торорлоҡ булғандыр. Күтәрелгән һорауҙар, ҡуйылған маҡсаттар шул тиклем күп һәм ҡатмарлы ине, уларҙы хәл итеү өсөн аҙнаһына ике-өс тапҡыр йыйылышҡан саҡтар аҙ булманы.

**▸ Уҙған быуаттың 90-сы йылдары сәйәси ваҡиғаларға бай булды. Милли-ижтимағи ойошма булараҡ барлыҡҡа килгән "Урал" башҡорт халыҡ үҙәгенең сәйәси көскә әүерелеп, яңыртылған Башҡортостан республикаһын төҙөүгә индергән өлөшөн хәҙерге заман күҙлегенән нисек баһаларға була?**

**Р. ШӘКҮР:** Республикабыҙҙың яңы статусы, суверенитет өсөн көрәш барған йылдарҙа башҡорт йәмәғәтселегенең роле баһалап бөткөһөҙ. "Урал" үҙәге бик аҙ ғына ваҡыт эсендә үҙ артынан киң халыҡ ҡатламдарын эйәртә алыусы абруйлы йәмәғәт ойошмаһы булып танылды. Был тарихи ваҡиғалар замандаштарыбыҙҙың күҙ алдында барҙы, күптәребеҙ ошо ваҡиғаларҙың уртаһында ҡайнаны. "Урал" үҙәгенең ойоштороу, өгөт-нәсихәт эштәре, ул уҙғарған саралар халҡыбыҙҙы туплай алды, унын милли аңын XX быуат башындағы рухи күтәрелеш кимәленә еткерҙе. Республикабыҙ сәйәси яңырыу осорон кисергәндә "Урал" үҙәге аша халыҡ ихтыяры үҙебеҙҙең етәкселеккә лә, Федераль үҙәккә лә һис бер тотҡарлыҡһыҙ еткерелеп торҙо. Тағы бына нәмә мөһим: республикабыҙ суверенитетының башҡорттар өсөн генә түгел, ошо ерҙе төйәк иткән барса халыҡҡа ла файҙалы булыуы хаҡында аңлатыу эштәре алып барҙыҡ. "Урал" үҙәге ошо ваҡытта халҡыбыҙҙың авангардына әүерелде. Власть органдары сәйәсәттә беҙҙең позициябыҙҙы иҫәпкә алды. Беҙ ғилми йәмәғәтселекте йәлеп итә алдыҡ, белгестәрҙең дөйөм эшебеҙгә индергән өлөшөн хәл иткес, тип нарыҡларға була. Ул саҡтағы сәйәси платформабыҙҙы төплө анализға, төрлө өлкәләрҙә эшләгән ғалимдарыбыҙҙың ғилми ҡараштарына нигеҙләп төҙөй алдыҡ. Сәйәсәт, иҡтисад, тарих, философия, социология, сәнәғәт, мәҙәниәт, мәғариф һәм башҡа өлкәләрҙә танылыу тапҡан ғалимдарыбыҙ республикабыҙҙың киләсәге хаҡындағы фекерҙәрен халыҡҡа "Урал" үҙәге трибунаһы аша иғлан итә ине. Республикабыҙҙың, тимәк, башҡорт халҡының ғына түгел, бөтә халыҡтарыбыҙҙың яҙмышын, киләсәген беҙ төплө, ғилми нигеҙле концепцияға ярашлы билдәләү юлын һайланыҡ.

Әлбиттә, республика мәнфәғәттәрен хәл итеү юлын беҙ башҡорт халҡының яҙмышынан айырып ҡарай алмай инек. Ер йөҙөндә башҡорт милләтенең киләсәге башҡа бер урында ла хәл ителмәйәсәк, шунын өсөн яуаплылыҡты иң элек үҙебеҙгә алдыҡ, республика етәкселеге лә ошо яуаплылыҡтан тайпылманы. Башҡа халыҡтарҙың алдынғы вәкилдәре менән аралашыу барышында ошо яуаплылыҡтың өлөшләтә улар өҫтөнә лә төшөүен аңлата алдыҡ, тип уйлайым. Ғөмүмән, тап ошо осорҙа башҡорт халҡының республиканы ойоштороусы халыҡ булараҡ ниндәй сәйәси урын биләүен йәмғиәт аңында нығыта алыу бик мөһим булды. Беҙ милли идеологиябыҙҙың ғилми-концептуаль нигеҙен булдырыу өсөн барыһын да эшләнек, дәүләт власы тактик һәм стратегик ҡарарҙар ҡабул иткән саҡта "Урал" үҙәгенә ойошҡан зыялыларыбыҙ аша халыҡ ихтыярын асыҡтан-асыҡ белдереп торҙоҡ. Әлбиттә, йәмәғәт ойошмаһы дәүләт функцияларын үтәй алмай, әммә беҙ халыҡ тауышын, унын фекерен дәүләт етәкселәренә еткереп тороп, дәүләтселегебеҙҙе нығытыуға булышлыҡ итә алабыҙ. "Урал" үҙәге тарихҡа яңы Башҡортостан нигеҙҙәрен һалышыусы ысын халыҡ ойошмаһы булып инде.

**▸ Башҡорттар - боронғо халыҡ. Ниндәй генә замандар булмаһын, ата-бабаларыбыҙҙың тиҙ арала ойоша алып, тарих аренаһында берҙәм һәм ҡыйыу сығыш яһай алыуын дәлилләгән факттар күп. XX быуаттың һынылышлы, халыҡ яҙмышы өсөн хәл иткес булған йылдарында ошо боронғо тарихи тәжрибә йоғонтоһон күреп буламы?**

**Р. ИҪӘНОВ:** Рәшит Закир улы "Урал" үҙәгенең тәүге рәйесе булараҡ, бынан 20 йыл элек булған ваҡиғаларға бик төплө һәм нигеҙле баһа бирҙе. Эйе, совет заманында халҡыбыҙҙы бергә туплай алған милли ойошма булманы, һәм ул саҡтағы шарттарҙа бындай ойошманың булыуы ла мөмкин түгел ине. Илебеҙҙә яңырыу процестары башланғас, башҡорт милли хәрәкәте, властар һис көтмәгәнсә, тиҙ арала тоҡанып китте, һәм беҙ хәҙер ул дәүерҙе халҡыбыҙҙың рухи күтәрелеше осоро, тип баһалайбыҙ. Ысынлап та, был ваҡыттағы ижтимағи-сәйәси әүҙемлек өҫтән ҡушыу буйынса башланманы, милли хәрәкәтте халҡыбыҙҙың үҙаңында, хәтерендә һаҡланған тарихи тәжрибәне яңы шарттарҙа ғәмәлгә ашырыу, тип ҡарарға кәрәк. 1917 йылғы революция ла халҡыбыҙға тап ошо рәүешле тәьҫир итеп, яңы Рәсәй властарын башҡорт милли хәрәкәте менән иҫәпләшергә мәжбүр итә. Республикабыҙ дәүләтселеге ҡанлы көрәш һөҙөмтәһендә һәм Совет хөкүмәте менән килешеү нигеҙендә тергеҙелде, ә бындай ваҡиғалар эҙһеҙ үтмәй.

Йәмәғәтселек эшмәкәрлеге, унын лидерҙары тураһында һөйләгәндә, тағы бер мөһим нәмәне иҫтә тотоу фарыз. Халыҡ бөткөһөҙ көсөргәнештә йәшәй алмай. Митингылар, ҡапма-ҡаршы тороуҙар, киҫкен сығыштар осоро артта ҡалды, халыҡ әүҙемлеге, нисектер, һүлпәнәйеберәк киткәндәй булды. Мине 2004 йылда "Урал" үҙәге рәйесе итеп һайлап ҡуйҙылар. Рәшит ағай кеүек ғалимдар фәнгә кире ҡайтты, йәштәребеҙҙең байтағы эшҡыуарлыҡ юлын һайланы, ә йәмәғәт эштәре икенсе планға күсте. Тап бына ошондай шарттарҙа беҙ иғтибарыбыҙҙы халҡыбыҙ тарихына йүнәлттек. Заманында аҡһаҡалыбыҙ Булат ағай Рафиҡов ырыуҙар хәрәкәтен башлап ебәргәйне, әммә ул мәрхүм булғас, был башланғыс онотола бирҙе. "Урал" үҙәгенең ултырыштарында беҙ ошо мәсьәләне яңынан күтәрҙек, был изге һәм йоғонтоло эште тергеҙергә ҡарар иттек. Әйтергә кәрәк, был эшебеҙҙе хуп күрмәгәндәр ҙә булды. Ә беҙ үҙебеҙҙең ошо маҡсатыбыҙҙан кире ҡайтманыҡ. Ни өсөн? Халыҡ хәтерендә ырыуҙарыбыҙҙың боронғо йыйындары тураһында күпме хәтирәләр йәшәй, был турала мәғлүмәт фольклор, тарих материалдарында ла һаҡланған. Ырыу хәтерен тергеҙеп, халҡыбыҙҙың ете ҡатламын да әүҙемләштереп, ҡуҙғатып ебәрергә була.

**▸ Ырыуҙар тарихын, ул замандағы халыҡ йыйындары тураһындағы мәғлүмәттәрҙе**

***✓ Шул уҡ ваҡытта беҙҙе министрлыҡтарҙың өҫтән төшөрөлгән һәр инструкцияны, ул нисек кенә зыянлы булмаһын, үтә тырышлыҡ күрһәтеп үтәргә әҙер булыуы ғәжәпләндермәй ҡалмай.***

# БАҪАМ ДА...

## алға әйҙәгәне тураһында

**өйрәнһәң, ысынлап та, тарихыбыҙҙың онотолоп барған яңы биттәре асылғандай була. Ошо тарихи күренеште ата-бабаларыбыҙҙың ойошоп йәшәүен, кәрәк саҡта берҙәм һәм әүҙем хәрәкәт итә алыуын дәлилләп торған факт сифатында ҡарарға кәрәктер.**

**Р. ИҪӘНОВ:** Минең ата-бабаларым юрматы ырыуынан булып, Башҡортостандың көньяҡ тарафтарында көн иткән. Бала сағымдан юрматылар ерендәге Торатауҙың иң изге ҡомартҡы булыуы хаҡында ололар һүҙен ишетеп үҫтем. Торатау - юрматыларҙың йыл һайын яҙ етеү менән ойоштороло торған йыйын урыны булған. Шулай уҡ Торатау итәгендә бик күп башҡорт ырыуҙары вәкилдәренең бергәләшеп оло йыйындар уҙғарыуы хаҡында ла бик әҫәрләнеп һөйләй торғайнылар. Бындай йыйындарҙа кемдәр менән килешеүгә барыу, солох төҙөү, йәиһә яу сабыу кеүек тотош ил, халыҡ яҙмышын хәл иткән мәсьәләләр ҡаралған.

**▸ Бәлки, башҡорт йыйындарын ул замандағы үҙенсәлекле халыҡ демократияһы сағылышы сифатында ҡарап булалыр?**

**Р. ШӘКҮР:** Рус дәүләтенә ҡушылғанға тиклем үк башҡорттарҙың үҙидара формалары булған. Билдәле бер шарттарҙа рус дәүләтенә ҡушылыу маҡсатында килешеү төҙөү өсөн Мәскәүгә йәки Ҡаҙанға ебәрелгән башҡорт делегациялары һәр ырыуҙың идара итеүсе ҡатламы булыуы хаҡында һөйләй. 1736 йылда батша властары тарафынан тыйыу сыҡҡанға тиклем даими уҙғарылған башҡорт йыйындарын да әле һүҙ барған халыҡ үҙидараһының үҫешкән булыуына бер дәлил итеп ҡарап була. Боронғораҡ дәүерҙәрҙә башҡорт хандары булыуы билдәле, ә монгол хакимлығы осорондағы башҡорт иленең вассалитет сиктәрендә үҙидараһы булған, тип әйтергә кәрәк. Алтын Урҙа тарҡалғандан һуң башҡорттар төрлө ханлыҡтар ҡарамағындағы территорияларға бүленеүгә ҡарамаҫтан, улар бер-береһе менән тығыҙ аралашып йәшәп, үҙ мәнфәғәттәрен бергәләп яҡлау өсөн дөйөм фекергә килә алған, элекке берҙәмлегенән яҙмаған. Был мәсьәлә әле ныҡлап өйрәнелмәгән, шулай ҙа күп быуаттар дауамында башҡорттарҙың ойошоп йәшәй алыуы уларҙың үҙенсәлекле дәүләтселек формалары булыуын раҫлап тора. Шулай уҡ аҡһаҡалдар ҡоро, ырыуҙар ҡоро тип исемләнгән ҡарарҙар ҡабул итеү формаһы булыуы ошо фекерҙе дөрөҫләй. Тарихи документтарҙан башҡорттарҙың сауҙа, һөнәрселек һәм административ-идара итеү үҙәктәре булып торған боронғо ҡалалары булыуын беләбеҙ. Һуңғараҡ осорҙа асылған Өфө ҡаласығын шундай үҙәктәрҙең береһе, тип ҡарау дөрөҫтөр.

**▸ Халҡыбыҙҙың иң киҫкен, ил яҙмышы хәл ителгән мәлдәрҙә бал ҡорто күселәй ойошоп хәрәкәт итә алыуының башҡа сәбәптәре лә барҙыр бит?**

**Р. ШӘКҮР:** Бындай сәбәптәрҙең иң һөҙөмтәлеһе - рухи берҙәмлек. 1917 йылда тоҡанып киткән башҡорт милли күтәрелеше халҡыбыҙҙың уҡымышлы, көслө рухлы заттарының күп йылдар дауамында замандаштарының милли һәм дини үҙаңын формалаштыра алыуы арҡаһында мөмкин булды. Зәйнулла Рәсүлев мөриттәре, Аҡмулла, Ризаитдин Фәхретдинов кеүек юғары зыялыларыбыҙҙың рухи мәктәбендә әҙерлек үткән йөҙәрләгән белемле, мәҙәниәтле йәштәр халҡыбыҙ улдарын ватансылыҡ традицияларында тәрбиәләй, уларға дингә һәм милләткә тоғролоҡ идеяларын һеңдерә. Улар суфыйсылыҡ идеяларын халҡыбыҙҙы рухи берләштереү, туплау маҡсатында, уны ауырлыҡтар алдында, һынауҙар аша үткәндә бирешеп ҡалмаҫлыҡ халәткә еткереү өсөн ҡулланған. Зәки Вәлидиҙең, унын атаһының Зәйнулла ишан менән рухташлығын тап ошо рухиәт мәктәбенең асылын күрһәтеүсе миҫал, тип әйтер инем. 1917 йыл феномены башҡорттарға хас милли инаныу көсөнөң ни тиклем һөҙөмтәле икәнлеген бар Рәсәйгә күрһәтте. Ул дәүер зыялылары милләттең эске бөтөнлөгөн тәьмин итә алды. Уйлауымса, совет осоро идеологтары боронғо тарихыбыҙҙан, рухи традицияларыбыҙҙан, телебеҙҙән яҙҙырырға тырышып, ошо эске бөтөнлөгөбөҙҙө емереү маҡсатын ҡуйғайны.

**▸ Хәҙерге шарттарҙа милли йәмәғәт ойошмалары республикабыҙ һәм халҡыбыҙ мәнфәғәттәре өсөн элеккесә әүҙемлек күрһәтә аламы?**

**Р. ИҪӘНОВ:** Совет осоронда бар милләттәрҙе бергә ҡушып, бутап, ошо милли буталыштан совет халҡы тип аталған төшөнсә яһанылар. Әле лә шулайыраҡ килеп сығыуы бик мөмкин. Рәсәй милләте тураһында хәҙер ҙә күп һөйләйҙәр бит. Әммә милләт төшөнсәһен бер ни ҙә алмаштыра алмай: Башҡортостан кешеләрен дөйөмләштереп, башҡорттар тип атаған осраҡтар була, ләкин республикабыҙҙа йәшәгән сыуаш, украин йәки урыҫ кешеһе барыбер үҙ милләтенең вәкиле булып ҡала. Беҙҙең ойошмабыҙҙың төп бурысы - тарихыбыҙҙы, ғөрөф-йолаларыбыҙҙы, телебеҙҙе, милли үҙенсәлектәребеҙҙе һаҡлап ҡалыу, халҡыбыҙға янаған төрлө хәүеф-хәтәрҙән ҡурсалау.

Башҡорттар Рәсәйҙең күп өлкәләрендә һибелеп йәшәй, әммә бөгөнгө шарттарҙа тик Башҡортостанда ғына беҙ үҙебеҙҙең милли ихтыяждарыбыҙҙы тулыһынса ҡәнәғәтләндерә алыу мөмкинлегенә эйәбеҙ. Миллилегебеҙҙе, асылыбыҙҙы үҙебеҙ өсөн генә түгел, башҡалар алдында ла һис ҡурҡмайынса раҫлай алыуыбыҙ шарт. Һуңғы ваҡытта мин бына нимәгә иғтибар иттем: башҡорт ырыуҙары йыйындары халҡыбыҙҙың милли үҙаңын әүҙемләштереп, быға саҡлы милләтенә битараф булғандарҙы ла уятып ебәргәндәй булды. Күптәребеҙ үҙенең нәҫел-ырыу тарихын бөтөнләйгә тиерлек белмәй ине. Тап ошо ваҡытта боронғо тарихыбыҙға иғтибар бермә-бер артты, ырыу, нәҫел шәжәрәләрен тергеҙеү эше киң йәйелеп китте, онотола яҙған күренекле шәхестәребеҙҙең исемдәре кире ҡайтарылды. Бына ошо тарихи хәтеребеҙҙе яңыртыу эшенә Илгиз Солтанморатов, Азамат Бураншин, Юлдаш Йосопов, Азамат Рәхимҡолов, Азат Бердин кеүек йәш ғалимдарыбыҙҙың ихлас ҡушылып китеүе бик шатландырҙы. Халҡыбыҙҙың тарихы буйынса айырым әҫәрҙәр, гәзит-журналдарҙа мәҡәләләр баҫтырып сығарған яҙыусыларыбыҙға бик рәхмәтлебеҙ. "Урал" үҙәгенең етәкселәре, уға булышлыҡ иткән зыялыларыбыҙ, арҙаҡлы ғалим-аҡһаҡалдарыбыҙ халҡыбыҙҙың милли үҙаңын үҫтереү өсөн байтаҡ эштәр башҡарҙы.

Халыҡ алдындағы тағы бер бурысыбыҙ - тыуған төйәгебеҙҙе сит-ят ҡулдарға күсеүҙән һаҡлау. Заман үҙгәрҙе, күп нәмә аҡса менән үлсәнә, баҙар иҡтисады шарттарында изге ҡомартҡыларыбыҙға хәүеф янай. Бына Торатауҙы ла сәнәғәт объектына әйләндереп, ер йөҙөнән юҡ итергә теләүселәр һис тыныслана алмай. Уны йөҙәр миллионлаған аҡса сығанағы итеп ҡараусыларға ҡаршы тора алмаһаҡ, киләсәк быуындар беҙҙе ғәфү итмәҫ. "Урал" үҙәге ошо мәсьәләне һәр саҡта ла иғтибар үҙәгендә тота, беҙ үҙебеҙҙе Торатауҙың иң әүҙем һаҡсылары итеп иҫәпләйбеҙ.

Һуңғы ваҡытта ауыл хужалығы тәғәйенләнешендәге ерҙәр хосусилаштырылды, шунын менән файҙаланып, ерҙәребеҙгә хужа булырға теләүсе сит-ят әҙәмдәр күбәйҙе. Шул уҡ ваҡытта үҙҙәренә тейгән ер пайҙарын да алырға теләмәгәндәр булды, ошо йәһәттән беҙҙең йәмәғәт ойошмаһы өгөт-нәсихәт эштәре алып барҙы, ырыу йыйындарында еребеҙҙе киләсәк быуындар өсөн һаҡлау маҡсатында мөрәжәғәттәр ҡабул ителде.

"Урал" үҙәге һәр саҡта ла ижтимағи-сәйәси ваҡиғаларҙың уртаһында булды, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы) менән бергә байтаҡ саралар уҙғарылды. Ваҡытында республикабыҙға, унын етәкселегенә ҡаршы ҡотҡо таратып, "ҡыҙыл-көрәндәр" һөжүмен ойоштороусы Бигнов, Дубовскийҙарға ҡаршы акцияларҙа беҙҙең йәмәғәт ойошмаһы үҙен иң әүҙем һәм тәүәккәл ойоштороусы итеп күрһәтте. Беҙҙең ойошмабыҙҙы Федераль үҙәктә лә бик һәйбәт беләләр, сөнки милли мәнфәғәттәребеҙҙе һанға һуҡмаған ҡарарҙарға, закондарға ҡаршы үҙ фекеребеҙҙе беҙ һис бер ҡурҡыуһыҙ белдереп торабыҙ.

**▸ Йәмәғәтселек эшмәкәрлеге дәүләт өсөн дә, йәмғиәт өсөн дә файҙалы. Халыҡ фекере, унын ихтыяры йәмәғәт ойошмалары аша дәүләт органдарына еткерелеп тора. Хәҙерге осорҙа бындай эшмәкәрлек һөҙөмтәле булһын өсөн нимәгә иғтибарлы булыу фарыз?**



**Р. ШӘКҮР:** Халыҡ фекерен, унын ихтыяждарын белеү генә аҙ. Ниндәй генә проблема булмаһын, уны дәүләт ҡарамағына сығарыу өсөн унын төплө өйрәнелгән, бар яҡтан да нигеҙләнгән булыуы кәрәк. Киләсәгебеҙ өсөн хәл иткес булған проблемалар буйынса йәмәғәт ойошмаһының үҙ ҡарашы, үҙаллы фекер йөрөтөү мөмкинлеге, төплө нигеҙле һығымталар эшләй алыуы бик мөһим. Хәҙерге дәүерҙә йәмәғәтселек эшенә теге йәки был өлкәлә тәрән фекер йөрөтә алырлыҡ белгестәр йәлеп ителмәһә, халыҡ фекере, талабы дәүләт кимәленә етмәйенсә, иғтибарҙан ситтә ҡалыуы мөмкин. Унан һуң, һәр проблеманың рәсми терминология аша ҡуйыла алып, билдәле бер документ формаһында бирелә алыуы фарыз. Әйтелгәндәр белгестәрҙең ҡатнашыуы аша ғына йәмәғәтселек эшмәкәрлегенең һөҙөмтәлелегенә өлгәшеп була икәненә ышандыра. "Урал" үҙәге алып барған эштәрҙә юғары кимәлдәге белгестәр бик әүҙем ҡатнаша ине. Ошондай ғилми йәмәғәтселектең тәүге быуыны хәҙер олоғайып бара, беҙ хәҙер ваҡытыбыҙҙы башлыса фән өлкәһенә йүнәлтәбеҙ. Беҙгә алмашҡа башҡаларҙы артынан эйәртерлек шәхестәр килмәне, шунын арҡаһында йәмәғәтселек эшмәкәрлеге һүлпәнәйә бирҙе. Әлбиттә, быуындар алмашыныуы бар өлкәләр өсөн мөһим, был йәмәғәтселеккә лә берҙәй ҡағыла. Үҙ мәнфәғәте өсөн генә түгел, халҡы өсөн янып йәшәүсе шәхестәр ҡоро формалашһа, башҡорт йәмәғәтселегенең республикабыҙ тормошондағы роле күтәреләсәк. "Урал" башҡорт халыҡ үҙәге кеүек тарихи ойошмабыҙ эшмәкәрлегендә киләсәктә яңы быуын белгестәре күберәк ҡатнашыр, тип өмөтләнәйек.

Республикабыҙ етәкселеге йәмәғәтселек эшмәкәрлегенә ыңғай ҡарай, күп эштәребеҙҙе хуплай, шул уҡ ваҡытта айырым ведомство етәкселәренә әйтер һүҙҙәребеҙ, дәғүәләребеҙ ҙә юҡ түгел. Тормош дауам итә, үҙгәрә, яңырыу кисерә, беҙ милләтебеҙҙе заман талаптарына яуап бирерлек юғары кимәлгә еткерә алырға тейешбеҙ.

**▸ Бөгөн ҡайһы бер сәйәсмәндәр милли ойошмаларҙы, бигерәк тә милли йәштәр ойошмаларын өнәп бөтмәй, Федераль органдар ҙа уларҙың эшмәкәрлеген төрлөсә тотҡарлау яйын эҙләй. Бындай шарттарҙа йәмәғәт ойошмалары эше бөтөнләйгә һүнеп ҡалмаҫмы?**

**Р. ИҪӘНОВ:** Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, федераль властар йыш ҡына үҙ ҡарарҙарының файҙа урынына зыян килтереүен алдан күрә алмай. Тәжрибәле, эшмәкәр кешеләр урынын үҙ мәнфәғәтен өҫтөн күреүселәр күпләп биләне, улар йәмәғәтселек эшенә бөтөнләйе менән кире ҡарашта. Милли ойошмалар ниндәйҙер мәсьәлә буйынса ҡаршы һүҙ әйтә икән, уларға экстремист мөһөрөн баҫырға әҙер генә торалар. Яманаты сыҡҡан монетарлаштырыу законы, мәғарифта милли-төбәк компонентын бөтөрөү менән бәйле ваҡиғаларҙы иҫкә алыу ҙа етә. Шул уҡ ваҡытта беҙҙе министрлыҡтарҙың өҫтән төшөрөлгән һәр инструкцияны, ул нисек кенә зыянлы булмаһын, үтә тырышлыҡ күрһәтеп үтәргә әҙер булыуы ғәжәпләндермәй ҡалмай. Әгәр шундайыраҡ инструкция килеп, йәмәғәт ойошмалары эшен тыйырға ҡушһалар, быны үтәргә теләүселәр бик тиҙ табыласаҡ. Ошондай осраҡта беҙ үҙ һүҙебеҙҙе әйтмәһәк, бөтә Рәсәйгә ишетелерлек тауыш күтәрмәһәк, беҙ барыбыҙ ҙа баҫылып ҡалып, хоҡуҡтары сикләнгән аҙ һанлы милләт хәлендә ҡаласаҡбыҙ. "Урал" башҡорт халыҡ үҙәге үҙе ойошҡан йылдарҙа ил мәнфәғәте өсөн нисек көрәш алып барһа, киләсәктә лә ошондай маҡсаттар ҡуйылған юлды дауам итәсәк.

***Тәжрибәле, эшмәкәр кешеләр урынын үҙ мәнфәғәтен өҫтөн күреүселәр күпләп биләне, улар йәмәғәтселек эшенә бөтөнләйе менән кире ҡараšта. Милли ойошмалар ниндәйҙер мәсьәлә буйынса ҡаршы һүҙ әйтә икән, уларға экстремист мөһөрөн баҫырға әҙер генә торалар. Яманаты сыҡҡан монетарлаштырыу законы, мәғарифта милли-төбәк компонентын бөтөрөү менән бәйле ваҡиғаларҙы иҫкә алыу ҙа етә.***

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Бер аҙым алға баҫам да, әйләнәм мин артыма, ҡайҙа баҫҡандар икән, тип, күҙ һаламын халҡыма", тип яҙған заманында Мәжит Ғафури. Зыялы заттар үҙҙәре артынан халыҡты эйәртергә бурыслы, ә был иң элек милли йәмәғәт ойошмаларының әүҙемлегенән, уларҙың ил-йорт мәнфәғәттәрен иң юғары кимәлдә яҡлай алыуынан тора.**

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әңгәмә ҡорҙо.**

***✓ Һәр берәһе үҙ ҡайғыһын үҙ йөрәгенә һалып, өндәшмәй генә хушлаштылар. Туғандарыңа хәҙер нимә тип әйтәһең? Бына ҡайҙа ул әҙәм көлкөһө! Алам тигән кәләше ҡасҡан! Оят!***




Анна Ивановна ингәндә Батырҙың әсәһе аласыкта ҡорот ҡайнатып йөрөй ине.

- Ҡунаҡтарың ҡайтып бөттөмө, апай? Ҡалай урамығыҙ һил булып ҡалған.

- Эйе, ҡайттылар. Бөгөн оҙаттыҡ. Бер килеүен килгәс, оҙағыраҡ ятып ҡайтһағыҙ ни була, тип ҡарағайным, ҡайҙа инде, сыҙап яталармы ни?!

- Батыр ҙа яңы эшенә китәләр инде?

- Юҡ! Бесән эшләшәм әле, тинә. Алай ҙа ул бар эргәбеҙҙә.

- Кәләш эпиреп, ауылға ҡайтарып булмаймы? Үҙебеҙҙә лә шул уҡ лесхоз бар ҙа инде. Йәйләп, кумәкләп өй күтәреп бирер инек, үҙебеҙ һау саҡта.

- Ҡайтманы бит, ҡайтманы... - Апайҙың тауышы тонокланып китте.

- Апай, әйҙә, эргәмә ултыр әле. Батырҙың хәле һине ныҡ борсой шикелле, һөйләшеп, күңел бушатып алайыҡ. Нишләп көйөп тик йөрөйһөң?

- Аһ-аһ, нимәгә көйәйем ти мин? Көймәйемсе.

- Ярай, апай, йәшереп маташма! Мин хәлде беләм...

- Э-э-эй, Аллам! Әллә һине лә үҙ арбаларына егә һалдылармы? Исмаһам, һин мине аңларһың тиһәм әле!

- Алам, тигәнендә, ниңә ҡаршы киләһең? Ҡарышып, бөтөнләй өйләнмәй ҡуйһа, шунан?

- Улымдың йөрөгән ҡыҙы бар икән. Ҡыш ҡайтҡанында ул турала үҙем һүҙ башлағайным, уҡыуымды бөтәйем дә, әйттерәйек, тип, риза булды. Кем икәнен белгәс, үҙем тыйҙым.

- Бына һиңә - биш тәңкә! Үҙең һүҙ башлап, үҙең тыйып ултырыу нисек була инде ул?

- Кем икәнен һорашҡас, тыйҙым шул!

- Кем һуң ул? Бисурамы әллә?

- Ауыҙындан ел алһын!

- Балаһына кәләш алма, тип тыйған әсәне белмәйем, ишеткәнем дә юҡ. Улай тыйыр өсөн хәтәр сәбәбе барҙыр бит?

- Бар шул, бар! Ул хәбәрҙе кешеләр миңә былтыр уҡ әпкилеп еткерҙе... - Бөтә ишеткән, белгәндәрен түкмәй-сәсмәй әсенеп һөйләп бирҙе әсә. Ул үҙенең башында тыуған шик-шөбһәләрен дә ысынға ҡушып һөйләне. Күп уйланып йөрөп, сетерекле фараздарына үҙе лә ышана башлаған икән.

Анна Ивановна балаһының яҙмышы өсөн йәне әсенеп һөйләгән әсәне бүлдермәй тыңлап, эстән генә йәлләне. Ул һөйләүенән ялҡыпмы, күңелен бушатыуҙан тынысланыпмы, туҡтаны, ниһәйәт.

- Бинаһаҡҡа әҙәм балаһын рәнйетеү ҙур гонаһ түгелме?

- Гонаһ тип, кем етте, шуны алып бирәйемме балама? Үҙең нишләр инең?

- Барып, күреп, танышып килер кәрәк. Үҙең әйттең бит, теле асылыуына врачтарҙың өмөтө бар, дауалана, күнекмәләр эшләй, тип.

- Шулай тигән булды ла ул.

- Апай, кеше кәмселегенән түгел, үҙебеҙҙең өҫтөнлөктән көслә була алһаҡ, бөтәбеҙгә лә сауап булыр ине.

- Шулай ҙа ул, аңлайым, икеһен дә йәлләйем.

- Теләһә нимә уйлап, үҙеңдә үҙең яфалап, баланды ыҙалатып йөрөгәнсә, берәй төплө ҡарарға кил, исмаһам. Үҙең нимә теләйһең, беләһеңме һуң?

- Әллә инде, әллә. Нимә уйларға ла белмәйем. Башҡынайым тубалға әйләндә микән?

- Ул ҡыҙ ҙа әҙәм балаһы! Уның ни ғәйебе бар? Белмәгән көйө ниңә ул баланы ситкә тибергә?

- Әллә ағаһы килен менән барып, үҙен, туғандарын күреп, танышып, һөйләшеп килһендәр микән?

- Эйе, апай, эйе! Нимә уйларға белмәй, алйып йөрөгәнеңсә, хәлде асыҡлап ҡуйыу дөрөҫ булыр.

- Төпсөнөп, тикшеренеп йөрөйҙәр, тип асыуланмаһалар ярай ҙа ул...

- Улайтырға ни, улар башҡорт түгелдәрме? Халыҡ йолаларын белмәйҙәр, тип уйлайһыңмы әллә? Октябрь байрамында барып һөйләшеп килһәләр, Яңы йылға туйға ла әҙерләнербеҙ әле. Һуғым һуйғас, ҡышҡы иң матур байрамда туй үткәреү ҡалай йәтеш килеп сыға...

...Ни булһа булыр, боҙ урынынан шылғас, юлындағы ҡаршылыҡтарҙы йырып, барыбер алға бара, хәҙер уны ауыҙлыҡлап туҡтатыуҙар, ай-һай, аңһат булмаҫ. Быға тиклем бер нәмә лә булмаған кеүек һыр бирмәй йөрөгән әсәһе Батыр китер көндән алда күңеләндә үрсетеп йөрөгән һүҙҙәрен әйтте улына.

- Юл ыңғайы ағайыңдарға һуғылып, һөйләшеп китһәң, яҡшы булыр ине, үҙҙәрен көтһән, әллә ҡасан ҡайтырҙар, белеп булмай...

Батыр әсәһенең был һүҙҙәрен ҡапыл ишеткәс, терт итеп ҡалды.

- Нимә тип һөйләшәйем, әсәй, берәй йомошоң бармы? - тигән булды, белмәмешкә һалышып. Мәрйә әсәһе, бала ыҙалап йөрөмәһен, тип, түҙмәй, серҙәрен әллә ҡасан ҡолағына шыҡырҙап бөттө инде.

- Нимә тип, шул инде... Октябрь байрамдарындамы, үҙҙәренә ҡасан унай шул тирәлә, теге яҡҡа барып күрешеп, һөйләшеп ҡайтһындар. Әгәр һүҙҙәре килешһә, ҡайтып, беҙгә хәбәр итһендәр. Унай килеп сыҡһа, Яңы йылда туй ҙа үткәреп ҡуйырбыҙ... - Теләр-теләмәҫ кенә әйткәндәре ярылып ята. - Эй, балам, балам, ошо тирәнән генә һайлап алып бирер инек. Үҙебеҙҙең яҡта тегенә, бешеренә белгән донъя көтөрлөк һылыу ҡыҙҙар бөткәнме ни? Беҙ ҙә ҡарт көнөбөҙҙә ҡоҙалар менән аралашып, сөкөрҙәшеп йәшәр инек, бәпәйҙәрегеҙҙе ҡарашыр инек. Үҙегеҙ ҙә ике яҡҡа өҙгөләнмәй, бер ергә ҡайтып йөрөр инегеҙ. Үҙегеҙгә юҡ ерҙә яһалма ҡаршылыҡтар эҙләйһегеҙ бит, тормош былай ҙа ауыр. Хоҙай Тәғәлә биргән һинауҙарын имен-аман үтһәң дә, әлхәм!- Ошоға тиклем күңеләнә йыйған бөтә зарын бер тынала әйтеп һалды әсәһе. Һыҡранманы ла, һыҡранманы ла, балаһының күңелен ҡалдырам тип түгел, үҙенең күңелен интектергән борсолоуҙарҙан бушанайым, ҡотолайым бер ыңғай, тип әйтте, шикелле. Батыр хәлдең шулай ыңғай барыуын белеп йөрөгәнгә, әсәһенең һүҙҙәрен тыныс ҡабул итте. Рәхсәтен ризаһыҙлыҡ менән генә биргәнен белһә лә, аҡланырға, аңлатырға тырышып, юҡ-бар һөйләп йәнен көйҙөрөүҙән тыйылды. Әсәй әсәй инде, нимә тиһә лә хаҡы бар! Нимә тиһә лә, балаһын аңларға тырышҡан бит! Әлбиттә, үҙен еңеүе уға еңел булмағандыр. Нисек шуға риза булмай, дөғәләшеп ултырмаҡ кәрәк? Юҡ, тәүфиҡлы була белергә лә кәрәк.

- Әсәй, рәхмәт! Беҙҙең өсөн йөҙөң ҡыҙармаҫ. Ҡайғырып, үкенеп, үҙеңдә ыҙалатма инде, йәме? Бөтәһе лә һәйбәт булыр, бына үҙең күрерһең...

- Ярар, ярар, балам, ни булһа ла шулай булһын! Амин!

* * *

Ағаһы менән еңгәһе, 5 ноябрь йома көндө төш мәлендә барып етербеҙ, тип, Батырҙың адресын алып ҡалдылар. Яңылыҡтарын һөйләргә ашҡынып, ҡыуанғанынмы, ҡурҡҡанынмы күреп, аңлашырға өмөтләнеп килгән Батыр дежурҙа ултырған ҡыҙҙан: "Гүзәл өйҙә юҡ, был арала булмаҫ та",- тигән хәбәр ишеткәс, ултыра төшә яҙҙы. Бына ошолор инде бөтә изге хыялдарыңдың ҡапыл селпәрәмә килеүе! Был хәбәрҙән күпме шаңҡып торғандыр, ләкин асыҡ бер нәмә лә аңламаны. Әлфиә әхирәтен күреп, төпсөнөп, бөтәһен дә асыҡламайынса тынысланыу юҡ. Бәхетенә күрә, алай ҙа Әлфиә өйҙә булған.

- Ә-ә-ә, Герой! Тю-тю! Гүзәлде тәүгә саҡырғанында уҡ мин һине иҫкәрттем бит, ауыҙыңды иплап ас, теләһә нимә һөйләп, ҡурҡытып ҡуйма, тип...

- Нимә һөйләнем? Бөгөн саҡ ауылдан килдем! Ауылға ҡайтҡанымды белде, ҡайҙа ул?

- Ауылға алып ҡайта-а-ам, туғандарым менән таныштыра-а-а-м! Һинеке булмай, кемдең һүҙҙәре? Үҙең ҡурҡытҡанһың...

- Улай тип әйткәнемә күпме ваҡыт үтте. Мин уны ҡышҡыһын саҡырғайным бит, был юлы ҡайтҡанда түгел! Унан һуң, һин дә мин осрашып бергә йөрөнөк тә инде.

- Ҡышын тағы алып ҡайтам, тиһә, нишләрмен, тип ҡото осоп йөрөнө, бахырҡай. Аңламайһыңмы әллә, һиңә өйрәнгәнгә генә тартынмай иркен аралаша, ә яттарҙан ояла бит ул, һиҙгәнең дә юҡмы ни?

- Мин эргәһендә булһам, туғандарымдан ниңә ҡурҡырға уға?

- Әллә ысын һиҙмәйһең, әллә шулайтып ҡыланаһың инде. Үҙеңә күпме йөрөп, ҡасан саҡ өйрәнде? Ят кеше эргәһендә үҙенең ҡабырсағына инеп йәшенгәнен һиҙмәнеңдәме?

- Юҡ, кешеләр араһында ҡәҙимге оҙаҡ бергә йөрөнөк, өйрәнеп баралыр, тигәйнем.

- Эй, ағаҡайым, күңелең туң икән, бер нәмә лә аңламағанһың. Үҙеңә нисек унай, шулай ғына йәшәп өйрәнгәнһеңдер. Үкенес, ләкин бер нәмә лә эшләп булмай хәҙер, поезд ушел!

- Ниндәй поезд ушел? Ҡайҙа китте? Йәнемә теймәй генә, әҙәмсә матур итеп һөйләсе, зинһар?

- Э-э-эй, һине йәләр кәрәкме әллә? Не дождешься! Үҙең ғәйепле!

- Йәлләмә, нисек бар, шулай һөйлә, түҙермен. Ғәйеп миндә булһа, төҙәтергә тырышырмын.

-Бер нәмә лә аңламай ҡалдым. Гүзәл эштән сыҡты ла ҡапыл ғына йыйынып китте лә барҙы. Ҡайҙа китте, нимәгә китте, күпмегә китте, эт белһен.

- Нисек инде ул иң яҡын әхирәте һиңә әйтмәйенсә, әллә ҡайҙа китһен?

- Тәүҙә һинең эргәңә киткәндер тип уйланым. Улай булһа, ниңә минән йәшерергә тейеш? Әллә берәй "эш боҙоп" ҡуйһағыҙ, оялышынан, инәйенә ҡасып киттеме, тип тә уйланым. Ундай-былдай нәмә һиҙелмәне, шикелле. Әллә "тейҙеңме"? Йәйгеһен йәйләүеңә саҡырғайның бит.

- Кит, алйот! Мин намыҫын юғалтҡан аҙғын тип уйлайһыңмы әллә?

- Аҙғынмы, түгелме, белмәйем, ләкин һинән ҡасты бит ул, йәшерен ҡасты, шулай булғас, сәбәбен һинән башҡа кем яҡшыраҡ белһен, ә?

- Ҡайҙан эҙләйем инде хәҙер? Әлфиә, беләһең һин, белә тороп әйтмәйһең!

- Ҡыҙғаныҫҡа күрә, ысынлап та белмәйем шул. Йән әхирәтем була тороп та, миңә әйтмәй киткәс, сәбәбе гәләмәттер инде, тип уйлайым. Тәүҙәрәк хатта йәнем көйә ине. Аҙаҡтан аңланым, бәлки, дөрөҫ эшләгәндер.

Һәр берәһе үҙ ҡайғыһын үҙ йөрәгенә һалып, өндәшмәй генә хушлаштылар. Туғандарыңа хәҙер нимә тип әйтәһең? Бына ҡайҙа ул әҙәм көлкөһө! Алам тигән кәләше ҡасҡан! Оят! Ҡайтыуында бер станция алдан төшөп, инәйенә инеп белешеп сыҡты. Инәйен аптыратып ҡуймаҫ өсөн, Гүзәл ҡайҙа, тип тура һорарға ҡыймай, Гүзәл һеҙгә килмәнеме, тип белешергә генә ингәйнем, тигән булды. "Юҡ, күптән килгәне юҡсы, эше күпме икән?" тигән яуап алғас, сәйгә саҡырһа ла, ғәйепле кеше һымаҡ, ашыҡ-бошоҡ хушлашып сығып ҡасты. Киләһе аҙнала, унан һуңғы ялдарында тапаны ла тапаны шул белгән бер уҡ һуҡмаҡтарын. "Юҡ, күрмәнек, белмәйбеҙ," - тигәндән башҡа яуап ишетмәне.

Юғалыу булһа, бер хәл, ул бит Батырҙың эргәһендә юҡлығынан файҙаланып, йәшерен ҡасҡан. Хәҙер туғандары, дуҫтары алдында аҡланыр өсөн алдашырға мәжбүр буласағы ҙур бер тутыҡҡан сөй булып йөрәгенә ҡаҙалды. Шул уҡ мәлдә әсенгән күңелен Гүзәлгә асыуы менән бергә йәлләүе өттө. Ҡайҙа йөрөй? Күргеһе килмәһә, ҡағыҙға яҙып китһә, ни була? Ни ғәйебем өсөн яфаланғанымды белер инем, исмаһам. Хата эшләгән булһам, алдына ятып ғәфү үтенер инем...

Гел генә яҡшылыҡ уйлап йөрөйөм, бер кемгә лә зыян эшләмәйем, аламалыҡ теләмәйем, тиһәң дә, үткер гәҙелһеҙлек балтаһы, ғәйепләнеңме, юҡмы икәнеңде һорамай ҙа, нескә генә бәгереңдә өҙә сабырға әҙер тора. Был гәҙелһеҙлек башбаштаҡлығынан әҙәм балаһы боҙолмай, ҡайҙа барһын? Ни тиклем яҡшы булһаң да, барыбер, хәүеф-хәсрәтте ямандарҙан күберәк татыйһың. Бөйөк Аҙдың яҙылмаған ҡанундары шулаймы, әллә әҙәмдең яҙмышына тәғәйенләнгән шәхсән өлөшө бармы? Ямандар аламалыҡты тағы ла яһилыраҡ аламалыҡ менән еңеп өйрәнгән, ә яҡшыларҙың ул һәләте юҡ. Үҙенең йәнен яҡлар өсөн дә улар башҡаларҙы рәнйетә алмай. Шуға күрә лә гел генә үҙҙәренең яҡшылығынан үҙҙәре зар-интизар булып ыҙалай. Ғәжәпме?

Батыр ҙа, ғәйебе бармы, булһа, нимәнән ғибәрәт икәнен белмәһә лә, бөтә ғәйепте үҙенән күрҙе. Шулай булмаһа, йүнле кешенән, ҡиәмәттән ҡасҡан кеүек, ашыҡ-бошоҡ, өндәшмәй-нитмәй ҡасмаҫ, йәшенмәҫтәр ине, тип уйланы. Кеше көлдөрөп йөрөүе лә оят. Ҡыҙы ҡасҡан егеттең абруйы күҙгә күренеп яҡын-тирәләге иң тәрән соҡорҙан тәрәнерәк ҡоланы, ятаҡта, урамда осраған элекке таныштарының күбеһе, бахы-ыр, тигән кеүек, көләмһерәп кенә һаулыҡ һорашып үтәләр. Күпме йөрөргә була? Йөрө, йөрөмә, ләкин кәрәгең шул хәтлем генә булғандыр инде. Ошондай үкенесле уйҙар менән ятаҡта Гүзәлдең исеменә записка ҡалдырҙы, һуңғы барғанында инәйенә, тышына адресын яҙып, буш конверт биреп китте. Әгәр Гүзәл ҡайтһа, йә берәй хәбәр ишетелһә, ошо конвертты почта йәшнигенә ташлауын һораны. Көтөргә генә ҡалды, башҡа нимә эшләйһең?

* * *

Батыр сараһыҙлыҡтан, көсһеҙлөктән сығыу юлдарын таба алыуына өмөтөн өҙөп, бөтәһен оноторға ла ғәмһеҙ йәшәргә кәрәктер, бәлки, тип уйлар хәлгә етте. Һинең әҙәпле, әхлаҡлы булып йәшәүең кемгә хәжәт, барыбер, шикләнеп ҡарап, насар уйлаясаҡтар. Түшенә "Мин һәйбәт, әҙәпле, ғәйебем юк!" тигән таҡта тағып йөрөп булмай бит инде. Таҡһаң да, төкөрҙәләр һиңә! Бөтә кеше кеүек йәшәргә кәрәк: бөтә яҡшыны үҙеңә генә көҫә, бөтә яҡшыны тешең-тырнағың менән үҙеңә тарт, бөтә унайлыҡтар һинең өсөн генә, бөтәһе лә һинең ихтыярыңа буйһоноп, ҡулайлашып йәшәһен. Кешелә ни эшең бар? Хәҙерге хәтәр донъяла һәр кем үҙенең шәхсән хәлен ҡайғыртып, үҙ ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереп, бөтә мөмкинлектәрҙә үҙ мәнфәғәттәрендә

✓Булат Рафиҡовтың "Шәхестең танытмаһы" тигән мәҡәләһенән республикала асыҡтан-асыҡ милләт, туған тел яҙмышы хаҡында һөйләшеүҙәр башланды.



генә файҙаланып йәшәй. Был тормошта улар еңеүсе! Бәлки, шулайҙыр ҙа. Ләкин ғәзиз йәненә әсә һөтө менән инген, ата-бабалар ҡаны менән һеңгән ғәҙәттәрҙе, тәненән иҫке күлдәк сискән кеүек һыпырып ташлап буламы һуң? Юҡтыр! Әллә нимәләр уйлаһа ла, уйҙарында аҙғынлыҡтың сиктәрен ашаҡлап ултырһа ла, ғәмәлдә, шул уҡ Батыр булып ҡалды. Яман булыр өсөн дә үҙ йәнендә йәлләмәй, аяуһыҙ иҙер, кәмһетер кәрәк икәнен аңланы.

Бөтә күңелен һалып эшләгән эше яман уйҙарынан арындырҙы, яңы эштәге хеҙмәттәштәренең, иптәштәренең уға йылы, ихтирамлы мөнәсәбәте уйында ғына тыуған аламалыҡтарҙан да үҙен оялтты. 5 ноябрь яҡынлашыуын уйлаһа, баяғы тутыҡҡан сөй ҡаҙалып йөрөгән әсеттереп-әсеттереп әрнетә. Ҡаҙалыу ғына түгел, соҡоп-соҡоп алған кеүек, хатта. Нимә эшләргә? Телеграмма бирергәме? Килһәләр, аңлатыуы ҡыйын булыр, ояты ни тора! "Килмәй торорғоҙ", тип кенә телеграмма биреү дөрөҫтөр, исмаһам, күҙҙәренә ҡарап аңлашыуҙан ҡотолаһың. Ярар, киләһе ялда тағы барып килермен дә, телеграмма ебәрермен, тигән ҡарарға килде.

Ялы етте. Өйрәнгән һуҡмағынан үтте. Йәлләү ҡатыш шикле ҡараштарҙы күтәрҙе. Ул хәтлем йөшерелмәгән шикле ҡараштарҙы быға тиклем артыҡ һиҙмәгәйне, шикелле, әллә үҙе шулай һәр кемгә ышанмаусан булып киттеме? Йәйен йыландан ҡурҡҡан, ҡышын арҡандан өрккән, тигәндәре дөп-дөрөҫтөр. Ысынлап та, Гүзәлдең күҙгә күренерлек бер сәбәпһеҙ ҡапыл юғалыуында, бәлки, гонаһһыҙ бәрәс кеүек меҫкенләнеп йәлләтеп йөрөһә лә, ул гәйеплелер?

Нәүбәттәге хурлыҡ юлдарын тапап ҡайтыуының өсөнсө көнөнә үҙе ҡалдырған конверты килде. Аҫһа, буш! Булһын! Конвертты гәҙәт буйынса ғына асты ул, башҡа бер нәмә лә кәрәкмәй ҙә! Хәҙер уның хәлендә буш конверт алыуҙан да ҙур бәхет юҡ! Бахыр йөрәге күкрәгенән дарһылдап сығып ҡына бара. Анау тиклем кисерештәрҙән һуң улай тибергә эшкингәс, шәп әле ул, тип уйланы үҙе, иҫке йөрәге дарһылдауын ишетеп. Нимә эшләргә, нимә уйларға ла белмәй, бергилкем урынында алйып тик ултырҙы. Барыммы, бармайыммы, тигән уйҙан алйыманы, юҡ, бара ул, әлбиттә бара! Яҡшы хәбәрме был? Әллә яманмы? Шул уй мейеһен шаңҡытты. Барыбер, йәнде иҙгән билдәһеҙлектең сиге! Ошо уй йәнен арбаған сихырҙан ҡотҡарҙы. Нимә булһа ла, барып белешә һалыр кәрәк. Бара ул, барыр, ләкин күңелендә ниндәй хис-тойғолар алып барыр?

Мотоцикл тауышына ҡаршы сыҡҡан кеше булмағас, бушҡа йөрөйөмме икән әллә, тигән уй мейеһен әсетеп үтте. Өйгә инһә, яңы ғына һыулы тастан һөйрәп сығарып киптерергә ултыртҡан күшеккән себеш кеүек бөршәйеп, ике күҙе упайып, Гүзәле һике сиктендә ултыра. Әһә, инәйенән тетмәһе тетелгән, шуға иҫәнгерәп ултыралыр, тип кенә уйлап өлгөрҙө, тегенеһе йүгереп килеп түшенә һыйындлы ла үкһеп-үкһеп иларға керешгә. Ғәҙелһеҙ рәнйетелгән дә, яҡлау, аялау эҙләй, йәнәһе, әртис! Хәлдең асылын белмәгән бөрөү ситтән ҡарап торһа, ысынлап тороп ышанырлыҡ бит әле! Үҙәкте өҙөрлөк йәлләткес күренеш. Ниндәй әҙәпле, нескә күңелле, гәҙел кеше булмаһын, Батырҙың йәне эстән генә ҡон алыу рәхәте кисерҙе. Үс алыу тойғоһо һәр йән эйәһенә хас тәбиғи һыҙат, уны көслөп йәндә баҫһаң да, ҡасандыр барыбер шытып сыға, үҙенең йөҙөн булмаһа ла, йөҙрөгөн күрһәтә. Ә-ә-ә-ә! Үкенеһеңме, илайһыңмы, йәлләткең киләме? Ә үҙең нимәләр ҡылдың? Миңә рәхәт булғандыр тип уйланыңмы? Шул кәрәк һиңә! Эстән шулай уйланы, ә үҙе һыңҡылдап илауға ҡусҡән ҡәҙерлеһен ипле генә түшенә ҡысты, башынан һыйпаны; йәне айлап ҡына иҙерәй, тамсылап ҡына ирей башлағанын тойҙо.

Илап, шыңшып туйғас, Гүзәлдең дә хәүеф-хафалары, йәйге селләләге иләҫ-миләҫ ҡабарынҡы болоттар кеүек, тиҙ таралды. Батыр үҙенең күңелендә быға тиклем шашып ҡоторонған ярһыулы дағүәләре тарала барыуын, хатта уларҙың һөт өҫтөндә күпергән күбектәй йомшарыуын һиҙҙе. Быға тиклемгә шикләнеү, асыуланыуҙарының тамсы ла әһәмиәте юҡ кеүек тойолдо үҙенә. Икеһе лә һүҙҙе нимәнән башларға белмәй, урындыҡ ситендә шым ғына ултырғанда, самауырын күтәреп, инәй килеп инде. Ҡайһылай үҙ ваҡытында!

- Ҡыҙым, шәмәреп ултырғанса, йәй ашъяулыҡты, сәй эсеп алайыҡ...

"Балам, эшләп йөрөйһөңмө? Яңы ергә өйрәнеп буламы? Эшең, иптәштәрең һәйбәттер бит? Йәшәр урының бармы?" тигән ябай ғына һорауҙары менән сәй эскәндәге буш ваҡытты тултырҙы инәй. Үсегешкән кешеләр һымаҡ, һаман түрһәйешып ултырыу бөтәһенә лә уңайһыҙ ине. Батыр был аралағы тормошо тураһында инәйенән күберәк Гүзәле өсөн барыһын да тәфсирләп кинәйәле итеп һөйләне. Ҡайҙа, кемдәр эргәһендә йәшәгәнен, өйөндә ниндәй уңай шарттар барлығын, көнөнә эш мәле күпме даүам итеүенә, буш ваҡытын нисек үткәреүенә хәтлем һөйләне. Эшләгән ерендә урмансыларға бейәләй һәм башҡа эш кәрәк-яраҡтары етештереүгә тәғәйенләнгән теген бүлмәһе бар икәнен дә аңғартты. Аҡыллы инәй тел төбөн аңланы шикелле, бик ҙур иғтибар менән тыңланы, һүҙ һыңғайы ҡыҙына мәғәнәле ҡарап-ҡарап алды. Гүзәл был ваҡытта нимәләр уйлағандыр, һөйләгәндәренә битараф кеше кеүек, шым ғына ултыра бирҙе. Хәйер, уның гел шулай икәнен белгәстәре, тик ултырыуы береһенә лә сәйер күренеш түгел ине.

Батыр төп мөһим бурысын үтәмәгән бит әле. Гүзәле юғалғас, ағаһы менән еңгәһе килерен өндәшә алмағайны, хәҙер, бәлки, шул ваҡыт еткәндер. Көнө лә килеп еткән, бөгөн үк әйтмәһә, тағы ҡасан килә алыр? Иң мөһиме, инәйҙе һыңғайлатыр кәрәк бит. Ҡапыл әйтеп, Гүзәлде ҡурҡытып ҡуйһа? Бәлки, бөгөн көнө түгелдер? Был арала былай ҙа аптыранырлыҡ, шомға һалған кисерештәр күп булды. Уларынан әле береһе лә йүнләп арына алмаған. Юҡ, тәүҙә Гүзәлдең үҙе менән һөйләшергә кәрәк.

- Инәй, беҙ Гүзәл менән тирәяҡты ҡыҙырып йөрөп киләйек, оҙаҡламаҫбыҙ...

(Дауамы бар).

КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

**...Тарихсылар тотонмағас, мин үҙем халҡым тарихы ҡоҙоғона төшөргә йөрьәт итәм. Беҙҙең тарихыбыҙ бик тәрәндә ята... шулай уҡ боронғо бөтә донъя тарихына барып тоташа. Донъя әҙәбиәтендә лә яҙыусыларҙың тарихта тәү асыш яһаусылар булып китеүе киң таралған. Беҙ шуны онотмайыҡ. Йәнә: тарихи әйберҙәргә тотонғанда ижадсының ҡулынан тотмайыҡ, әүәлге ҡанундарға ла сытырман йәбешеп ятмайыҡ. Ижадсы иркенерәк һулыш алһын. Ижад - ҡатмарлы күренеш, докладсы тарихи әйберҙәрҙә тарихи факт менән уйлап сығарыу, фараздың нисбәте хаҡында әйтеп китте инде, ҡабатлап тормайым. Фаразһыҙ тарихи әҫәр ҙә, әҙәбиәт тә тыумай...**



# ХАЛҠЫҢ МЕНӘН ҺӨЙЛӘШКӘНДӘЙ...

## Булат Рафиҡов менән аралашыу шундай кинәнесле ине

Был һүҙҙәр яҙыусы Булат Рафиҡовтың Башҡортостан яҙыусылар союзында үткән дөйөм йыйылыштағы сығышынан алынды. Дөйөм йыйылыш, әҙиптең сығышынан күренеүенсә, әҙәбиәт менән тарихтың үҙ-ара мөнәсәбәт мәсьәләләренә арналған, унда яҙыусылар Ғайса Хөсәйенов, Яныбай Хамматов, Йыһат Солтанов, Аҫылгужа Баһуманов һәм башҡалар сығыш яһаған. Әҙиптең халҡыбыҙ тарихының шундай тәрән тамырҙарын тойоп йәшәүе һәм башҡаларға шул тойғоһон күсерергә тырышып ижад итеүе уның әҫәрҙәрендә генә сағылыш табып ҡалманы, милләтебеҙҙең арҙаҡлы шәхесе, ил ағаһы булараҡ, булмышында һәм асылында берегеп йәшәне.

Донъяла шундай кешеләр була. Улар менән осрашҡанда-һөйләшкәндә халҡың менән аралашҡандай-һөйләшкәндәй булаһың, үҙеңә ниндәйҙер ышыкты, иленде, халҡыңды, уның бөйөклөгөн, ҡаһарманлығын тояһың. Булат ағай Рафиҡов тап ана шундайҙарҙан ине. Уның менән аралашыу, һөйләшеү үҙенсә кинәйәле, мәртәбәле булды. Быны күптәр һиҙгәндер. Һәлмәк кенә атлап килеп, әйәк ҡағып, аҡһаҡалдарса һиңә һүҙ ҡатыр ҙа, үҙең дә һиҙмәҫтән, булмышыңды икенсе бер донъяға сорналдырыр. Уның көслө ихтыяры теләһә кемде үҙенә буйһондорор, һис юғы, үҙе һөйләп бөткәнсе, шым ғына тыңлап торорға мәжбүр итер. Ошоларҙың өҫтәүенә, әгәр ҙә уның әҫәрҙәрен быға тиклем уҡыған булһаң, яҙыусы менән бергә уның хикәйәһенә, повесть йә романына, үҙең дә һиҙмәҫтән, персонаж булып инәһең дә китәһең, авторы менән аңғәмә юҫығында шул геройҙар булып йәшәйһең. Улай ғына ла түгел, шул әҫәр геройҙары араһында йөрөйһөң, улар менән бергә шатланаһың-көләһең, илайһың-ҡайғыраһың...

Үткән быуаттың 80-се йылдар аҙағы, 90-сы йылдар башы. Беҙ милли азатлыҡ романтикаһы менән янған йәштәр бәләкәй генә һәр бер хәлде ҙур ваҡиғә итеп ҡабул итеп, сабыуыллайбыҙ. Ҡайһы саҡ баҙап, артабан ни эшләргә белмәй, аптырап йә ҡурҡып ҡалабыҙ. Илебеҙҙә һәм республикабыҙҙа барған үҙгәрештәрҙең дә ана ниндәйҙәре бит. Шул сағында йәҙҙәренә ҡарарға йә кәңәш һорарға ағайҙарға йүгереп барабыҙ. Замандың ярһыулығы ағайҙарҙың да күбеһенә ҡусҡан, улар ҙа ярһыу һәм күтәрелеп сығырға әҙер генә торалар. Ярһыулығыбыҙҙы енеп, асыуыбыҙҙы баҫмаһаҡ, эш та боҙоуыбыҙ бар.

Шундай мәлдәрҙә мин һәр ваҡыт Булат ағайға иғтибар итә, уның һүҙенә ҡолаҡ һала торғайным. Шундайын тыныс, бер нәмә лә булмаған кеүек, һаман да йылмайып, кинәйәләп һөйләп, кемгәлер төрттөрөп әйтеп, йөрөп тик ята. Әле республикабыҙҙа барған сетерекле хәл тураһында әллә ағай белмәйме икән, тип, янына барып, ярһый-ярһый, үҙемдең борсолоулы уйҙарымды теҙеп һалам. Юҡ, ағайым һаман да тыныс, ҡуҙғалмай. Мин һөйләгән хәл хаҡында ул күптән белә, улай ғына ла түгел, был мәсьәлә буйынса үҙ фекерен туплаған йә ниндәйҙер сара күрергә тәҡдим индергән булып сыға. Шул саҡтарҙа ваҡиғаларҙың уртаһында булғандар бер нәмәгә шаһиттыр: республикабыҙҙа барған күп кенә хәлваҡиғаларға баһа һәм артабанғы хәрәкәт юҫығы күп осраҡта Булат Рафиҡовтың фекерҙәренә ҡарап билдәләнде. Уның 1987 йылда "Ағиҙел" журналының 2-се һанында баҫылған "Шәхестең танытмаһы" тигән мәҡәләһенән башланды республикала асыҡтан-асыҡ милләт, туған тел яҙмышы хаҡында һөйләшеүҙәр. Был йәһәттән Булат Рафиҡовты ХХ быуат аҙағында башҡорт милли хәрәкәтенең башында тороусыларҙың береһе тип тә атарға була.

Беҙ күп кенә хәл-ваҡиғаларға, уларҙа ҡатнашҡан шәхестәребеҙ фиҙакәрлегенә үҙ ваҡытында баһа бирә алмайбыҙ шул. Бөгөн килеп кенә күп кенә хәҡиҡәттәрҙе асаһың, ваҡиғаларҙы, шәхестәр эшмәкәрлеген өр-яңыса баһалайһың һәм ваҡыт күҙлеге аша үткәрәһең. Был йәһәттән күренекле яҙыусы, халҡыбыҙҙың арҙаҡлы улы Булат Рафиҡовтың ХХ быуат аҙағында, ХХI быуат башында милләтебеҙҙең йөҙөн билдәләр шәхес булып үҫешеүенең нигеҙен, башта әйткәнебеҙсә, уның иң борон дәүерҙәргә барып тоташҡан тарихыбыҙҙы тәрән тойоуына, белеүенә генә бәйләп аңлатып булалыр. Тик үҙенең тамырҙарын, үҙенең кем икәнен тәрәндән белгән кеше генә шундайын ихтыяр көсөнә эйә булалыр ҙа, ерҙә ныҡ итеп баҫып тора алалыр ул. Милләтебеҙҙең ысын ир-азаматтарына хас сифаттарға эйә ине Булат ағайыбыҙ...

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Күренекле яҙыусы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, "Халыҡтар дуҫлығы" ордены кавалеры Булат Рафиҡовтың тыуыуына 75 йыл тулыуға арналған хәтер һәм ҡәҙер кисәһе 23 декабрҙә Башҡорт дәүләт филармонияһының Бәләкәй залында 19. 00 сәғәттә башлана. Кисәгә рәхим итегеҙ!**

Әхмәр ҮТӘБАЙ.

ФАРАЗДАР

**Йомшаҡ баҫып, металл Юлбарыҫ аҙымдары менән 2010 йыл яҡынлаша. Йылдың сираттағы был билдәһе ҡаршылыҡлы холҡо, хис-тойғоһо, йәшендәй тиҙлеге, тәүәккәллеге, ҡатылығы һәм шул уҡ ваҡытта логикаға ярашлы эш итеүе, рациональ һәм эҙмә-эҙлекле характеры менән айырылып тора. Ул шулай уҡ көс, мөмкинлектәр иркенлеген сағылдыра; үҙ маҡсатына ынтылышында ул ниндәйҙер бер ҡаршылыҡ алдында туҡталып ҡалмаясаҡ. Юлбарыҫ - үҙенә оҡшағанса йөрөргә яратыусы бесәй ҙә ул; унда логиканың ихтыяр һәм көстөң үҙенә тартып торған һәм хәүефле сифаттары яраша алған. Юлбарыҫ йылы Көнсығыш календарындағы башҡа билдәләргә нимәләр вәғәҙә итә икән, ун ике мөсәлдең һәр береһенә ҡыҫҡаса туҡталып китәйек.**

# ЯҢЫ ЙЫЛ КИЛӘ...

## Юлбарыҫ һынында





### Сысҡан

**(1924, 1936, 1948, 1960, 1972, 1984, 1996)**

Хәл-ваҡиғаларҙы һуҡранмай, асыу һәм күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәй ҡабул итеү - Сысҡандар менән Юлбарыҫтарҙың уртаҡ һыҙаты. Тимәк, Сысҡандарға йылдың яңы хужаһы менән дуҫлашыуы ҡыйын булмаясаҡ. Берәй ҡарарға килгәндә, Сысҡандар, ғәҙәттә, интуиция менән эш итеүсән, был сифат уларға киләһе йылдың теләһә ниндәй хәлдәренә лә яраҡлашырға мөмкинлек бирәсәк.

2010 йылда Сысҡандарҙы яңы урынға күсеү, ҙур ремонт эштәре көтә. Уларҙың никахҡа инеүе йә айырылышыуы ихтимал, ғаиләләрендә артыу көтөлә. Ҡайһы берәүҙәргә яңы урындан эш тәкдим ителәсәк, талаптар үтә юғары булыуға ҡарамаҫтан, баш тартмағыҙ.

### Үгеҙ

**(1925, 1937, 1949, 1961, 1973, 1985, 1997)**

2010 йылда еңелдән булмаясаҡ: йыл хужаһы менән һеҙҙең характерҙар бигерәк төрлөсә. Үгеҙ маҡсатына ашыҡмай ғына, эҙмә-эҙлекле барыуҙы хуп күрә, теләһә ниндәй авантюраларҙы ене һөймәй - тап ошондай тормош стратегияһы уны уңышҡа илтә лә инде. Ләкин... Һис кенә лә металл Юлбарыҫ хакимлыҡ иткән йылда түгел! Ҡыҫҡаһы, һүлпәнлек киләһе йыл Үгеҙҙәрҙең төп дошманына әйләнәсәк, уның тиҙ үҙгәреүсән хәлдәр артынан өлгөрмәүе ихтимал. Шуға күрә йылдам булырға, тиҙ уйларға, хәл-әхүәл торошона ҡарап ғәмәл ҡылырға өйрәнергә тура килер.

### Юлбарыҫ

**(1926, 1938, 1950, 1962, 1974, 1986, 1998)**

Юлбарыҫтарҙы ҡотларға була - ваҡыт һеҙҙең өсөн эшләйәсәк! Үгеҙ йылында тыйылып торған ниәттәр, өмөттәр, көтөүҙәр, ниһайәт, үҙенә юл ярасаҡ. Юлбарыҫтар көрсөк осоро етешһеҙлектәрен үҙ файҙаһына бора алыр. Тик уларға бер кәңәш: артыҡ осоноп китмәгеҙ!

### Ҡуян

**(1927, 1939, 1951, 1963, 1975, 1987, 1999)**

Ҡуян өсөн Юлбарыҫ бигүк яҡшыларҙан булмаған йыл идарасыһы. Улар араһындағы дәғүәселек ярышының Ҡуян файҙаһына түгеллеге көн кеүек асыҡ - 2010 йылдың төп ҡаршылыҡтарының береһе ошо. Үҙегеҙҙең эске тауышығыҙға ҡолаҡ һалып, күңел һиҙемләүе буйынса эш итергә тырышығыҙ - 2010 йыл проблемаларын уңышлы хәл итеүҙең бер юлы булыр был. Бер аҙ авантюраға бирелеп алыу ҙа ҡамасауламаҫ, тик бына үҙ-үҙенә артыҡ ышаныусан булыу кәрәкмәҫ.

### Аждаһа

**(1928, 1940, 1952, 1964, 1976, 1988, 2000)**

Бөтә йәһәттән дә нык айырылып торған сағыулығы Аждаһаға киләһе йыл бик күп яңы мөмкинлектәр алып килә. Тик һеҙгә, хөрмәтле Аждаһалар, ҡайһы бер "ҡатып ҡалған" ҡараштарығыҙҙан, ғәҙәттәрегеҙҙән арынырға тура килер. Үҙенә һәм тормошҡа күберәк ышанырға кәрәк. Ҡалыплашмағанса фекерләргә һәм үҙаллы эш итергә тырышығыҙ: Юлбарыҫтарға был оҡшай. Башҡаларға үтә нык тәнҡитсел ҡараштан арынырға кәңәш итәбеҙ. Ғәҙәти тормош етешһеҙлектәренән юғары һәм саф донъяға алып сығыусы театрҙарға, концерттарға, музейҙарға, ғибәҙәтханаларға йышыраҡ йөрөгөҙ.

### Йылан

**(1929, 1941, 1953, 1965, 1977, 1989, 2001)**

Йәл, Йылан билдәһе аҫтында тыуғандар өсөн ябайҙан булмаған йыл килә: ҡайһы бер мәсьәләләрҙе хәл итеүе һеҙгә ауырғараҡ тура килер. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, Йыландар, Юлбарыҫтар кеүек үк, йәшен тиҙлегенә эйә, уның хатта йыл хужаһын отоуға өлгәшеп, үҙенә өлөш йолҡоп алыу һәләте лә бар. Ә шулай ҙа һеҙгә сабыр булырға, уйлап һәм тәүәккәл эш итергә кәңәш бирелә.

### Йылҡы

**(1930, 1942, 1954, 1966, 1978, 1990, 2002)**

Йылҡының асыҡлығы, оптимизмы, аралашырға яратыуы 2010 йылда уның бөтә башланғыстарында ла уңыш килтерә. Ул ниндәй генә эшкә тотонһа ла (айырыуса коммуникация, транспорт, туризм өлкәһендә), әгәр ул ошо эшкә бөтә ихлаҫын һала икән, йыл эйәһенең хуплауына ғына лайыҡ буласаҡ.

### Ҡуй

**(1931, 1943, 1955, 1967, 1979, 1991, 2003)**

Ҡуй йылында тыуғандар тәбиғәттәре менән новатор һәм революционерҙар. Был ынтылыш Юлбарыҫ тәбиғәтенә лә тәңгәл: үҫешкә табан тыйылғыһыҙ ынтылыш яңы йылда уңышҡа илтеүсе төп нигеҙ. Әгәр уҙған йылда Ҡуй күп нәмәне үҙгәртергә теләп тә, мөмкинлеге булмаһа, яңы йылда иһә ул теләһә ниндәй бейеклектәрҙе яуларға һәләтле. Күптәр яҡын арала һөнәре буйынса үҫешә йәки эш урынын алмаштыра ала.

### Маймыл

**(1932, 1944, 1956, 1968, 1980, 1992, 2004)**

Мәғлүм булыуынса, Маймылдың йәшәү урыны ағас ботаҡтары араһында, шуға күрә уға янаусылар юҡ. Тимәк, Юлбарыҫтан да ул ышаныслы һаҡланған, шулай уҡ уның мәрхәмәтенән дә хатта.

Был билдәнең сәнғәт, фән һәм, ғөмүмән, ерҙән алыҫыраҡ торған өлкәләре вәкилдәре өсөн Юлбарыҫ ҡурҡыныс түгел: дәһшәтле йыртҡыс менән осрашмаҫ өсөн Маймыл ергә төшмәйенсә лә йәшәй ала, әлбиттә. Ләкин тормошта төрлө хәлдәр була, шунлыҡтан, ағас башынан төшөргә лә тура килә, бына шунда инде Маймыл өсөн күңелһеҙлектәр килеп сығыуы бар. Милек һатыу, һатып алыу, документтар менән эш итеүҙән, судлашыуҙан, конфликттарҙан ситтә торорға тырышығыҙ.

### Әтәс

**(1920, 1933, 1945, 1957, 1969, 1981, 1993, 2005)**

2009 йыл Әтәстәрҙе күтәрелеш рухында ҡалдыра, ләкин шуны онотмағыҙ: ул йылда башланған уй-ниәтәр һәм проекттарығыҙҙы тормошҡа ашырыу һеҙ уйламағанса күп көс һәм ваҡыт талап итәсәк. Шуға күрә ниндәй мәсьәләләргә тәү сиратта тотонорға, ә ниндәйҙәрен аҙаҡҡараҡ ҡалдырып торорға икәнлекте алдан ныҡлап уйлағыҙ. Һүҙ бында эш һәм ижади башланғыстар тураһында ғына бармай. Мәҫәлән, яҡын аралашҡан кешегеҙҙән айырыу тойғоһо кисереүегеҙ, уҡыуығыҙҙы йә булмаһа диссертация яҙыуҙы ташларға теләгегеҙ тыуыуы ихтимал. Бындай күңелһеҙлектәрҙән ҡотолоу өсөн, әле әйткәнебеҙсә, алдан уйлап эш итегеҙ.

### Эт

**(1922, 1934, 1946, 1958, 1970, 1982, 1994)**

Яңы йыл хужаһы һеҙгә үҙгәрештәргә һәләтегеҙҙе нығытыуҙа, яңылыҡтарҙы ҡурҡыуһыҙ ҡаршыларға ярҙам итер. Шулай ҙа йәшәүе тиҙ генә еңелләшеп китмәҫ, уның ҡарауы, элеккегә ҡарағанда күпкә ҡыҙыҡлыраҡ була барыр. Тик онотолоп китмәгеҙ: яҡындарығыҙ, дуҫтарығыҙ менән аңлашылмаусылыҡ килеп сығыуы бик ихтимал. Ләкин борсолмағыҙ: кем өсөн ысынлап та ҡәҙерле икәнһегеҙ, улар һеҙҙе ташлап китмәйәсәк.

### Суҫҡа

**(1923, 1935, 1947, 1959, 1971, 1983, 1995)**

Яңы йылда логикаға булған артыҡ һөйөүегеҙ һеҙҙе күңелһеҙ хәлдәргә ҡалдырыуы мөмкин, шуға күрә эске тауышығыҙға ҡолаҡ һалып тороғоҙ һәм Юлбарыҫ һеҙгә миһырбанлыҡ күрһәтер.

Был билдә әһелдәрен иң яҡындары: ғаиләһе, дуҫтары менән аралашыуҙа күп шатлыҡ, ҡыуаныстар көтә.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА** әҙерләне.

ТӘҮБӘ




## 25-се һабаҡ: "Асҡар" - ул иң бейек тау, ҡая, таяныс, изгелек менән ҡылған ғәмәлең, тәбиғи мөмкинлектәреңдең иң юғарыһы, сифаттарыңдың иң көттәһе...

Медиктар, бигерәк тә йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары буйынса табибтар, һаулыҡ өсөн ара-тирә 50-100 грамм спиртлы эсемлек ҡабул итеүҙең зыяны юҡ, тип иҫбатлай. Шул уҡ ваҡытта врач-наркологтар эсеүҙе бөтөнләй тыя. Медик булмаған, мин был тәңгәлдә көсһеҙмөн: кемдең хаҡлы йәки түгел икәнен иҫбатлар дәлилем юҡ.

Шулай ҙа был мәсьәләгә ҡағылышлы үҙемдең ҡайһы бер күҙәтеүҙәремде килтерергә баҙнатым етә. Халыҡта "Тамсы ташты тишә" тигән әйтем бар. Урынлы һорау тыуа: ә ни өсөн тамсы тишә, ниңә ағым йә тулҡын түгел? Дөрөҫ, ағым йә тулҡын ҡапыл урғылып ташҡа һуғыла ла тынып ҡала, ә тамсы йылдар, ғүмер буйы тама. Шул уҡ ваҡытта "эсә белеп эсеүселәр"ҙең өлкән йәшкә еткән саҡтарында тәҙәлеп булмаҫлыҡ эскесегә әүерелеүенә нисек ҡарарға була һуң? Һуңғы ваҡыт беҙҙең тормошҡа "һыра алкоголизмы" тигән термин килеп инде. Ғалимдар әйтеүенсә, был киләсәктә тотош быуын кешеләрен эскесе итеп әҙерләүҙең төүге һәм ышаныслы баҫҡысы икән. Йәғни бөгөн һыра тәьсиренә бирелеүселәр киләсәктең потенциаль алкоголиктары.

"Һаулыҡ өсөн" ара-тирә 50-100 грамм эсеү менән "һыра алкоголизмы" - бер үк төшөнсәләр. Икесе осраҡта ла организм спиртлы эсемлеккә **ейләп өйрәнә.** Алкоголизмдың был төрҙәре менән яфаланыусылар бер ваҡытта ла унан ҡотола алмай. Сөнки һыраның аҙ градуслы, араҡының аҙ миҡдарҙа булыуы һәм был хәлдең организмға әҙәклөк килтермәй, тик "рәхәтлек килтереүсе" сара булғаны өсөн кеше спиртлы эсемлектең ғүмерлек ҡолона әүерелә. Психологтар теле менән әйткәндә, спиртлы эсемлеккә бәйле код, мәғлүмәт түбәнге аңға һалына. Тимәк, ҡапыл, бер юлы, дәррәү рәүештә, күп итеп эсеп, артабан эскелектән бөтөнләй ваз кисеү файҙалыраҡ булып сыға түгелме (Бына ҡайҙа үлгән һәм һаҫыған бесәй йәшеренгән икән)?

Хәҙер инде икенсе бер күренеш хаҡында. Олоғайған көнөнә тиклем буйтым эскән кешенең, пенсия йәшенә еткәс, эсеүҙән ташлауы шулай уҡ яҡшыға алып бармай. Ундайҙар төүге пенсияһын да алып өлгөрмәҫтән, яҡты донъя менән хушлаша. Бында баяғы медиктарҙың әйткәне расҡана кеүек, йәғни, "һаулыҡ өсөн", ҡан яҡшы йөрөһөн өсөн тотҡолапйотҡолап алыуҙың файҙалы булыу күренеше. Был үҙе үк "кеше, йәшәгеһе килһә, ғүмере буйы эсергә тейеш", тигәндә лә аңлата һымаҡ...

Әммә... Тағы бер күренеш. Ғүмер буйы ауылда тракторсы (бигерәк тә "Беларусь" йөрөтөүсе) һәм көтөүсе булып эшләүселәр ҙә, пенсияға сығып, намаҙлыҡҡа ла ултырып өлгөрмәҫтән, инфаркт йә инсульт эләктерә. Төүге һәм аҙаҡҡы ике осраҡта ла кешенең бәләгә тарыуы пенсия йәшенә етеүенә, йәғни "ултыраҡ тормошҡа" күсеүенә бәйле. Көнө-төнө "Беларусь" тракторында йәки эйәрҙә һелкенеп йөрөүсенең ҡапыл тыныс ҡына йәшәй башлауы уның ҡан әйләнеше системаһы өсөн ниндәй әҙемтәләр килтереүен күҙаллау ҡыйын түгел. Ғөмүмән, күптәр башҡорттарҙа күҙәтелгән ҡан баҫымы, йөрәк ауырыуҙарын уларҙың эйәрҙән төшөү сәбәбе менән бәйләй.

Шунан фекер осо нимәгә килеп ялғана, тип уйлайһығыҙ? Эйе, элекке тракторсы менән көтөүсе, шулай уҡ ҡапыл эсеүенән туҡтаған кеше лә бер хәкикәттә дөрөҫ аңларға тейештер: хәрәкәттә - бәрәкәт, йәғни тап ошо мәлдә ҡан әйләнешен тәьмин итеүсе алдағы һандарҙа әйткән "икенсе йөрәк" эшкә егелергә тейеш. Ә нимә ул "икенсе йөрәк"? Эйе, туҡтауһыҙ хәрәкәт, иң ябайы - йүгереү. Тимәк, медиктарҙың "һаулыҡ өсөн" тип тәҡдим иткән 50-100 грамы - **ата ялҡауҙар өсөн рецепт!**

Тағы ла әлеге лә баяғы йүгереүгә әйләнеп ҡайтҡыҡ. Йүгереү - йөрәкте ял иттереүсе, уға ҡан әйләнеше эшмәкәрлегендә ярҙамға - "мисәүгә" егелеүсе "икенсе йөрәк". Кеше ни тиклем оҙаҡ йүгерһә, ғүмере лә шул тиклем оҙон була. Ғалимдар йөрәктең туҡтап тороуының кеше ғүмере өсөн нимәгә тиң булыуын иҫәпләп сығарған. Йөрәк теүәл 1 минутҡа туҡтаһа, ял итһә, ғүмер 10 йылға оҙая икән. Был һандар шартлы рәүештә алына, сөнки йөрәктең туҡтауы ҡандың ойоуына һәм кешенең үлеменә килтерә. Шулай ҙа йүгереү юлы менән беҙ үҙ йөрәгебеҙгә ял итеү форсатын тыуҙыра алыуыбыҙ бәхәсһеҙ.

Әгәр ҙә һеҙгә: "Һеҙҙең ғүмерегеҙ теүәл бер йыл ҡалған. Тик туҡтауһыҙ йүгереп кенә ғүмерегеҙҙе һуҙа алаҫаҡһығыҙ", - тип әйтһәләр, һеҙ ҡайһыһын һайлар инегеҙ: бер йыл ғүмерҙеме, әллә бер туҡтауһыҙ йүгереүҙеме? Әлбиттә, барығыҙ ҙа икенсе юлды һайлар инегеҙ. Ошо уҡ формуланы хәҙер башҡасараҡ итеп ҡорайыҡ. Һеҙгә 30 йәш икән һәм һеҙгә теүәл 60 йыл йәшәргә, әммә йүгерһәгеҙ, 90 йәшкәсә етә аласаҡһығыҙ икән, ти. Ҡайһыһын һайлар инегеҙ икән? Әлбиттә, 90 йәшкәсә ғүмерҙе, тимәк, йүгереүҙе һайлар инегеҙ. Бына һеҙ хәҙер үк ошо һандарға ҡарап, үҙ йәшегеҙҙе яҡынса хисаплап ҡарағыҙ ҙа, йүгерә башлағыҙ!

Әбйәлил районының үҙәге Асҡарҙың төүге атамаһы Таңатар булғанлығын күптәр беләләр. Ә нисек ул Таңатарҙан Асҡарға әйләнгән һуң? Был хаҡта, бәлки, күптәребеҙ белеп тә бөтмәйҙер. Ошо ауылдың арҙаҡлы уҙаманы, халҡыбыҙҙың тарихына, уның рухи гәүһәрҙәренә ғажиз зат, "Ҡуңыр буға" эпосын, "Утыҙ ике ҡыҙ инек" бәйете кеүек хазиналарыбыҙҙы бөгөнгө көнгә еткереүсе Мөғәлләм Шәйхаттар улы Мирхәйҙәровтың шәхси архивында уҡыным мин был тарихты.

Элек йотлоҡ йылында Таңатарға хәҙерге Бөрйән районы яғынан Асҡар атлы ир-уҙаман һыбай килеп сыҡҡан. Ауыл халҡының аслыҡ менән яфаланыуын күреп, ул тегеләргә үҙенең менгеһен һуйып ашатҡан да, үҙе йәйәүләп ҡайтып киткән.

Шулай итеп, ул таңатарҙарҙың хәлен бер аҙ еңеләйткән. Ауыл халҡы рәхмәт йөҙөнән ауылдарының исемен Асҡарға үҙгәрткән. Бер ҡарағанда, был ир-азаматтың ҡылған ғәмәле әллә ниндәй батырлыҡ та түгел һымаҡ. Сөнки ул саҡта аттың хаҡы ла 3 тиндән артмаған. Әммә уның изгелек менән ҡылған ғәмәле ошо ауылдың исеме булып мәңгелеккә уйылып ҡалған. Дөрөҫөн әйткәндә, ул халҡының күңеленә мәңге юйылмаҫ үҙ эҙен, һынының һәйкәлен ҡалдыра алған.

Был тарихты нимә өсөн һөйләйем-ме? "Эскесе ине", "ул эсә ине", "эсеп үлде" тигән һүҙҙәр ҙә, шул уҡ "Асҡар" кеүек, башҡалар күңелендә мәңгелеккә уйылыусан. Бәхеткә ҡаршы һәм үкенескә күрә, халыҡ хәтере батырлыҡ менән бер рәттән бахырлыҡты ла үҙенә һеңдерә шул. Хатта йәшерәк сағында эскелеккә бирелеп, аҙаҡ ярты быуат самаһы ауыҙына ла алмай, үҙ исемен бөтөн яҡтан да иле һәм халҡы алдында хеҙмәте менән аҡлап китеүселәрҙе лә аямай "ул йәш сағында эсә ине" тигән һүҙбәйләнеш.

Йәшәгәс-йәшәгәс, үҙеңдең үткән ғүмереңә юлыңда **үҙ "асҡар"ыңды ҡалдырырлыҡ итеп** йәшәргә кәрәк, тигәндә аңлата булыр был фәһемле һәм һоҡланғыс тарих. Юҡҡа ғына алмаһым "Асҡар" исемен. Уның мәғәнәһе "иң бейек тау, ҡая, таяныс" тигәнде аңлата. Һәр кем үҙ ғүмер тауының иң бейек үренә, ҡаяһына үрләргә, үҙҙәнә, туғандарына, яҡындарына һәм халҡына таяныс булырға, үҙ "Асҡар"ын табырға бурыслы. Шунһыҙ, йәшәүҙең мәғәнәһе лә юҡтыр. Ғүмер - марафон ул, был арауыҡты сатай-ботай баҫып атлап та, йүгереп тә үтеп була. Тик йүгерһәң, күберәкте күрәһең, барлыҡ ғүмереңдең ярты һын тағы ла йәшәйһең әле.

Һеҙ әле старт һыҙығында баҫып тораһығыҙ: **Стартҡа! Әҙерләнергә! Марш!**

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**
**(Аҙағы).**

УҢЫШ ҠАҘАН

# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Уйың ниндәй, үҙең дә шундай

**Өҫтә нимә, аҫта ла шул" тигән билдәле мәҡәлде бөгөн "Эстә нимә, тышта ла шул" тип үҙгәртеп әйтергә мөмкин булыр ине. Һинең уйың ниндәй, үҙең дә шундай. Ысынында иһә, заманса ҡараш-лы табибтар ғына түгел, билдәле ғалымсылар ҙа беҙҙең уйҙарыбыҙ ысынбарлығыбыҙҙы булдырыуын һәм сәләмәтлегебеҙҙең торошон билдәләүен таныған.**

Беҙҙең һәр беребеҙҙең телә һә ҡайһы хәл-ваҡиғаға ҡарата һайлау хоҡуғы бар. Беҙ нимәгәлер ыңғай йәки кире ҡарашта була, ышаныс йәки шик белдерә алабыҙ. Беҙ барыбыҙ ҙа төүҙә мөхәббәт һәм ышаныс тәҡдирен алып барасаҡ йән эйәләре булараҡ барлыҡҡа килтерелгәнбеҙ, әммә кешелектең бөтә йәшәү осоронда негативлыҡ дөйөм кеше аңына һеңеп ҡалған. Шуға ҡарамаҫтан, бер-береңә ҡарата тегеләй йәки был йөкләмәләрҙе үҙ өҫтөңә алырға кәрәклеген аңлаған кешеләр һаны артҡандан-арта бара. Бөгөн ғалимдар беҙҙең бер бөтөн булыуыбыҙҙы, һәр тере йән эйәһенең бүтәндәр менән бәйле булыуын, беҙҙең һәр беребеҙ нимәләр эшләгәндә, бүтәндәргә йоғонто яһауыбыҙҙы раҫлар тәжрибәләр үткәрә. Һуңғы ике тиҫтә йыл эсендә был ҡанунға ышаныусы һәм шуға ярашлы йәшәүсе кешеләр һаны ҡырҡа артты, һөҙөмтәлә, беҙҙең донъябыҙ яҡшы яҡҡа үҙгәрә. Күпселек кешеләр, үҙеңдең "мин"еңдән юғары торған көс бар, тигән инаныуға килә башланы.

Софи рухи үҫешкә бик һуң ғына ышана башлай. Бала саҡта ул организмының ҡайһы бер функциялары дөрөҫ эшләмәүенән яфа сигә һәм уның фекерләүе, нигеҙҙә, кире характер йөрөтә. Бындай ҡарашта булған саҡта уның рухи үҫеш юлы әкрен һәм ҡатмарлы була. Шулай бер саҡ ул элекке ғәҙәт буйынса баш ауыртыуына зарлана. Ул был ауыртыу көсәйеүен һәм киҫкә мигренгә әүерелеүен, иртәгәһен эшкә сыға алмаясағын күҙ алдына килтерә. Ә эшкә сыҡмай ҡалыу уның өсөн ҙур ҡыуаныс була. Әхирәттәренең береһе аңғармаҫтан уның һамаҡлауын ишетеп ҡала һәм был хәл-тороштан ҡәнәғәтлек алыуҙан ҡотолорға тәҡдим итә: "Ни эшләп һиңә аспирин ҡабул итеп, эсә сәй эсеп кенә ятып тормаҫҡа? Был хәленә әһәмиәт биреүендә туҡтат. Баш ауыртыуы үтеүенә ышан һәм иртәгәһе көн барыһы ла яҡшы буласағына өмөтлән - әллә һин бәхетһеҙ булыуҙы хуп күрәһеңме?"

Әхирәтенең аҡыллы һүҙҙәре Софины хайран ҡалдыра. Ул был кәңәшкә ҡолаҡ һала, ә еңелсә генә серем итеп тороуына баш ауыртыуы үткән була. Шунан алып Софи үҙенә ҡарата етди анализ үткәрә башлай, сөнки ул сирҙе үҙенә иғтибар итеү ысулы булараҡ ҡулланыуын аңлай. Шунан фекерләүен үҙгәртергә һүҙ бирә.

Беҙ ҙә үҙебеҙҙе уратып алған донъяның ҡорбандары булыу урынына уның хужаһы булыр өсөн үҙ өҫтөбөҙҙә эш башлай алабыҙ. Беҙ был тормоштоң ижад итеүсеһе булып торабыҙ - шуны иҫтә тоторға тейешбеҙ. Әгәр шулай иткәндә, беҙ негативлыҡтан күтәреләсәкбеҙ һәм Аллаһ Тәғәләнең фатихаһына өлгәшеп, яҡшы ҡарарҙар йүнәлешен аласаҡбыҙ. Әгәр беҙ аңыбыҙҙы "мин"ебеҙ хакимлығына бирмәй, уның менән ыңғай идара итһәк, һис шикһеҙ, үҙ донъябыҙҙың һәм яҙмышыбыҙҙың хужаһы буласаҡбыҙ һәм үҙебеҙгә шатлыҡ, бәхет һәм азатлыҡ тулы тормош төҙәй аласаҡбыҙ.

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**

БЕЛЕМ УСАҒЫ

# ҺӘР ЗАМАНДА ЛА...

## кәрәкле был һөнәр



**Бөгөн республикала 78 урта һөнәри белем биреү учреждениеһы бар. Уларҙың барыһын да бер уртаҡ маҡсат - төбәк хеҙмәт баҙары ихтыяждарына яуап бирерлек, конкуренцияға һәләтле белгестәр әҙерләү берләштерә. Баш ҡалала 1932 йылда план-иҡтисади техникум булараҡ асылған Өфө статистика, информатика һәм иҫәпләү техникаһы колледжы уҡытыусылары ла заман ҡуйған ошо талаптарҙы күҙ уңында тотоп, студенттарға белем бирергә тырыша.**

Һигеҙ тиҫтә йылға яҡын колледж республика учреждениелары һәм предприятиеларын урта звенолағы белгестәр менән тәьмин итеүсе булып тора. Ошо ваҡыт эсендә ул 22 меңдән ашыу студент уҡытып сығарған, был төбәк һәм тотош ил өсөн ярайһы уҡ ҙур һан.

- Әммә эш һанда түгел, ә йәмғиәт үҫеше өсөн кәрәкле булған һөнәрҙәрҙе һайлаған студенттарҙы әҙерләүҙең сифатлы булыуында, - ти колледж директоры, педагогика фәндәре кандидаты Сәйфетдин Ҡунысбаев. - Ғәҙәттә, беҙгә коллектив һәм структура бүлексәләре менән етәкселек итергә, хоҡуҡ һәм идара, статистика һәм иҡтисад өлкәһен уҙләштерергә теләгән, техника яраткан һәм компьютер программалары төҙөргә хыялланған ижади ҡарашлы кешеләр уҡырға килә. Бындай һәләтле йәштәр менән эшләгән уҡытыусыларыбыҙҙың 70 проценттан ашыуы квалификацион категорияға эйә, 3 фән кандидаты бар.

Был уҡыу йортонда иҡтисад, хоҡуҡ, статистика, дәүләт һәм муниципаль идара, ер-милек бәйләнештәре, техника йүнәлеше буйынса белем алырға мөмкин. Колледжды тамамлаған, студенттар БДУ, БДУ-ның Хоҡуҡ институты, ӨДАТУ, ӨДНТУ, БР Президенты янындағы дәүләт хеҙмәте һәм идара академияһында, Бөтә Рәсәй финанс-иҡтисади институтында ҡыҫҡартылған программа менән юғары белемгә лә эйә була ала.

- Беҙҙең колледж студенттары уҡыуҙа ла, спортта ла, йәмәғәт эшендә лә әүҙем ҡатнаша. Улар ҡыҙыҡһыныусан, бар нәмәне лә үҙҙәре эшләргә ынтыла. Бөгөн студенттар сифатлы белем ала һәм колледж студенты тигән исемде ғорурлыҡ менән йөрөтә, ә бер нисә йылдан кеше яҙмыштарын, дәүләт кимәлендәге мәсьәләләрҙе, илдең социаль һәм иҡтисади һорауҙарын хәл итергә тура киләсәк, - ти студенттарына ҙур өмөттәр бағлап Сәйфетдин Зәйнетдин улы.

Колледждың дүрт уҡыу корпусында, ике ятағында уҡыу, йәшәү өсөн шарттар яҡшы, колледжда студенттар һәм уҡытыусыларҙың хәүефһеҙлеге видеокүҙәтеү системаһы аша башҡарыла. 17 компьютер класы булыуы ла матди-техник базаның яҡшы икәнен дәлилләп тора, күп уҡыу йорттары өсөн хыял ғына булған уҡыу-методик материалдарҙан торған электрон китапхана ла булдырылған. Колледжда ике локаль селтәр бар, интернетҡа һәр компьютерҙан тоташып була. Бынан тыш, медицина хеҙмәтләндереүе, студенттарҙы йылы аш менән тәьмин итеү яҡшы ҡуйылған.

Заманса һөнәрҙәргә уҡыған Өфө статистика, информатика һәм иҫәпләү техникаһы колледжын тамамлаған белгестәрҙең белеме һәм оҫталығы ҡулланылған өлкәләр бик киң. Хеҙмәт баҙарында уларға һорау көндән-көн арта бара һәм, әйтергә кәрәк, был объектив процесс, сөнки бөгөнгө көндә мәғлүмәти технологиялар йәмғиәт үҫешенең бер күрһәткесе булып тора.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Өфө статистика, информатика һәм иҫәпләү техникаһы колледжы белгестәр әҙерләүҙә, инновацион эшмәкәрлектә һәм төбәктә социаль проекттарҙы тормошҡа ашырыуҙа яҡшы һөҙөмтәләре өсөн быйыл икенсе тапҡыр "Рәсәйҙең 100 иң яҡшы урта махсус уҡыу йорто" номинацияһында "Европа сифаты" Алтын миҙалына, ә уҡыу йортоноң директоры Ҡунысбаев Сәйфетдин Зәйнетдин улы "Йыл директоры - 2009" билдәһенә лайыҡ булды. Был да уҡыу йортоноң алдынғы ҡарашлы белгестәр әҙерләүгә һәләтлелек күрһәткесе булып тора. Заманса белем биреү мәсьәләләрен хәл итеүҙә инновацион ҡараш, уҡытыусыларҙың һәм студенттарҙың көндәлек хеҙмәте һәм башҡа факторҙар колледжға ошондай юғарылыҡҡа күтәрелергә һәм бөтә илгә танылырға ярҙам итә лә инде.**

**Ләйсән ДАЯНОВА.**

БАЛАЛАР ҺӨЙЛӘЙ

# ҠЫШ БАБАЙ ҠАЙҘА ЙӘШӘЙ?



**Бала саҡта барыбыҙ ҙа, Ҡыш бабай бүләк килтерә, тип, Яңы йылды түҙемһеҙләнеп көтөп ала инек. Үҫә төшөп, шыршы төбөнә бүләктәрҙе атай-әсәйҙәр үҙҙәре һалғанын белеп ҡалғас, Ҡыш бабайға ла ышанмай башланыҡ. Интернет, заман техникалары үҫешкән мәлдә балаларыбыҙ Ҡыш бабайға ышанамы икән? Ҡыш бабай ҡайҙа йәшәй тип уйлайҙар икән?**

**Нургөл (8 йәш):** Яңы йыл еткәс, Ҡыш бабай миңә тәмле-тәмле күстәнәстәр, бүләк килтерә. Иртән тороуыма шыршы төбөндә үҙем һорап яҙған хат буйынса бергә уйынсыҡ көтөп ята. Былтыр ҡурсаҡ һорағайным, Ҡыш бабай минен теләгемде үтәне. Ҡыш бабай Ирәмәлдә йәшәй. Унда шундай һыуыҡ. Кейеме асыҡ күк төҫөндә, аяғында быйма, аҡ һаҡаллы, ҡулына таяҡ тотҡан. Балаларға шатлыҡ өләшеп йөрөй ул.

**Заһир (8 йәш):** Быйыл миңә ысын Ҡыш бабай килер тип көтәм. Йыл һайын хат яҙып, тәҙрә төбөнә һалып ҡуйбыҙ. Икенсе көндә ишек төбөндә беҙ һораған бүләкте ҡалдырып китә. Әле ишек алдында ҡарҙан ҙур итеп Ҡыш бабай эшләп ҡуйҙыҡ. Ҡыш бабай беҙгә йыраҡ урмандан килә, тип уйлайым. Ҡыҙыл тун кейә, Яңы йыл еткәс, балаларға күстәнәс ташый.

**Гөлфиә, 7 йәш:** Ҡыш бабай һыуыҡ яҡта йәшәй. Яңы йыл яҡынлашып килгәндә йылы кейемдәрен, бейәләйен кейеп, ҡулына һары таяғын тотоп, кешеләргә байрам менән ҡотларға сығып китә. Оҙон юлдар үтеп, беҙҙең ауылға ла инеп сыға. Апайым менән Ҡыш бабайға хат яҙып, уны шыршы төбөндә ҡалдырбыҙ. Быйыл байрам ҡулдәге килтерер, тип көтәм...

**Дәүләт (11 йәш):** Ҡыш бабайҙың тыуған төйәге Ирәмәлдә. Ә ул тау беҙҙең гүзәл Башҡортостаныбыҙҙа урынлашҡан. Ҡыш еткәнен көтөп алам, сөнки Ҡыш бабай ейәнсәре Ҡарһылыу, күк төҫтәге тундарын кейеп, үҙҙәренең һөнәрҙәрен күрһәткән балаларға тәм-том, бүләк таратып йөрөй.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Бер апайҙың иркә генә улы ниндәйҙер гәзит биттәрендә: "Балаларыбыҙҙы Ҡыш бабай бар тип алдамағыҙ", - тип яҙылған мәҡәләне уҡып, илап ҡайтып ингән. Яңы йыл һайын үҙе теләгән бүләкте алып өйрәнгән иркә улын нисек тә тымыҙа алмаған апай, аптырап, гәзиттә алдап яҙғандар, тип әйтергә мәжбүр булған. Үҙ һүҙле малай кесә телефоны һораған. Һәр теләген үтәгән әсәһе Ҡыш бабай барлығына ышандырыр өсөн телефон һатып ала. Шулай, һәр бала Яңы йыл алдынан ниндәйҙер өмөтләнә, көтә. Киләсәккә яҡты хыялдар, изге маҡсаттар ҡуя. Сабыйҙарҙың өмөттәре аҡланһын. Тик балаларҙы ла "юрғанына ҡарап аяҡ һуҙырға" өйрәтергә, артыҡ шаштырмаҫҡа кәрәктер...**

**Зөһрә ҠУНАФИНА.**

# *Ҡ О Т Л А Й Б Ы Ҙ !*

Декабрь айында үҙҙәренең тыуған көндәрен билдәләүсе уҡыусыларыбыҙҙы - Ауырғазы районы Моразым ауылынан **Абрар Һатлыҡовты**, Баймаҡ районы Үрге Иҙрис ауылынан **Юлай Мостафинды**, **Рәмзиә Мостафинаны**, Темәс ауылынан **Таңһылыу Әүәлбаеваны**, Ярат ауылынан **Һәҙиә Әбдрәшитованы**, Балаҡатай районы Яныбай ауылынан **Рәйсә Закированы**, Әбйәлил районы Асҡар ауылынан **Гөлнара Шәңгәрәеваны**, Әхмәт ауылынан **Ишдәүләт Абдуллинды**, Мәйгәште ауылынан **Мәһәҙей Ямаловты**, Ейәнсура районы Аҡдәүләт ауылынан **Хәснулла Айсыуаҡовты**, Кесе Муйнаҡ ауылынан **Гөлнара Аҡбашеваны**, Учалы районы Оҙонгүл ауылынан **Жәүәт Миһрановты**, Наурүз ауылынан **Мәфрүзә Камалованы**, Мәләүез районы Ҡотош ауылынан **Зифа Вәхитованы**, Бөрйән районы Иҫке Монасип ауылынан **Фәрғизә Ғиззәтуллинаны**, **Фәрғизә Ҡунафинаны**, Күгәрсен районы Аҙнағол ауылынан **Мөхтәр Маннаповты**, **Владик Ҡыҙрасовты**, **Мәрйәм Ҡыҙрасованы**, Йәрмәкәй районы Түбәнге Ҡарамалы ауылынан **Разифа Лотфуллинаны**, Күпсәнәй ауылынан **Айгөл Константинованы**, Бәләбәй районы Приютово ҡасабаһынан **Фәнзилә Хафизованы**, Знаменка ауылынан **Г. Шафиҡованы**, Бәләбәй ҡалаһынан **З. Шириязданованы**, Саҡмағош районы Иҫке Ҡалмаш ауылынан **Рәсимә Мөхәмәҙиеваны**, Ғафури районы Бурлы ауылынан **Гөлсөм Түҙбәковаңы**, Өфө ҡалаһынан **Мәһиә Камилйәнованы**, **Нәзирә Насыроваңы**, Салауат ҡалаһынан **Линера Асҡарованы** ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ һәм рух ныҡлығы, сәләмәтлек теләйбеҙ! Көн һайын бәләкәй генә булһа ла уңыштарға өлгәшеп, еңеүҙәр яулап, Хоҙай Тәғәлә мәрхәмәттәренә өлгәшеп йәшәргә яҙһын һеҙгә.

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## Хөсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**19 декабрҙә** Башҡортостандың атҡаҙанған артисы **Римма Амангилдина "Һандуғасым-былбылым"** исемле йырлымоңло кисәһенә саҡыра. Концертта уның башҡарыуында башҡорт халыҡ йырҙары һәм композиторҙар әҫәре яңғыраясаҡ. Өр-яңы программала Радик Вәлмөхәмәтов, Рөстәм Ғиззәтуллин, Әлим Ҡәйүмов, Венер Камалов, Рөстәм Шәрипов, Салауат Мөхәмәтйәров, Индира Әсәҙуллина, Илшат Яхин, Гүзәл Үмәрғалина һәм башҡа артистар ҡатнашасаҡ.

**20 декабрҙә** 17.00 сәғәттә **Ейәнсура яҡташтар осрашыуы** уҙа. Дәүләт эшмәкәре Сәләймән Мырҙабулатовты хәтергә алыу кисәһендә ил уҙамандары Марат Кәрим, Хәсән Назар, Гөлсирә Ғиззәтуллина, сәхнә оҫталары Гүзәл Сөләймәнова, Рәсүл Ҡарабулатов, Алина Дәүләтханова, Артур Ҡунаҡбаев, Заһир Иҫәнсурин, Илсур Тайсин, Ыныйы Вәдүтова, Самат Кинйәбаев, Ильяс Ҡарабулатов, Радмир Абдуллин, "Каруанһарай", "Далан" төркөмдәре ҡатнаша.

**24 декабрҙә** "Зәңгәр уттар" традицияһында ойошторола саҡ тамаша үтә. **"Аҙмыш көлөүе, йәки Яңы йыл менән!"** исемле концертта тик һеҙҙең өсөн генә таныш йырҙар, дәртле бейеүҙәр, уйын һәм көлкө, Ҡыш бабай һәм Ҡарһылыу бүләктәре!

**23-30 декабрҙә** 11.00 һәм 14.00 сәғәттә, **2-10 ғинуар** 12.00 һәм 15.00 сәғәттә Башҡорт дәүләт филармонияһы "ваҡыт батшалығына" әйләнә. Беҙ үҙебеҙҙең кескәй генә тамашасыларыбыҙҙы һәм уларҙың ата-әсәләрен **Яңы йыл карнавалына** саҡырабыҙ. Бында һеҙҙе "Ледниковый период" йәнһүрәтенең билдәле геройҙары көтәсәк.

## Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең халыҡ артисы, С.Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Хөрмәтулла Үтәшевҡа 50 йәш. **19 декабрҙә** үтәсәк юбилей кисәһендә актер тамашасыға Зәйнәб Биишеваның "Салауаттың һуңғы монологы" поэмаһын тәҡдим итәсәк.

**20 декабрҙә** М.Кәрим әҫәре буйынса **"Ауыл адвокаттары"** спектакле.

**22 декабрҙә** Т.Миңнуллиндың **"Мулла"** драматик хикәйәһе.

**23 декабрҙә "Ҡатынымдың исеме Морис"** комедияһы.

**23 декабрҙә** 13.00 сәғәттә, **25-26 декабрҙә** 11.00 һәм 13.00 сәғәттә, 27 декабрҙә 11.00 сәғәттә, **29-30 декабрҙә** 11.00 һәм 13.00 сәғәттә балалар өсөн Г.Х.Андерсендың **"Үҙ йөрәгенде тыңла"** әкиәте. Шыршы тирәләй иһә "Винни Пух ҡунаҡҡа бара" тигән Яңы йыл тамашаһы.

**25, 29-30 декабрҙә "Һаумы, Яңы йыл!" байрам тамашаһы.**

✓ Кәрәкле ваҡытта әйтелгән һүҙ мөғжизә тыуҙыра һәм ауыр хәлдән ҡотҡара. Һүҙ ярҙамында тотош бер система төҙөп була.

(Иоганн Гете).



ЙӘШТӘР - ЙӘШТӘРСӘ

# ТАМАШАСЫ...

## беҙҙең ҡурайға бейеһен

Бер төркөм йәш артистар Мәскәүҙең М.С.Щепкин исемендәге Юғары театр училищеһын тамамлап, М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында эш башлап ебәреүгә лә байтаҡ ваҡыт үтте. Был йәштәр хәҙер театрға еректе, үҙ кешегә әйләнде, кемдәрелер нимәгә һәләтле икәнен танытырға өлгөрҙө, кемдәрелер әле үҙҙәренең йондоҙло сәғәтен көтә. Иншаллаһ, һуғыр ул сәғәт. Ә әле беҙ Башҡорт дәүләт академия драма театрының 90 йыллыҡ юбилейы уңайынан ошо йәш көстәрҙең икәүһе - Ейәнсура егете Артур ҠУНАҠБАЕВ һәм Өфө ҡыҙы Милена СИРАЕВА менән әңгәмә ҡорҙоҡ:



**"Белем артынан Ҡытайға ла бар", - тиҙәр. Мәскәүҙә белем алыу, ундағы тормош мәктәбен үтеү һеҙгә нимә бирҙе?**

**Артур:** Тыуған төйәктәребеҙҙән айырылып, тәү тапҡыр алыҫҡа сығып китеү беҙҙе иң беренсе сиратта үҙаллы булырға, үҙең тураһында үҙең хәстәрләргә өйрәтте. Беҙ берҙәм, дуҫ йәшәнек, бүтәндәргә ҡарата ла ярҙамсыл, ихлас, йомарт булдыҡ. Шуныһы менән башҡорт студияһы бигерәк тә айырылып тора ине. Беҙҙә унда әле булһа йыйы итеп хәтерләйҙәр. Беҙҙең менән бер осорҙа уҡыған осетиндар, кореялылар, рустар менән дә яҡшы мөнәсәбәттә булдыҡ. Беҙгә Мәскәүҙең башҡа юғары уҡыу йорттарында белем алған башҡорт йәштәре килә торғайны. Кемдер ҡурай уйнай, ҡайһы бүлмәләлер йыр ағыла. Барыбыҙ ҙа рәхәтләнеп, үҙебеҙҙең телдә аралашабыҙ, беҙҙең янда барыһы ла үҙҙәрен Башҡортостанда көйөк хис итә ине. Беҙгә ынтылып торҙолар, спектаклдәребеҙгә ихлас йөрөнөләр. Беҙ үҙенә күрә башҡорттарҙы бергә йыйыр утрау кеүек инек.

**Милена:** Беҙ был училищела 25 кеше уҡыныҡ, атаҡтың тулайым бер коридорын биләп тора инек. Беҙгә ҡарап, комендант та, башҡа студенттар ҙа һоҡлана инеләр. Ашарға бешереү буйынса ла беҙ уңғандар, татыуҙар иҫәбендә, таҙалыҡ, тәртип буйынса ла өлгө булып торҙоҡ. Мәскәүҙәге тормош, Өфөнән айырмалы рәүештә, ҡайнап тора, ул әкрендәрҙе яратмай, тиҙлек, етеҙлек талап итә. Өфөлә кешеләр йәйләп ҡына баҫып, ҡабаланмай ғына йөрөгән кеүек. Кейем мәҙәниәтенә килгәндә лә ҡырҡа айырма күҙәтелә. Мәскәүҙә нимә уңайлы, шуны кейергә тырышалар һәм кешенең кейеменә артыҡ иғтибар бирмәйҙәр. Ә беҙҙең баш ҡалала матур, зауыҡ менән кейенәләр. Беҙҙә шуға ла ҡатын-ҡыҙҙар - нәзәкәтле, ирҙәр тәрбиәле күренә.

**Һеҙ хәҙер төрлө театр мәктәбен үткән артистар араһында эшләйһегеҙ. Айырма һиҙеләме?**

**Артур:** Театр мәктәбенә килгәндә, ҡайҙа ла бер инде ул. Өфө сәнғәт академияһы студенттарының диплом эштәрен ҡарағаныбыҙ бар, уны тамамлаған артистар менән бергә эшләйбеҙ, әллә ни айырма юҡ һымаҡ. Ә бына өлкән быуын артистары менән айырмабыҙ һиҙелә, әлбиттә. Улар күберәк дикцияға, интонацияға иғтибар итһә, беҙ хәрәкәткә баҫым яһайбыҙ.

**Милена:** Мәскәүҙә беҙҙә сәхнә теленән рус уҡытыусылары уҡытҡас, телебеҙ бер аҙ ярлыланды. Спектаклдәрҙә башҡорт телендә ҡуябыҙ, ә улар беҙҙең телде аңламағас, дикциялағы хаталарыбыҙға иғтибар бирмәне. Ә Өфөлә үҙебеҙҙең актер-уҡытыусылар уҡытҡас, был яҡтан күпкә еңелерәк. Улар башҡорт театрында сәхнә теле нисек булырға тейешлеген яҡшы белеп өйрәтә. Ә шулай ҙа башҡорт теле буйынса уҡытыусыбыҙ Рәсимә Ураҡсина башҡорт телендә матур һөйләшеү, һүҙлек запасыбыҙҙы арттырыу буйынса бик ныҡ ярҙам итте.

**Театр мәктәбе бер үк булһа ла, һәр театрҙа үҙенә генә хас ҡанундар йәшәй. Башҡорт дәүләт академия драма театры һеҙгә ниндәй сәхнә һабағы бирә? Бында ике йылдан ашыу эшләү дәүеренда үҙегеҙҙе ижади яҡтан аса алдығыҙмы?**

**Артур:** Театрға эшкә ҡайтҡас, беҙҙең һәр беребеҙҙе оло актерҙар шефлығына бирҙеләр. Мине, мәҫәлән, Сара Буранбаеваға, Миләнаны Гөлли Мөбәрәковаға беркеттеләр. Улар беҙҙе үҙ балалары кеүек күреп, үҙ ҡанаты аҫтына алып, ҡарап, ҡурсалап йөрөтәләр, кәңәштәрен етерәләр. Уҡыған саҡта бәләкәй сәхнәлә уйнағас, тауышҡа артыҡ көс һалмай торғайныҡ, бында зал ҙур булғас, өлкән артистар беҙгә ҡысҡырыбыраҡ һөйләргә өйрәтә.

**Милена:** Мәскәүҙә беҙ уҡыу театрында ғына шөғөлләнһәк, бында ысын театрға килеп индек, ҙур тамашасы алдында сығыш яһайбыҙ. Өлкән артистар яңы спектакль әҙерләгән һайын төрлө кәңәштәрен бирә, текст өҫтөндә эшләргә, ролде асырға ярҙам итә. Аллаға шөкөр, беҙгә ролдәр ҙә биреп торалар. Ошо ике йыл эсендә төрлө образдар тыуҙырырға ла өлгөрҙөк. Артур һәм мин Мәскәүҙә эшләп алып ҡайтҡан "Эскәмйә" спектакле менән дә сығыш яһайбыҙ.

**Артур:** Актер кеше сәхнәгә тәү башлап сыҡҡандан алып, үҙенең бөтә ижад ғүмере буйы эҙләнергә, үҙен асырға ынтылырға тейеш. Әлеге ваҡытта мин үҙемде тулыһынса аса алдым, тип әйтә алмайым. Ә шулай ҙа, Аллаға шөкөр, массовкала ғына йөрөмәйбеҙ, ролдәр бирел торалар.

**Хәҙерге йәштәргә ниндәй театр кәрәк, тип уйлайһығыҙ?**

**Милена:** Йәштәр өсөн наркоманлыҡҡа, эскелеккә ҡаршы көрәште сағылдырған спектаклдәр ҡуйыу бөгөнгө көн өсөн бик актуаль. Шулай уҡ йәштәрҙең үҙ телен белмәүе, гәзит-журнал, китап уҡымауы ла көнүҙәк проблема булып тора. Йәштәр бит хәҙер күберәк интернеттан айырыла алмай. Ә был киләсәк быуындың рухыҙ, фекерһеҙ, уйһыҙ, маҡсатһыҙ булып үҫеүенә алып киләсәк. Уларҙың интеллектуаль кимәлен күтәрә торған спектаклдәр күберәк булырға тейеш.

**Артур:** Әлеге көндә беҙҙең театрҙа барған "Мулла" спектакленә күберәк йәш быуын йөрөй. Ә был нимә тураһында һөйләй һуң? Тимәк, йәш быуынды тап ошо спектаклдә күтәрелгән проблемалар борсой, улар шәриғәт ҡушҡанса йәшәгәндә генә ике донъяла ла бәхетле тормошҡа өлгәшеп булыуын яҡшы аңлай. Ғөмүмән, һуңғы ваҡытта йәштәрҙең динге килеүе, рухи-әхлаҡи яҡтан үҫешеүе ҡыуандыра.

Әгәр реклама шәп эшләһә, йәштәрҙе театрға тағы ла күберәк йәлеп итергә мөмкин булыр ине. Унан һуң, хәҙерге тамашасы артыҡ уйланырға, фекер йөрөтөргә яратмай. Уға ял итеү, күңел асыу өсөн шоу, тамаша, комедия кәрәк. Тимәк, беҙҙең бурыс - тамашасы ҡурайына ғына бейеү түгел, ә уларҙы рухи донъяға йәлеп итеү, уйланырға өйрәтеү.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Беҙҙең йәштәр ҡайҙа ла һынатмай. Уларҙың ихласлығы, берҙәмлеге һәм әүҙемлеге кешеләрҙең ихтирамын яуларға, тормоштоң һынауҙарын бергә үтергә, теләһә ҡайһы өлкәлә лә уңыш яуларға ярҙам итә.**

Динара ЯҠШЫБАЕВА.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.

# БАШЫҢДЫ ЭШЛӘТҺӘҢ...

## пантера ла ҡурҡыныс түгел

Үҙеңә ҙур ҡәнәғәтләнеү биргән эште эшләйһең икән, тимәк, һин - азат.

**(Вольтер).**

Йәшәйештең төп һорауы -"Мин нимә ала алам?"түгел, ә "Мин нимә бирә алам?"

**(Роберт Баден-Пауэлл).**

Донъяла бик күп мөғжизәләр бар, әммә кешенең үҙенән дә ҙурыраҡ мөғжизә юҡ.

**(Софокл).**

Кәрәкле ваҡытта әйтелгән һүҙ мөғжизә тыуҙыра һәм ауыр хәлдән ҡотҡара. Һүҙ ярҙамында тотош бер система төҙөп була.

**(Иоганн Гете).**

Мин иртәгәнән ҡурҡмайым, сөнки мин кисәгене күрҙем һәм бөгөнгөнө яратам.

**(Уильям Уайт).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер һунарсы этен эйәртеп Африка джунглиҙарына һунарға сыға. Эте йәш һәм тәжрибәһеҙ була: күбәләктәр ҡыуып йөрөп, джунглиға инеп аҙашыуын һиҙмәй ҙә ҡала. Бына бер ваҡыт ул үҙенә ҙур пантера яҡынлашып килгәнен күреп ҡала. Эт был ҡурҡыныстан нисек ҡотолоу тураһында баш вата башлай. Һәм шунда үҙенән йыраҡ түгел ҙур бер хайуандың һөйәктәре ятыуын күреп ҡала. Тиҙ генә шул һөйәктәр янына барып, уларҙы тәмләп кимерә башлай. Пантера яҡынлағас, ялана-ялана, эт үҙ алдына былай тип һөйләнә: "Их, ҡалай тәмле булды был пантера! Тағын бер ошондай пантера табып ашайһы ине бит әле..." Быны ишетеп ҡалған пантера килгән еренән туҡтап ҡала һәм ҡурҡып кире сигенә лә, артына боролоп, сабып китә.**

**Был хәлде күҙәтеп ултырыусы маймыл пантераны ҡыуып етә һәм уға дөрөҫлөктө аса. Пантераның асыуы ҡабара һәм маймылға:"Әйҙә, ултыр арҡама, хәҙер аҡылға ултыртам мин ул этте", - ти. Арҡаһына маймылды ултыртып алып, пантера эт тороп ҡалған урынға ҡарай саба. Эт маймылдың пантераға үҙе тураһында ошаҡлауын ишетә, уларҙың уға табан сабып килеүҙәрен дә күрә. Ләкин ҡасып китмәй, уларға арты менән боролоп, урынында ултыра бирә. Пантера килеп етеп, ҡысҡырырға ауыҙ асҡанда ғына эт үҙ алдына һөйләнгәндәй итеп, былай ти:"Әй, йүнһеҙ ҙә инде был маймыл! Ярты сәғәт элек үк мин уны бер пантера табып алып килергә ебәрҙем, ә ул һаман юҡ та юҡ..."**

**Тормошта ла шулай: аҙ ғына башыңды эшләтһәң, һәр һорауға - яуап, һәр ауырлыҡтан сығырға юл табырға була.**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
Гөлфиә ЯНБАЕВА.
Мөхәрририәт:
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Динара ЯҠШЫБАЕВА,
Таһир ИШКИНИН.

Беҙҙең адрес:
450005, Өфө ҡалаһы,
Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: info@kiskeufa.ru
kiskeufa@ufacom.ru
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Баш мөхәррир урынбаҫары 246-03-24
Бухгалтерия 246-03-23
Хәбәрселәр 252-39-99
Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44, 246-03-23 телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.
«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673 (льготалы)
Тиражы - 5615
Заказ 5402